ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 апрель (алағарай) 2022

№ 14 (1004)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, арзанға яҙылып ҡалығыҙ! 4 апрелдән 14 апрелгә тиклем республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһығыҙ. 14 апрелдән һуң гәзитебеҙгә яҙылыу хаҡы 757 һум 80 тин буласаҡ. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең быйылғы 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Санкцияға беҙҙең яуап**






3

**Ваҡыт, тарих бар нәмәне...**

**хатта йырҙарҙы ла үҙ урынына ҡуясаҡ**





8-9

**Бына шундай театр бар!**





11

**Картуф үҫтерәйек,**

**мал ҡураларыбыҙҙы йәнләндерәйек!**





12

**ТВ-программа** 14


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Бөгөн кемгәлер һалынмай, әҙергә бәҙерҙе көтмәй, үҙ көнөңдө үҙең күреү, үҙ йүнеңде үҙең йүнләү заманы килгәнен аңламағандарға ниндәй кәңәш һүҙе әйтерһегеҙ?

***Гүзәл МОНАСИПОВА, Баймаҡ районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Бөтөн ил генә түгел, донъя күләмендә ҡатмарлы осорҙа йәшәй башланыҡ. Бындай ваҡытта барсабыҙға ла тыныс һәм сабыр булыу кәрәк, тип ҡат-ҡат ҡабатлағы килә. Санкциялар тип хәүефләнмәйек, беҙ, ауыл халҡы, былай ҙа сит илдәрҙән килтерелгәнде һатып алырға әүәҫ түгел инек. Табындарыбыҙҙы үҙебеҙҙең милли ризыҡтарыбыҙ биҙәһен, милли эсемлектәребеҙҙән өҙөлмәйек. Сит илдең кока-колаһына ҡарағанда, үҙебеҙ яһаған буҙа менән ҡымыҙ йөҙ тапҡырға өҫтөн: шифалы, экологик таҙа һәм тәбиғи эсемлек. Юҡҡа ғына батырҙар эсемлеге тип йөрөтөлмәй бит улар.

Әле бына тап йәшелсә орлоҡтары, үҫентеләре әҙерләй торған ваҡыт. Помидор, борос, кәбеҫтә кеүек йәшелсә үҫентеләрен алдан уҡ шыттырып, тәрбиәләп, аҙаҡ түтәлдәргә күсереп ултыртыу иртә һәм мул уңыш бирә, сыҙам була. Уларҙың әллә күпме сорттарын үҫтереүсе оҫта баҡсасыларыбыҙ күп. Картуфты ла мул сәсәбеҙ, үҙебеҙгә лә, артығын һатырға ла етә. Быйыл да ошо матур һәм файҙалы шөғөлдәребеҙгә, ғәҙәтебеҙгә тоғро ҡалайыҡ, милләттәштәр! Алма, сейә, ҡарағат, ҡурай еләге, слива кеүек еләк-емеш ағастары һәм ҡыуаҡтары ла беҙҙә күпләп үҫә, был тәбиғи витаминдарға ла иғтибар бирәйек. Ауылдарҙа төрлө йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар өсөн "Баҡсасы", "Сәскә үҫтереүселәр","Бүлмә гөлдәре үҫтереүселәр" түңәрәктәре эшен йәйелдерәйек, был шөғөлдәрҙе йәш быуынға аманат итеп тапшырайыҡ, уларҙы ла өйрәтәйек, өй яны баҡсалары үҫтереү буйынса бай тәжрибәбеҙ менән уртаҡлашайыҡ.

Районыбыҙҙағы сауҙа нөктәләрендә бөтә төр аҙыҡ-түлек бар: теләгәнеңде һайлап, һатып ал ғына! Ризыҡ ҡытлығы янай тип ғауғалап, халыҡ араһында паника тыуҙырыусыларға, кеше башын бутаусыларға ышанмайыҡ. Илдәге хәлдәргә айыҡ аҡыл һәм һалҡын ҡан менән ҡарап, түҙемле, сабыр булайыҡ. Ауыр ваҡыттар үтер, тик сабырлыҡ кәрәк һәм үҙебеҙгә лә ҡул ҡаушырып ултырмай, файҙалы эштәр менән булыу фарыз. Әлеге әйткәнсә, күп итеп картуф, башҡа йәшелсә үҫтереү, мал-тауарыбыҙҙы бағыу киләһе көндәребеҙгә тыныс һәм ышанысլы ҡарарға ярҙам итер.

## БАШ ҠАЛАМ

# ҮҘӘК КЕНӘ ТҮГЕЛ...

## ситтәге биҫтәләр ҙә онотолмаһын



**Уҙған быуаттың 90-сы йылдар аҙағында тәүге тапҡыр баш ҡалаға килдем. Үҙәктә эштәрҙе тамамлағас, атайым менән Инорс биҫтәһенә юлландыҡ. Беренсенән, районның исеменә аптыраным. Икенсенән, Телеүҙәктән Инорсҡа тиклем юл шул тиклем оҙаҡ тойолдо, хатта яңылышып, Өфөнән бөтөнләй ситкә сығып китмәнекме икән, тигән уйҙар башҡа килеп бөттө. Ниһайәт, Инорс тип аталған районға килеп ингәс, кәрәкле туҡталышҡа тиклем тағы ла байтаҡ барҙыҡ. Шул ваҡытта уҡ әле Инорс биҫтәһенең ҙур район икәне күңелгә һеңеп ҡалған. Икенсе көнөнә БДУ-ға тиклем юл да оҙаҡ булды һәм мин "Башҡаса бер ҡасан да был яҡҡа килмәйем", тип уйлап ҡуйҙым.**

Ләкин тап киреһе килеп сыҡты. Уҡыуҙы тамамлағас, ошо районға эшкә килдем һәм ошонда төпләндем. Хәҙер Инорс биҫтәһенән ситтә йәшәүемде күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ҡайһы берәүҙәр беҙҙең районды һоро һәм күҙгә күренеп бармаған урын, тип әйтәләр, әммә минең өсөн ул иң яҡшы биҫтә. Бында күп ҡатлы йорттар менән бергә шәхси йорттар ҙа күп. Шуға күрә мин йәйге йылы кистәрҙә ошондай ағас йортло урамдарҙан үтергә яратам, был миңә үҙ ауылымды хәтерләтә.

Беҙҙә, мәҫәлән, әле булһа урам буйлап урынлашҡан сауҙа-сервис комплексы эшләй. Бындай урын Өфөлә башҡаса юҡ, буғай. Шәхсән үҙем күргәнем юҡ һуңғы ваҡытта.

Баш ҡала буйлап арт-объекттар ҡуйыу бик модалы булып китте. Беҙҙә лә был яңы тенденция урап үтмәне. Ферин һәм Йәнәби урамдарын сикләгән скверҙа ҡанаттарын киң йәйеп торған бөркөт арт-объекты урын алған. Өфө моторҙар етештереү берекмәһе биналарының береһе янында ҡуйылған СУ-27 самолеты, "Ваҡыт машинаһы" скульптура композицияһы менән дә маҡтана алабыҙ. Ҡайһы районның әле үҙ ваҡыт машинаһы бар!

Әлбиттә, башҡа райондарҙағы кеүек үк, беҙҙә лә эшләй торған эштәр бик күп. Мәҫәлән, Йылы күлде таҙартып, тирә-яғын төҙөкләндереү тураһында һүҙ бара, был халыҡҡа ял итергә матур урын булыр ине. Уның эргәһендә сквер, спорт объекты төҙөйҙәр, тип ишеттем. Бик яҡшы ниәт, балалар спортҡа ылығыр күпләп. Ләкин бер нәмә төҙөйөм йә төҙөкләндерәм тип, булғанын ватыпемермәһәләр ине. Күл буйында бик матур булып ағастар үҫә, уларға теймәҫтәр, тигән ышаныста ҡалам.

Шулай уҡ иҫке күп ҡатлы йорттар күптән тыштан да, эстән дә капиталь ремонт үткәреүҙе көтә. Йәйәүлеләр өсөн махсус юлдар юҡ тиерлек, велосипедта йөрөргә яратыусыларға махсус юлдар тураһында әлегә тик хыялланабыҙ ғына. Ғөмүмән, юлдар мәсьәләһе иң ҡырҡыуҙарҙың береһе беҙҙең өсөн, сөнки күптән яңы асфальт түшәлмәгән юлдар бик күп. Улар яҙғы-көҙгө миҙгелдәрҙә ямғырҙан һуң үтеп сыға алмаҫлыҡҡа әйләнә. Шулай уҡ урамдарҙы йәшелләндереүгә иғтибар күберәк бүленһә ине.

Тотош ҙур ҡаланы ниндәй мәсьәләләр борсой, бәләкәй биҫтәнең дә хәл итәһе проблемалары шундай уҡ. Шуға күрә, түрәләр баш ҡаланы төҙөкләндереү, йәшелләндереү һәм тағы ла яҡшыртыу буйынса эшләгәндә үҙәктән ситтә ятҡан, әммә шул уҡ Өфөнө тәшкил итеүсе Инорс тураһында ла онотмаһындар ине.

**Сәлим АҠБУЛАТОВ.**

12+

✓ *Баҡса эшенән тыш, мал-тыуар аҫрайым, ҡош-ҡорт үрсетәм: ҡаҙ, өйрәк, күркә, тауыҡтарҙың әллә нисә тоҡомон ит өсөн үҫтерәм. Һатам да, үҙебеҙгә лә, балаларға ла, туғандарға ла күстәнәскә лә "осороп" бөтәм уларҙы.*



Ә ҺЕҘ БЕЛӘҺЕГЕҘМЕ?



# ЭСКӘН ҺЫУЫБЫҘҘА... уран ниндәй кимәлдә?

**Урандың һаулыҡ өсөн зарарлы икәнен ишетеп тә, уҡып та беләбеҙ. Ләкин Менделеев таблицаһында 92-се һан аҫтында торған уран (U тип билдәләнә) ҡайҙан, нисек барлыҡҡа килгән, беҙ эскән һыуға ни рәүешле барып эләгә һәм, иң мөһиме, Башҡортостан райондарында уның күрһәткесе ниндәй миҡдарҙа икәнлегенә күптәр хәбәрҙар түгелдер.**

Шулай итеп, уран киң таралған химик матдә, ул бөтә Ер шары буйлап тупраҡта һәм ташлы тоҡомдарҙа осрай. Ул - радиоактив матдә. Урандың концентрацияһы теге йәки был урында тупраҡ йәки ташлы тоҡом составындағы минерал төрҙәрҙән ныҡ айырыла. Мәҫәлән, гранитта уран кимәленең юғары булыуы күҙәтелергә мөмкин. Бөгөнгө көндә уран - атом энергетикаһы һәм атом ҡоралын етештереү өсөн нигеҙ булып тора.

Һыу составында уран булған минералдарҙы иреткән саҡта ул эсәр һыуға эләгә. Төрлө тәрәнлектәге һыуҙа урандың миҡдары төрлөсә. Мәҫәлән, ҡоҙоҡ йәки һыуы өҫтәрәк булған сығанаҡҡа ҡарағанда артезиан скважиналарҙа уран булыуы күпкә ихтималыраҡ. Гранит, ҡомташ һәм ташлы кристаллик тоҡомло урындарҙа урынлашҡан һыу скважиналарында уран күберәк туплана.

Эсәр һыуҙа урандың химик ағыуы уның радиоактив булыуына ҡарағанда күберәк проблема тыуҙыра. Урандың эсәр һыуҙа мөмкин булған миҡдары бер литрҙа 1,7 миллиграмм тәшкил итә. Урандың күләме күп булған һыу бөйөргә кире тәьҫир итә, тип белдерә ғалимдар.

Геолог Исхаҡ Фәрхетдинов үҙенең хеҙмәттәштәре менән Башҡортостандың төрлө төбәктәренән алынған һыу өлгөләрендә урандың күпме тәшкил итеүен билдәләү өсөн 2016 - 2020-се йылдарҙа һынауҙар үткәргән. Улар республиканың 256 ауыл һәм ҡалаларынан 515 өлгө һыуҙың ҡомағын тикшергән, сөнки нәҡ эсәр һыуҙы ҡайнатҡандан һуң барлыҡҡа килгән ҡомаҡ тирә-яҡта урандың күпме икәнен асыҡ күрһәтеүсе сығанаҡ булып тора.

Тикшереүҙәр Башҡортостандың төньяғында, эҙбишташ күп булған урындарҙа, урандың әҙ булыуын күрһәткән. Ә уран иң күп булған төбәк - республиканың көнбайыш райондары. Ул яҡта ҡыҙыл ҡомташ күп һәм нефть сығарылған урындар бар.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

ИҒТИБАР!

# КЕМ АЛЫҠ?



**Сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат шатбыҙ һәм рәхмәтлебеҙ. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр.**

● Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ, тимәксебеҙ.

● **Почтальондар иғтибарына!** Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Хеҙмәтегеҙҙе һүҙ менән генә түгел, бүләктәребеҙ менән дә билдәләмәксебеҙ. Иң күп "Киске Өфө"гә яҙҙырыусы почта хеҙмәткәрҙәрен бүләктәр көтә.

● **Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың шундай юлдары ла бар:**

- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға 336 һум.

- Коллектив менән яҙылыусыларға (кәмендә 5 дана) гәзит ярты йылға шулай уҡ 336 һумға төшәсәк, уларға баҫманы редакция үҙе килтереп бирәсәк.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: kiskeufa@mail.ru.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Бөгөн кемгәлер һалынмай, әҙергә бәҙерҙе көтмәй, үҙ көнөңдө үҙең күреү, үҙ йүнеңде үҙең йүнләү заманы килгәнен аңламағандарға ниндәй кәңәш һүҙе әйтерһегеҙ?*

***Айгөл МИҢЛЕБАЕВА, Күгәрсен районы Юлдыбай ауылы:*** Рәсәй - Украина мөнәсәбәттәре күңелгә тынғылыҡ бирмәһә лә, был хәлдәрҙең тиҙерәк имен-аман тамамланыуын теләй һәр кем; ерҙә ғәҙеллек, тыныслыҡ тантана итеүенә өмөт менән йәшәлә. Яҙ миҙгеле - үҙе өмөт билдәһе: тормошобоҙҙоң яңырыуына, еребеҙҙең зөмрәт йәшәреүенә, сәскән орлоҡтарыбыҙҙың шытымына, мул уңыш биреренә. Өмөт йәшәтә кешене. Яҙҙың йәмле көндәре менән, дуҫтарым! Һәр көн үҙе бүләк тейеп, ҡәҙерен белеп йәшәйек. Бер нигә ҡарамаҫтан, тормош барыбер матур. Ни эшләйбеҙ тиһәк тә ҡулдан килә, теләк кенә булһын.

Минең баҡса үҫтерергә яратыуымды, ихата, кәртә тултырып мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫрауымды күптәр белә. "Бәйләнештә"ге сәхифәләремдә был турала гел яҙып, төркөмдәштәрем менән хәл-әхүәл уртаҡлашып йәшәйбеҙ. Әле бына "Киске Өфө" мөрәжәғәт иткәс, гәзит уҡыусылар менән дә баҡса эштәренә әҙерлек хаҡында бер нисә һүҙ әйтеп китмәксемен. Ҡатмарлы заманда көн итәбеҙ. Төрлөсә булып китә: аҙыҡ-түлек, йәшелсәгә хаҡтар арта, йәйгә табан ҡытлыҡ булып китеүе лә ихтимал. Шуға күрә һәр кем баҡса тотоп, мал, ҡош-ҡорт аҫрап, иң кәрәкле аҙыҡ-түлекте үҙ хужалығында етештерһә, хәлебеҙ ышаныслыраҡ та булыр, бишләтә хаҡ та сығып китмәҫ кеҫәбеҙҙән. Картуф, кәбеҫтә, сөгөлдөр, кишер, һуғанды ғына һәр кем бағып ҡарап үҫтерә ала бит, бигерәк тә ауыл ерендә. Юғиһә, хәҙер хатта картуф та сәсмәй, һыйыр ҙа көтмәй башланы ҡайһы берәүҙәр, тип яҙалар бит гәзиттәрҙә. Нисек инде, ауылда йәшәп, үҙ тамағыңды үҙең ҡайғыртмай, дәүләткә һалынып ятмаҡ кәрәк! Әлбиттә, тир түгергә кәрәк буласаҡ, ризыҡ үҙенән-үҙе табыныңа килеп ятмай. Баҡса үҫтерәм, уңыш алам, тиһәң, киләһенә әҙерлекте ошо уңышыңды йыйып алыу менән башлайһың да инде. Былтыр көҙ шулай, һәр ваҡыттағыса, улым менән баҫыу яғынан ҡара тупраҡ алып ҡайттыҡ. Яҙ етә башлау менән махсус әҙерләнгән һауыттарға помидор, борос, баклажан, кәбеҫтә, һәр төрлө сәскә сәсә башлайым. Уның өсөн әлеге лә баяғы көҙ үк орлоҡ хәстәрләп ҡуйыу кәрәк. Был яуаплы эш менән ҡайһы саҡ иртәнән кискә тиклем дә булышырға тура килгеләй. Шулай итмәйенсә, мул уңышҡа өмөт тә итеп булмай.Ни сәсһәң - шуны урырһың, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит. Былтыр көҙ, мәҫәлән, төрлө сортлы ҡабаҡ орлоҡтарын киптерергә һалып ҡуйғайным, ә борос орлоҡтарын тәүҙә һыуға һалып алам: төпкә төшөп батҡандары ғына орлоҡҡа эшкинә. Помидор орлоҡтары ла күп миндә, шулай ҙа быйыл уның иң тәмлеһен - малиновка тигәнен сәстем. 9 мартта уҡ. Ни өсөнмө? Сөнки был ай календарында иң уңышлы көн иҫәпләнә. Был иртә сорт июлдә үк ҡыҙарып бешер, тигән өмөттәмен. Баклажандың да, әсе боростоң да икешәр төрлөһөн ултырттым. Ә сәскәләрҙең ниндәйе генә юҡ миндә! Йәшелсә үҫентеләрем күп сыға, түтәлгә, парникка күсереп ултыртҡандан ҡалғанын кешегә таратам, һатып та ебәрәм: иш янына ҡуш, тигәндәй, сөнки ҡайһы бер орлоҡтарҙы һатып алырға ла тура килә, тик мин был эште алдан хәстәрләйем. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр май айы килеп еткәс кенә уянып, орлоҡ эҙләп йүгергеләй башлай. Йыл да картуф, йәшелсә-емештән мул уңыш алам, эшкәртеп бөтөп булмай. Күп итеп, тәмле йәшелсә салаттары эшләйем, тоҙлайым, ҡайһыларын тураҡлап, туңдырғыста һаҡлайым, ваҡтары менән мал-тыуарҙы һыйлайым. Ошо запас ҡыш буйына етә, балаларға, туғандарға күстәнәс итеп тә мул таратам.

Баҡса эшенән тыш, мал-тыуар аҫрайым, ҡош-ҡорт үрсетәм: ҡаҙ, өйрәк, күркә, тауыҡтарҙың әллә нисә тоҡомон ит өсөн үҫтерәм. Һатам да, үҙебеҙгә лә, балаларға ла, туғандарға ла күстәнәскә лә "осороп" бөтәм уларҙы. Заказдар буйынса бәлештәр, ҡомалаҡ икмәге һатып йыйған аҡсаға бер юлы 130 себеш сығарыусы инкубатор һатып алдым. Һуғымға йыл да йылҡы һуябыҙ, күп итеп ҡаҙы, тултырма эшләйем, билмән, манты туңдырам. Ҡыҫҡаһы, йыл әйләнәһенә ит-һөт, май-ҡаймаҡ, эремсек, ҡороттан өҙөлгән юҡ, Аллаға шөкөр. Ауыл ерендә иркенләп, шулайтып та йәшәмәгәс, ни йәме донъяның! Ҡайһы берәүҙәр кеүек зарланып, аҡса, эш юҡлыҡҡа һылтанып ултырһаң, берәү ҙә һиңә ризыҡ килтереп бирмәҫ. Үҙеңә сос булырға, таң һарыһынан тороп, һуң ятырға тура килһә лә, уның ҡарауы, донъяң етеш, ғаиләң туҡ, киләсәгең өмөтлө булыр.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Вирусологтар фаразы буйынса, май уртаһында коронавирустың сираттағы тулҡыны ("стелс-омикрон") башланыуы ихтимал. Һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Ирина Кононова һүҙҙәренсә, республикала коронавирусты иҫкәртеү буйынса эш алып барыла, ләкин яңыраҡ ғәмәлдән сығарылған сикләүҙәрҙең ҡабаттан индерелеүе мөмкин (социаль арауыҡты һаҡлау, битлек кейеү). "Яңы тулҡын еңелерәк үтер тип уйлайбыҙ, сөнки ҡояш әүҙем, ҡала ситендәге участкаларҙа ҡыҙыу эш осоро", - тип билдәләне Кононова.

✓Һуңғы тәүлектә Башҡортостанда 461 кеше коронавирус йоҡторған. Сирлеләрҙең күбеһе элекке кеүек Өфөлә түгел, ә Стәрлетамаҡта теркәлгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Бер тәүлектә ауырыу йоҡтороу осраҡтары буйынса икенсе урында - Дүртөйлө, өсөнсөлә - Дәүләкән. Артабан баш ҡала килә. Республикала сирлеләрҙең дөйөм һаны 280 046-ға еткән. Һуңғы тәүлектә Башҡортостанда коронавирус инфекцияһы диагнозы раҫланған ике кеше вафат булған.

✓Башҡортостандың Мәғариф министрлығында белдереүҙәренсә, "Ауыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашыу өсөн документтар ҡабул итеү 2022 йылдың 15 апрелендә тамамлана. Конкурс һөҙөмтәләре буйынса 2022 йылда ауыл еренә, эшселәр ҡасабаһына, ҡала тибындағы ҡасабаға, 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаға эшкә ҡайтҡан 44 уҡытыусыға 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләнә. Бынан алда Башҡортостанда "Ауыл уҡытыусыһы" программаһының 2023 йылға ҡәҙәр оҙайтылыуы билдәле булды.

✓Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы коронавирус инфекцияһына ҡаршы "Спутник Лайт" вакцинаһын яһатыуҙы хупланы. Яңы инструкцияла шундай мәғлүмәт бар: ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарға 22-се аҙнанан прививка эшләтергә кәңәш ителә. Бала имеҙгән осорҙа ҡатын-ҡыҙҙарға шулай уҡ вакцинация алдынан табип менән кәңәшләшергә кәрәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда прививка эшләтеү өсөн "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында, 122 йәки 8-800-2000-112 телефондары буйынса яҙылырға мөмкин.

✓ ***Кемделер туҡтауһыҙ әрләү, ғәйепләү, зарланыуҙарҙы бер яҡҡа ҡуйып, ең һыҙғанып үҙебеҙгә тотонорға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Бигерәк тә ғаиләһе ҙур булған кешеләргә баҡса үҫтереү - заман талабы, тип әйтер инем.***

БЫНАҒАЙЫШ!

# САНКЦИЯҒА БЕҘҘЕҢ ЯУАП




**...Икенсе яҡтан, был санкция тигәне күп нәмәгә күҙҙе аса түгелме? Бер заман уянып китһәк, ни күрәбеҙ: беҙҙе ашатыусы Ашан да, Макдоналдс менән KFC ла юҡ; өҫтөбөҙҙө бөтәйтеүсе сит ил кейем-һалым брендтарының бутиктары ла ишектәрен бикләгән; хатта косметикаһы ла беҙҙе йыуындырып-биҙәндереүҙән баш тарта, имеш.**

Ошо хәл тәүҙәрәк, нишләптер, бөйөк сатирик М.Салтыков-Щедриндың бер төн эсендә ашнаҡсыһыҙ, хеҙмәтсеһеҙ, йыйыштырыусыһыҙ тороп ҡалған помещигын күҙ алдына килтерҙе. Бәй, шулай булмай: бөгөн беҙ үҙебеҙ тегеп кейенергә, үҙебеҙ үҫтереп туҡланырға, үҙебеҙ етештереп ҡулланырға онотоп барабыҙ түгелме, йәмәғәт? Илдә үҙ көсөбөҙ менән һәр төрлө ҡулланыу тауарҙары, аҙыҡ-түлек һәм хеҙмәттәр күрһәтеү кимәле ни бары 30 процент тәшкил итә, ти мәғлүмәтле белгестәр. Ә ҡалған проценттарҙы сит илдәрҙән һатып ҡына алабыҙ икән, үәт ғибрәт! Дөрөҫөрәге, уларҙың компаниялары беҙҙе тамам үҙҙәренә бәйле итеп, буйһондороп торған да баһа. Баяғы ғәфләт йоҡоһолор, күрәһең: булһа - булды, тип әҙерҙе һатып алып, әҙерҙе кейеп, ҡай арала шулай тамам битараф һәм пассив ҡулланыусыға әйләнгәнбеҙ икән? Дөрөҫөн әйткәндә, үпкәләштән булмаһын, паразиттарса йәшәү рәүеше була түгелме был?

Әҙергә бәҙерлек айырыуса еңел сәнәғәт һәм аҙыҡ-түлек етештереү өлкәһенә ҡағыла. Макдоналдс, Бургер Кинг менән Ашан ашата, төрөк менән ҡытай кейендерә... Башҡа нимә кәрәк? Ҡалаларҙа эшләп торған үҙебеҙҙең бына тигән ашханаларыбыҙ, самауырлы ҡайнар сәйханаларыбыҙ сит ил брендтары тарафынан ҡыҫырыҡланып, һәтигәнсе юҡҡа сығарылды. Бер "Пышка"быҙ тороп ҡалды, тик ундағы хаҡтарға яҡын барырлыҡ түгел. Эре сауҙа-сервис үҙәктәрен сит илдәрҙең Zara, Stradivarius, Bershka, Pull and Bear, H&M, GloriaJeans һәм башҡа шундай бутиктар баҫып алды һәм улар күбеһенсә йәштәр һәм урта йәштәгеләрҙе йәлеп итһә, өлкәндәр ҡытай-төрөк тауары менән дә хушһынды. Рәсәйҙең дә бар тиҙәр ул әлеге компанияларҙан һис кәм булмаған брендтары, ләкин улар, күрәһең, юғары мода ихтыяжын ҡайғыртаалыр, шуға улар хаҡында халыҡҡа бер ни ҙә мәғлүм түгел. Сит ил етештереүсе-монстрҙар урындағы башланғыстарҙы быуа тора, ахыры.

Аҙыҡ-түлек баҙарында ла аңлайышһыҙ хәлдәр барҙы. Үҙебеҙҙең крәҫтиән һәм фермер хужалыҡтары, эре агрокомплекстар уңышлы ғына эшләүгә ҡарамаҫтан, магазиндарҙа фәҡәт Египет һәм Израиль ҡомлоҡтарында үҫтерелгән йә компьютерлаштырылған системалы гигант теплицаларҙан килтерелгән картуф-кишер-помидор ғына тулып ятты. Үҙебеҙҙең "Алексеевка" совхозында йыл әйләнәһенә ҡыяр, помидор, борос, баклажан, ер еләге һәм башҡа тағы әллә нәмәләр үҫтерелеүен легенда итеп һөйләгәндәрен генә ишетә инек, уның ҡарауы, фирма магазиндарында тоҙло кәбеҫтә менән ҡыярҙан башҡаһы һирәк була ине. Үкенескә, бөгөн был хужалыҡтың хәле мөшкөл, тиҙәр: һатып ебәрерҙәрме, "ҡолағынан" тартып көрсөктән сығарырҙармы - киләсәк күрһәтер. Йәл, ә бына тап бөгөн кәрәк бит илгә ана шундай хужалыҡтар. Импорт продукцияны үҙебеҙҙең тауарҙар менән лайыҡлы алыштырыр өсөн.

Хәйер, эксперттар ышандырыуынса, илдә аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ булмаясаҡ, уныһы раҫ. Ә бына электроника һәм автомобиль, автозапчастар һәм комплектлау изделиелары, медицина техникаһы, фармацевтика, автомобиль һәм авиация төҙөлөшө, резина һәм пластмасса изделиелар, электр ҡорамалдары етештереү һәм башҡа шуның кеүек өлкәләргә ауырға тура киләсәк, ти белгестәр. Уйлап ҡараһаң, бер бәләкәй генә деталь дә ҙур проблема килтереп тыуҙырырға һәләтле бөгөн, сөнки советтарҙан һуңғы осорҙа ла әле эшләп килгән күп завод һәм фабрикалар көрсөккә ҡалып, бер-бер артлы ябылып бөттө, дәүләт тарафынан ватан ҡеүәттәрен һаҡлап ҡалыу өсөн бер ни ҙә эшләнмәне. 90-сы йылдар ахырында эштән туҡтаған "Вега" радиозаводының да, Пермь крайындағы аныҡ машиналар төҙөү предприятиеһы ла, "Рекорд" та, "Биохим" да, башҡалары ла - "барлығы 78 мең завод баҙар оккупанттары менән тиңһеҙ көрәштә" ябылыуға дусар ителде, тип яҙа Newsland мәғлүмәт порталы.

Әлеге иҫкә алынған "бәләкәй генә" деталь - ул Тайвань тигән бәләкәй генә биҫтәлә эшләнеүсе юғары технологиялы чиптар. Сәнәғәт тармаҡтары, энергетика, транспорт, хатта финанс та ошо ярымүткәргес электроникаһыҙ эшләй алмай. Әлеге Тайвань, Рәсәйгә ҡаршы санкцияларға ҡушылып, беҙҙе чиптар менән тәьмин итеүҙән баш тартты. Уны биҫтә тип атауҙың ғиләһе шул: рәсми рәүештә Ҡытайға ҡараған һәм уның территорияһындағы был утрау тулыһынса танылыу алмаған ил иҫәпләнә, ә Ҡытай уны, ғөмүмән, үҙенә буйһондормаҡсы. Был ыҙғыштан, бәлки, беҙгә лә өлөш сығыр? Ҡытайҙың сәнәғәт министры хәрби көс ҡулланып булһа ла Рәсәйгә чиптар ебәреүҙе май баштарына яйға һалырға ниәтләй, ти. Ышанырғамы быға, юҡмы, әммә интернет буйлап шундай хәбәр йөрөй. Ә бит ошо чиптарҙы эшләү өсөн кремний менән неон да, палладий ҙа үҙебеҙҙә табыла, шулай булғас, ниңә был кәрәкле, мөһим деталде үҙебеҙҙә етештермәҫкә? Ниңә бөрсәләй генә ярым-ил ишаратына йөҙ һыуы түгеп инәлергә, кәмһенергә? Ҡайҙа Рәсәйҙең элекке держава ҡеүәте, ҡайҙа беҙҙең гөрләп торған завод-фабрикалар, эшсе синыф ҡайҙа?

Эйе, хәҡиҡәт үҙгәрмәй: бөтәһе өсөн дә бер көн яуап тоторға тура килә шул. Элекке данды, абруйҙы ең һыҙғанып тотоноп, фиҙаҡәр хеҙмәт менән генә ҡайтарырбыҙ, ҡайтарһаҡ. Бына шул булыр санкцияларға беҙҙең яуап!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

## *Бөгөн кемгәлер һалынмай, әҙергә бәҙерҙе көтмәй, үҙ көнөңдө үҙең күреү, үҙ йүнеңде үҙең йүнләү заманы килгәнен аңламағандарға ниндәй кәңәш һуҙе әйтерһегеҙ?*

***Рәйес ӘҺЛИУЛЛИН, пенсионер:*** Ҡалала йәшәп, бөгөн тулыһынса магазин ризығына ҡарап ултырып булмай. Үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: хаҡтар үрле-ҡырлы "һикерә". Хөкүмәт ниндәйҙер ҡарарҙар сығарып, тәү кәрәк аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙы көйләргә тырышыу менән әллә ни үҙгәреш һиҙелмәй, сөнки етештереүселәрҙең дә, арадашсыларҙың да үҙ туҡһаны туҡһан. Икенсе яҡтан, уларҙы ла әллә ни ғәйепләп булмайҙыр: улар ҙа бит етештереү сараларын, яғыулыҡ һәм минераль ашламаларҙы арзанға һатып ала алмайҙыр. Шуға күрә, кемделер туҡтауһыҙ әрләү, ғәйепләү, зарланыуҙарҙы бер яҡҡа ҡуйып, ең һыҙғанып үҙебеҙгә тотонорға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Бигерәк тә ғаиләһе ҙур булған кешеләргә баҡса үҫтереү - заман талабы, тип әйтер инем хатта. Һуң, шулай булмайса: картуфтың картуфын килолап магазин йә баҙарҙан ташы әле! Магазиндыҡы, билдәле, насар, ваҡ йә яртыһы серек булып сыҡһа, ҡулдан алыу ҡиммәткә төшә. Бына шунан үҙеңә үҙең үҫтереп ашауҙан да яҡшыһы, отошлоһо юҡ икәнде аңлайһың.

Беҙ күптән баҡсалы, эшләп йөрөгән саҡтарҙан уҡ. Әле иһә ҡатыным менән икебеҙ ҙә "йәш" пенсионерҙар, ваҡыт күп, баҡсанан ҡайтҡан да юҡ. Бигерәк тә йәйге селләлә таш ҡалала ятыуҙы күҙ алдына ла килтерә алмайым. Баҡсала һулыш та иркенерәк. Һауа ла таҙараҡ. Етмәһә, былтыр баҡса уртаһына яһалма бассейн да эшләп ҡуйҙыҡ. Ейәнсәрҙәр ҙә рәхәтләнә, үҙебеҙ ҙә сумып сығырға ҡаршы түгел. Теләһәң, мунсаға рәхим ит! Ә шулай ҙа баҡсаның иң мөһим, бөгөн бигерәк тә көнүҙәк өҫтөнлөгө - ғаиләнде етерлек кимәлдә картуф һәм йәшелсә-емеш менән тәьмин итеү. Ике йыл элек баҡса участкаһы янынан махсус кафтуф сәсеү өсөн генә 4-5 сутый ер һатып алғайным, әле шуға ҡыуанып бөтә алмайым. Тимәк, баҡсабыҙҙа башҡа төрлө йәшелсә-емеште лә күберәк ултыртырға мөмкин хәҙер. Үҙебеҙгә лә, балаларға ғына түгел, хатта һатырға ла артып ҡала. Орлоҡҡа ла һалып ҡуяһың, тик бына көнөн генә бирһен Хоҙай. Юғиһә, ҡоролоҡ йылы картуфҡа ла һыу һибеп үҫтерергә тура килгеләй. Әйтеүемсә, баҡса ерендә помидор менән кәбеҫтәнең төрлө сорттарын, бынан тыш, һуған, һарымһаҡ, кишер, сөгөлдөр, ҡабаҡ, борос, ҡыяр - һәммәһен дә тултырып сәсергә һәм мул уңыш алырға була. Ә инде ер еләге, ҡарағат, ҡурай еләге, алма, груша, сейә, слива кеүек емеш-еләкте эшкәртеп тә, туңдырып та, киптереп тәҙыҡ ҡуба ҡатыным. Бына, исмаһам, ризыҡ! Шуларҙың бөтәһен дә һатып алып ҡара әле - бер ниндәй эш хаҡың да, пенсияң да етмәҫ, ә былай, үҙең үҫтерһәң - бушлай килә бөтәһе лә. Тик эшләргә кәрәк. Бер тигәс тә, хәрәкәт, физик хеҙмәт, ҡояш, һыу һәм һауа организмды сыныҡтыра, тәбиғи Д витаминына туйындыра һәм шулай итеп, иң шәп һаулыҡ сығанағы булып тора.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика муниципаль берәмектәренең XII йыйынын һәм 2022 йылда Урындағы үҙидара көнөнә арналған сараларҙы уҙғарырға ҡушты. Съезд уҙғарыу тураһында ҡарар "Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы тәҡдиме буйынса ҡабул ителде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был аҙнала Украинала барған махсус операцияла һәләк булған хәрбиҙәрҙең ғаиләләренә аҡса түләй башларға ҡушты. "Мәрхүмдәрҙең ғаиләләренә 2 миллион һум аҡса бүлергә һөйләшеп килешкәйнек. Республика хәрби комиссариатынан ошо аҙнала уҡ аҡса түләй башлауығыҙҙы һорайым. Был бик мөһим", - тине республика етәксеһе Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә.

✓Инвалидлыҡ буйынса пенсия автоматик рәүештә тәғәйенләнә башлай, тип вәғәҙәләне Рәсәй премьер-министры Михаил Мишустин. "Тейешле пенсия алыу өсөн ғариза бирергә кәрәкмәй, ул автоматик рәүештә тәғәйенләнә, аҡса инвалидлыҡты рәсмиләштергәс тә түләнә", - тине министрҙар кабинеты башлығы.

✓Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса дәүләт комитеты бойороғо менән 1 апрелдән пассажирҙарға "Алға" картаһы менән йөрөү - 28 һумға, ҡулаҡса менән түләгәндә 33 һумға төшә. Экспреста юл хаҡы хәҙер 40 һум тора. Бынан тыш, ҡала яны автобустарында тариф бер саҡрым өсөн 3,3 һум була, ә багажды ташыу - 27 һум.

✓Башҡортостанда махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләрендә һыу һәм урман ҡоштарына яҙғы һунар миҙгеле асыла. Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 9 апрелдән 18-енә тиклем һунар итергә була. "Күләш" айырым структур бүлексәһе биләмәһендә һунар өсөн рөхсәт ҡағыҙын теләгән һәр кем алырға мөмкин. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн 8(347) 276-85-55 номеры буйынса шылтыратырға кәрәк.

✓Владимир Путин 8-17 йәшлек бала тәрбиәләгән ғаиләләргә түләүҙәр тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Аҡса мохтаждарға түләнергә тейеш. Был башланғыс тураһында дәүләт башлығы 8 мартта белдерҙе. Ярҙам сараһы 1 апрелдән ғәмәлгә индерелә, аҡса 2022 йылдың майында түләнә башлай. Әйткәндәй, түләүҙәр килеме йән башына йәшәү минимумы дәүмәленән артмаған ғаиләләргә тапшырыла. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре сайтында бирергә, һуңынан Рәсәй Пенсия фонды бүлексәләренә мөрәжәғәт итергә мөмкин.

*✓ Чайлдфри идеологияһының таралыуы илебеҙҙәге дәүләт сәйәсәтенә ҡаршы килә, йәмәғәт институттарының тарҡалыуына һәм халыҡтың күпләп кәмеүенә килтерә.*



ҠЫҪҠАСА

# УТЫҘЫНСЫ АПРЕЛДӘ...

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указына ярашлы, ике йыл элек республикала Мәрхүмдәрҙе иҫкә алыу һәм ихтирам күрһәтеү көнө раҫланды.** Барлыҡ конфессия вәкилдәре 2 майҙы һайланы. Әммә 2022 йылда был көн Ураҙа байрамы менән тап килә. "Беҙ Тәлғәт Тажетдин, Никон, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе Айнур Бирғәлин менән кәңәшләштек тә, Иҫкә алыу һәм ихтирам көнөн 30 апрелдә үткәрергә кәрәк тигән фекергә килдек", - тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 30 апрель - оҙайлы ялдарҙың тәүге көнө. Был көндө Башҡортостанда йәшәүселәр, ниндәй дин тотоуына ҡарамаҫтан, зыяраттарҙы тәртипкә килтерә.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республикала туризм үҫеше, хозур тәбиғәт хаҡында һөйләне.** "Беҙ туристарҙы республикабыҙға әүҙем йәлеп итәбеҙ. 2021 йылда беҙгә 3,5 миллион кеше килде - 2020 йылға ҡарағанда 600 меңгә күберәк. Быйыл тағы ла күберәк ҡунаҡ көтәбеҙ. Рәсәйҙәрҙең иғтибары сит илдәрҙән илебеҙ курорттарына күсә, ошо мөмкинлекте тулыһынса файҙаланырға тейешбеҙ, - тип яҙҙы ул. - Туризм тармағын үҫтереү өсөн нимә эшләйбеҙ? Туроператорҙар республика буйлап яңы маршруттар әҙерләй. "Янғантау" һәм "Торатау" геопарктары әүҙем. "Шүлгәнташ" музей комплексына ҙур өмөттәр бағлайбыҙ. Кемпингтар, глэмпингтар, визит үҙәктәре төҙөйбөҙ, бөтә кимәлдәрҙә ҡунаҡсыллыҡ инфраструктураһын үҫтерәбеҙ".

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары "Балаларҙы һаулығына һәм үҫешенә зыян килтергән мәғлүмәттән яҡлау тураһында" федераль законға үҙгәрештәр индерергә йыйына.** Халыҡ һайланыусылары балалар һәм үҫмерҙәр араһында чайлдфри идеологияһын таратыуҙы тыйырға теләй. Яҡын арала тейешле закон проектын Дәүләт Думаһына индереү планлаштырыла. "Көнбайыштан килгән чайлдфри идеологияһы Рәсәй йәштәре араһында киң таралды, - ти Башҡортостан парламенты рәйесе Константин Толкачев. - Уның нигеҙендә - ғүмерҙең мәғәнәһен ғәмһеҙ, үҙ ихтыяжынды ғына ҡәнәғәтләндереп йәшәүгә ҡайтып ҡалған гедонизм философияһы. Чайлдфри идеологияһының таралыуы илебеҙҙәге дәүләт сәйәсәтенә ҡаршы килә, йәмәғәт институттарының тарҡалыуына һәм халыҡтың күпләп кәмеүенә килтерә". Республиканың Дәүләт Йыйылышы рәйесе һүҙҙәренсә, төп маҡсат - йәмғиәттә ғаилә ҡиммәттәрен булдырыу һәм нығытыу. Федераль закон проекты Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы ҡарамағындағы Закон сығарыусылар советына ҡарауға тәҡдим ителде.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СОВЕТ МАЙҘАНЫНДА...



**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Совет майҙанында булды. Унда легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыу һәм биләмәне төҙөкләндереү буйынса күләмле проект тормошҡа ашырыла.**

Теүәл ике йыл элек Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән дивизия командирына үлгәндән һуң Рәсәй Геройы исеме бирелде. Республика етәксеһе тәҡдиме менән 2020 йылдың йәйендә майҙанды төҙөкләндереү эштәре башланды. Төҙөүселәр уның биләмәһен киңәйтте, эргәләге Совет урамын төҙөкләндерҙе. 2021 йылдың 1 сентябренән майҙанда төҫлө һәм музыкаль фонтан асылды. Миңлеғәли Шайморатов һәйкәле проекты асыҡ конкурста һайлап алынды. Уның еңеүсеһе - скульптор, тамырҙары менән башҡорт Салауат Щербаков.

Башҡортостан Башлығы был юлы Совет майҙанын, шулай уҡ эргә-тирәләге биналарҙы ҡараны, төҙөүселәр менән фасадтарҙы ремонтлау һәм архитектура яҡтыртҡыһын ҡуйыу пландарын тикшерҙе. "Идея шундай: бында ҡаланың йәмәғәт һәм мәҙәни үҙәге булырға тейеш. Йәштәребеҙҙе йәлеп итеү урынын булдырырға теләйбеҙ. Майҙан эргәһендә яңы мәҙәни һәм ял итеү учреждениелары асыу уйы бар, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - 9 майҙа майҙанда Башҡортостандың генерал-майоры Миңлеғәли Шайморатов һәләк булған Луганск Халыҡ Республикаһынан һәм кавалерия дивизияһы яугирҙары йәшәгән Башҡортостан райондарынан тупраҡ тултырылған капсула һалабыҙ. Ә Республика көнөндә халыҡҡа данлыҡлы геройыбыҙҙың һәйкәлен күрһәтербеҙ. Минең өсөн был төп ваҡиғаларҙың береһе булмаҡсы".

# АЙНЫТҠЫСТАР ТЕРГЕҘЕЛӘ

**Башҡортостан парламенты депутаттары беренсе уҡыуҙа республикала айнытҡыстар булдырыуға йүнәлтелгән закон проектын ҡабул итте, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте.**

Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев һүҙҙәренсә, закон проектының асылы республикала айнытҡыстар ойоштороу өсөн норматив-хоҡуҡи нигеҙ булдырыуға ҡайтып ҡала. "Ошо маҡсатта дәүләт власы органдарына махсус вәкәләттәр бирелә", - тине ул. Документҡа ярашлы, айнытҡыстар тигәндә "алкоголь йәки наркотик ҡулланып иҫергән хәлдәге" кешеләргә ярҙам күрһәтеү өсөн ойошторолған махсус ойошмалар күҙ уңында тотола. Фекер алышыу барышында депутаттар араһында айнытҡыстарҙың ойоштороу-хоҡуҡи төрҙәре буйынса бәхәс тыуҙы. Ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшеү һәм был эшмәкәрлекте коммерциялаштырыуға юл ҡуймау өсөн айнытҡыстар дәүләт йәки муниципаль учреждениелар рәүешендә генә булдырылырға тейеш, тигән ҡарарға килде депутаттар. Дәүләт-шәхси партнерлыҡ схемаһы ла маҡсатҡа ярашһыҙ тип табылды. Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Рәсәйҙә йыл һайын 50 меңдән ашыу кеше эсеп вафат була. Башлыса улар - эшкә һәләтле йәштә-геләр.

# ҒАИЛӘ ЯЛ ҮҘӘГЕ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе урынбаҫары Рөстәм Ишмөхәмәтов республика парламенты депутаттарының Премьер-министр Андрей Назаров һәм Хөкүмәт ағзалары менән осрашыуында балалар һауыҡтырыу лагерҙарын күп профилле ғаилә ял үҙәктәре итеп үҙгәртергә тәҡдим итте.**

"Республикабыҙҙа балалар лагерҙары селтәре киң. Был беҙҙең эске туристик инфраструктураның бер өлөшө булып тора, уның байтаҡ өлөшө совет осоронан уҡ мираҫҡа ҡалған. Балалар лагерҙарына яңыса ҡарарға, уларҙы хәҙерге заман ысынбарлығын һәм граждандарыбыҙҙың ихтыяжын иҫәпкә алып үҙгәртергә кәрәк. Күп лагерҙар яңыртыуға, капиталь ремонтҡа мохтаж. Бынан тыш, уларҙың нигеҙендә ата-әсәләр һәм балалар өсөн бергәләп ял итеү мөмкинлеген булдырыу зарур", - тип иҫәпләй Рөстәм Ишмөхәмәтов. Уның фекеренсә, республика халҡы өсөн лагерҙарҙы ғаилә ял үҙәктәре итеп үҙгәртеү сит илгә сәйәхәт ҡылыу мөмкинлеге сикләнгән осорҙа айырыуса көнүҙәк. "Халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең ҡиҫкенләшеүе һәм санкциялар баҫымы шарттарында быйыл, беренсенән, күптәрҙең туристик юллама һатып алып, ғаилә менән сит илгә сәйәхәт итеү мөмкинлеге юҡ, икенсенән, русофобияның көсәйеүен иҫәпкә алғанда, бөтәһе өсөн дә бик хәүефле, - тип билдәләне Рөстәм Ишмөхәмәтов. - Тимәк, халыҡҡа илдә, республикала ял итеү мөмкинлеген булдырыуҙы уйларға кәрәк. Тап балалар лагерҙарын яңыртыу, уларҙың ҡеүәтен мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланыу Башҡортостанда эске туризм үҫешенә яңы этәргес биреүе ихтимал".

# "ӨФӨ" АТАМАЛЫ КӘМӘ

**Санкт-Петербургта "Адмиралтейские верфи" акционерҙар йәмғиәте майҙанында Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров "Өфө" ҙур дизель-электр һыу аҫты кәмәһен һыуға төшөрөү тантанаһында ҡатнашты.**

Рәсәйҙең Тымыҡ океан флоты өсөн тәғәйенләнгән был субмарина 2019 йылдың 1 ноябрендә эшләнә башлай һәм республиканың Диңгеҙ йыйылышы инициативаһы менән баш ҡала исеме менән атала. Хәрби караптың конструкцияһында һәм уны йыһазландырыуҙа ҡулланылған заманса технологиялар 45 тәүлек автоном рәүештә йөҙөү мөмкинлеген бирә. Уның тауышы океандың тәбиғи тауышына яҡынайтылған, был иһә дошманды алдан табыу һәм уның һөжүменән ваҡытында тайпылыу өсөн уңайлы. Экипаж 56 кешенән тора. Һыуға төшөрөлгәндән һуң субмарина дәүләт һынауы үтәсәк һәм Владивостокта буласаҡ.

Әйткәндәй, Өфө ҡалаһы хакимиәте менән һыу аҫты кәмәһе командованиеһы араһында былтыр июлдә хеҙмәттәшлек һәм шефлыҡ бәйләнештәре тураһында килешеү төҙөлө. Документҡа ярашлы, ҡала хакимиәте флотта хеҙмәт итеүҙе пропагандалаясаҡ һәм уҡыусылар өсөн республиканың музей учреждениеларына экскурсиялар, моряктар алдында ижади коллективтарҙың сығышын ойошторасаҡ, ә командование, үҙ сиратында, мөмкинлек буйынса хеҙмәткә республика егеттәрен аласаҡ.

Башҡортостан өсөн бындай хеҙмәттәшлек тәүгеһе түгел: 2020 йылда Төньяҡ флоттың "Иван Грен" ҙур десант карабы менән килешеү төҙөлгәйне. Матбуғат хеҙмәткәрҙәре менән осрашыуҙа Радий Хәбиров "Өфө" хәрби карабының ил сиген һаҡлаясағын һәм ошоға бәйле ғорурлыҡ кисереүен белдерҙе. "Башҡортостан - Рәсәйҙең бер өлөшө. Беҙ ҙур илдең ихтыяждары менән йәшәйбеҙ. Армия һәм флотҡа ярҙам итеү - беҙҙең бурыс", - тине ул.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында бөтәһе 183 мең кешене өмәләргә йәлеп итеү планлаштырыла. Еңеү көнө алдынан Бөйөк Ватан һуғышына арналған 1900 һәйкәл, стела, обелиск биләмәләрен тәртипкә килтереү, кәртәләрҙе буяу, йәйәүлеләр өсөн юлдарҙың асфальт япмаһын яңыртыу, сүп-сар сығарыу кеүек эштәрҙе башҡарыу бурысы тора. "Яҙғы төҙөкләндереү эштәренә теләгән һәр кем ҡушылырға мөмкин - үҙенең ихатаһында, яҡындағы аллеяла, скверҙа, паркта. Күмәк көс менән ҡалабыҙҙы, урамдарҙы һәм ихаталарҙы таҙа, төҙөк тота, йәшәү өсөн уңайлы шарттар булдыра алабыҙ", - тип белдерҙеләр Өфө мэрияһында.

✓Киләһе ике йылда Өфөнөң Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял паркында "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль программаһы буйынса ремонтлау эштәре башҡарыла. Черниковка биҫтәһендә йәшәүселәр тәү сиратта паркта эттәрҙе йөрөтөү майҙансығын булдырыуҙы һораны. Архитекторҙар был фекерҙе иҫәпкә алырға вәғәҙә бирҙе. Паркты Өфөнөң 450 йыллығына яңыртыу күҙаллана.

✓Быйыл "Үлемһеҙ полк" акцияһы ғәҙәти форматта була. Бындай ҡарар 22 мартта Рәсәйҙең "Үлемһеҙ полкы" хәрәкәте төбәк штабының киңәйтелгән ултырышында ҡабул ителде. Рәсәйҙә "Үлемһеҙ полк" акцияһы - йыл да, Башҡортостанда 2014 йылдан алып уҙғарыла. Пандемия осоронда, 2020-2021 йылдарҙа, акция онлайн ойошторолдо.

✓Баш ҡаланың райондарҙы төҙөкләндереү буйынса хеҙмәттәрендә һәм коммуналь өлкәһендә эшселәр: водителдәр, механизаторҙар, юл эшселәре етешмәүе күҙәтелә. Республика райондарынан килеүселәргә йәшәү урыны бирелә. Квалификация һәм хеҙмәт көсөргәнешенә бәйле эш хаҡы 25 мең һумдан 60 мең һумға тиклем. Даими эшкә урынлашырға теләүселәр Өфө райондарының төҙөкләндереү буйынса хеҙмәттәре (СПБ) муниципаль бюджет учреждениеларына шылтырата ала.

✓15 апрелдә "Динамо" стадионында журналистарҙың билдәле диктор, Башҡортостандың халыҡ артисы Әхәт Мортазин иҫтәлегенә арналған волейбол турниры ойошторола. Әлеге ваҡытта командаларға спортсылар йыялар. Турнирҙы ойоштороусылар - Башҡортостандың Журналистар союзы, Матбуғат йорто, республика һәм муниципаль киң мәғлүмәт саралары.

**БАШИНФОРМ”**
**материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# МӘШӘҠӘТТӘР АРТА...

**Яңы ғына, ҡапыл көндәр йылытып, ҡар ҡапыл иреһә, һыу баҫыр инде, сөнки ер туң әле, тип яҙғайныҡ, юрағаныбыҙ юш килде, күрәһең. Өҫтәүенә, ямғыр ҙа үҙ көсөн күрһәтте. Урамдарҙа күләүектәр барлыҡҡа килеү генә түгел, ҡайһы бер урында хатта резина итекһеҙ йөрөп тә булмай. Хатта машиналар сыға алмай батып ултырған осраҡтар ҙа бар. Һәм былар барыһы ла әллә ҡайҙа түгел - үҙебеҙҙең Өфөбөҙҙә.**

Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә башҡа мөһим мәсьәләләр менән бер рәттән, тап ошо - урамдарҙы һыу баҫыу мәсьәләһе лә ҡаралды. Яңы мэр коммуналь хеҙмәт вәкилдәрен, "Әйтерһең дә, һәр йыл яңыса килә", тип, шелтәләп тә алды. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ - йыл һайын бер үк балыҡ башы.

Ни өсөн урамдарҙа һыу йыйыла һәм йәйәүлеләр өсөн ҙур проблема тыуҙыра? Сәбәбе ябай - ямғыр һыуҙарын ағыҙыу рәшәткәләрен йә бысраҡ ҡар ҡаплаған, йә уның өҫтөндә боҙ ята, йә ул тығылғын. Бөгөн "СУРСИС" МБУһы хеҙмәткәрҙәре ошо ямғыр һыуы ағыҙыу рәшәткәләрен таҙартыу менән мәшғүл. Оперативкала бирелгән отчетҡа ярашлы, шул ваҡытҡа 470 рәшәткә таҙартылған. Шулай юлдарҙың түбән һәм һыу йыйылған участкалары көн һайын күҙәтелеп тора. 43,9 километрға һуҙылған хужаһыҙ участкаларҙа ремонт-тергеҙеү эштәре талап ителә. Әле уларҙың торошо ҡәнәғәтләнерлек түгел, ә тейешле кимәлгә еткереү өсөн ҙур сығымдар һәм фиҙаҡәрлек кәрәк.

Шулай уҡ кәңәшмәлә ташҡын мәсьәләһе лә көн тәртибенә сығарылды. Республика райондарында йылғаларҙа боҙ ҡуҙғала, тиҙҙән тауҙарҙан ҡар һыуы төшөп, ташҡындар ҙа башланасаҡ. Был йәһәттән, һыу юлдар аша сыҡҡанда, халыҡты транспорт, йылға аша сығарыу өсөн суднолар менән тәьмин итеү ҙә ҡарала. Был юлы баш ҡаланың һыу баҫыу хәүефе янаған дүрт районының береһе булған Дим районы хакимиәте башлығы Айҙар Бәҙғетдинов отчет тотто. Әлеге ваҡытта районда һыу баҫасаҡ урамдар картаһы эшләнгән, УЖХ базаһында ташҡынға ҡаршы штаб ойошторолған. Халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыу пункты булдырылған, сауҙа предприятиелары халыҡты аҙыҡ-түлек, эсәр һыу һәм көндәлек ихтыяж әйберҙәре менән тәьмин итергә әҙер. Шулай уҡ башҡа эштәр ҙә башҡарыла, урамдарҙан ҡар ташыла, әлеге ваҡытта 15 мең кубометр сығарылған.

"Башҡортостан дәүләт метеостанцияһы идаралығы" етәксеһе Анна Козаева белдереүенсә, башҡа йылғалар бассейндарындағы ҡарҙағы һыу запасы үткән йылдарҙағы кимәлдә булһа, Димдә ул норманан 50 процентҡа артығыраҡ. Ә баш ҡалала йылғаларҙа боҙ китеүе 8-14 апрель арауығында көҙаллана.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҮҘӘКТӘР ХАЛЫҠҠА ЯҠЫНАЯ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡалабыҙҙың Пушкин урамында урынлашҡан Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында булып китте. Учреждение директоры, медицина фәндәре докторы Мөхәррәм Бикбов институт эшмәкәрлеге, шулай уҡ республика ҡалаларында асылған муниципаль-ара яңы офтальмология үҙәктәре эшмәкәрлеге хаҡында һөйләне.**

Был үҙәктәр дауаланыу өсөн республика халҡының башҡа төбәктәргә ағымын кәметте һәм Башҡортостанға өҫтәмә федераль финанс тәьминәте йәлеп итергә мөмкинлек бирҙе. Хәтерләһәгеҙ, 2021 йылдың июлендәге "Здравчас" ултырышында Радий Хәбиров республикала берҙәм офтальмология хеҙмәте булдырыу хаҡында иғлан иткәйне. Бөгөн Өфө күҙ ауырыуҙары институтында йылына 40 мең операция эшләнә. Был илдәге ошондай уҡ учреждениелар араһында иң ҙур күрһәткес. Импортты алыштырыу сиктәрендә институт белгестәре яңы сыҡҡан диагностикалау һәм дауалау ҡорамалдарын, күҙҙең яһалма өлөштәрен үҙләштерә. Шуның менән бергә Мөхәррәм Бикбов институттың 18 йыл инде ҡайтанан төҙөлөп бөтә алмау сәбәпле буш торған корпусы хаҡында ла әйтеп үтте. Башҡортостан Башлығы был бинаны үҙгәртеп ҡороу буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә ҡушты. "Институт юғары оҫталыҡҡа эйә белгестәрҙән торған көслө һөнәри коллективты һаҡлап ҡала алған. Беҙ уның берҙәм офтальмология хеҙмәте сиктәрендәге эшмәкәрлегенә мотлаҡ булышлыҡ итәсәкбеҙ, - тине Радий Хәбиров.- Муниципаль-ара үҙәктәр ҙур ҡалаларҙан алыҫта ятҡан бәләкәй тораҡ пункттары халҡы бушлай сифатлы медицина ярҙамы алыу мөмкинлегенә эйә булһын өсөн эшләнгәйне. Был йәһәттән беҙ дөрөҫ йүнәлештә барабыҙ".

# ҮӘТ, БАШЛЫЛАР!

**БДУ ғалимдары, тик ватан сеймалын файҙаланып, экологик яҡтан хәүефһеҙ ашлама уйлап сығарған.**

Башҡорт дәүләт университетының химия факультеты тикшеренеүселәре үҙҙәренең асышын тәҡдим итте - "Агровит - NS" наноүлсәмле көкөрт нигеҙендә үҙенсәлекле минераль һәм экологик яҡтан хәүефһеҙ ашлама ул. Ашлама үҫемлектәргә иртә үҫеп етеүгә булышлыҡ итә һәм уларҙы ауырыуҙарҙан һаҡлай. Уның мөһим өҫтөнлөктәренең береһе - бойҙай һәм башҡа культуралар ашлығында аҡһым миҡдарын арттырыу. Уның һөҙөмтәһендә нитраттарҙы аҡһымлы азотҡа әйләндерәләр һәм теләһә ниндәй ҡый үләндәрен экологик хәүефһеҙ ысул менән юҡ итәләр.

- Аграрийҙарыбыҙ ауыл хужалығы продукцияһы етештереүҙе арттырырға, Башҡортостанды ғына түгел, башҡа төбәктәрҙе лә төп аҙыҡ-түлек менән тәьмин итергә әҙер, - тип билдәләне БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов. - Шул уҡ ваҡытта беҙ ғалимдарыбыҙға ҙур ышаныс бағлайбыҙ, уларҙан ауыл хужалығы өлкәһендә сит ил аналогтарын алмаштырыу ғына түгел, ә уларҙы уҙып китергә һәләтле яңы асыштар көтәбеҙ. Башҡорт дәүләт университетында әҙерләнгән "Агровит - NS" ашламаһы беҙҙә ышаныс уята һәм ғалимдарыбыҙ бындай бурыстарҙы хәл итә ала тип раҫларға мөмкинлек бирә.

Бөгөн ауыл хужалығында, төҙөлөштә, ветеринарияла ҡулланылған кальций, магний, барий, стронций, литий, натрий һәм калий полисульфидтары нигеҙендә инновациялы продукттарҙы етештереү тәжрибәһе ойошторолған. "Агровит - NS"тың мөһим өҫтөнлөгө - тик ватан сеймалын файҙаланып, инновациялы продукт етештереү", - ти Башҡорт дәүләт университеты ректоры Николай Морозкин. Уңышлы баҫыу һынауҙары Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтында һәм Төркиәлә үткәрелгән. "Көкөрт нигеҙендәге препарат уңыштың 10-12 процентҡа артыуына килтерә. Үҫеш осоронда препарат менән эшкәрткәндән һуң, бөтә үҫемлектәр өсөн дә үҙгәреү, нескәлек, төҫ үҙгәреү (хлороз), деформация (үле туҡыма, деформация) кеүек фитотоксик эффекттар табылманы", - ти тикшеренеү төркөмө етәксеһе, профессор, техник фәндәр докторы Исмаил Мәсәлимов.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯҠТАШТАР ОСРАШЫУЫ

✓**Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Санкт-Петербургта Башҡортостан студенттары һәм Төньяҡ баш ҡалала йәшәгән яҡташтарыбыҙ менән осрашты.** Өфө мэрына бирелгән һорауҙарҙың күбеһе йәмәғәт транспортын үҫтереүгә, парктарҙы төҙөкләндереүгә, социаль объекттар төҙөүгә, инновациялы үҙәктәр булдырыуға ҡағылды. Ратмир Мәүлиев мәғлүмәтләштереү һәм элемтә комитетының ҡала күҙәтеү үҙәгендә лә булды. Үҙәк халыҡты һәм башҡарма дәүләт власы органдарын йәшәү эшмәкәрлеге хәүефһеҙлеге, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ һәм ҡаланы төҙөкләндереү мәсьәләләре буйынса мәғлүмәт менән тәьмин итеү буйынса шөғөлләнә. Ратмир Мәүлиев бында эштең нисек алып барылыуы менән танышты, тәүлек әйләнәһенә мөрәжәғәттәр ҡабул иткән, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе тикшереп торған операторҙар менән аралашты.

✓**Өфө властары түләүле парковкалар ойоштороу эшен туҡтатып торорға булды. Баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев ошондай ҡарар ҡабул итте.** "Хакимиәткә Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса советтан санкциялар индереүгә һәм ҡатмарлы иҡтисади хәлгә бәйле был яңылыҡты кисектереү тураһында мөрәжәғәт килде. Мин был тәҡдимде хуплайым. Бөгөн автомобилселәребеҙгә финанс йөкләмәһе өсөн уңай ваҡыт түгел", - тине Өфө мэры. Уның һүҙҙәренсә, ҡала үҙәгендә парковка өсөн эске резервтар бар әле. Ташландыҡ транспортҡа ҡаршы көрәшеү һәм өҫтәмә парковка урындарын булдырыу ҡаралған Ленин урамы реконструкцияһын файҙаланырға кәрәк, тип иҫәпләй Өфө хакимиәте башлығы.

✓**Шишәмбе, 5 апрелдә, Өфөнән Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары халҡы өсөн гуманитар йөк тейәлгән өсөнсө колонна юлға сыҡты.** Башҡортостан Башлығы һүҙҙәренсә, йөктөң дөйөм ауырлығы - 83,5 тонна. Унда кондитер һәм икмәк-ҡалас изделиелары, һыу, кофе, шәхси гигиена әйберҙәре, түшәк кәрәк-ярағы, балалар аҙығы, макарон изделиелары, уйынсыҡтар, ярмалар һәм башҡалар бар. Гуманитар конвой был юлы ошо республикаларҙың емерелгән ҡала-ауылдарын тергеҙеү өсөн кәрәкле төҙөлөш материалдары ла алып бара. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 4 һәм 18 мартта республика Донбасҡа ике гуманитар ярҙам оҙатҡайны, әле дүртенсе һәм бишенсе колонналарҙы әҙерләү бара.

✓**"Өфөкран" компанияһы М-5 "Урал" трассаһында яңы юл буйы комплексы төҙөргә йыйына.** Проектты бер нисә этапта тормошҡа ашырыу көҙ уңында тотола. Беренсе этапта яҡынса 50 млн һум аҡса бүленә. Үҫеш корпорацияһы инвесторға тейешле консультация бирә һәм методологик ярҙам күрһәтә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте 2020-2024 йылдарға Юл яны сервисын үҫтереү концепцияһын раҫланы. Документҡа ярашлы, дүрт йыл эсендә республиканың төбәк һәм федераль юлдарында 1000 яңы объект асыу, теүәл шунсаны яңыртыу күҙаллана. Юл буйы комплекстары бер стилдә һәм милли тематикаға ярашлы эшләнә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Шәкәр диабеты

Был сирҙән яфаланыусыларға туҡланыуҙа кесерткән ҡулланыу файҙалы. Йәш кесерткәнде салат, котлет, йәшелсә аштарына ҡушырға мөмкин. Шулай уҡ уны томалап бешерергә була: 300 грамм кесерткән япрағы, 50 грамм әстерхан сәтләүеге, 1 баш һуған, ике ҡалаҡ көнбағыш майы, кәрәк тиклем тоҙ. Һуғанды ваҡлап турап, әстерхан сәтләүеге менән бергә көнбағыш майында ҡыҙҙырырға. Ҡурылып сыҡҡас, йыуылған кесерткәнде ҡушып табаға ҡапҡас ябырға һәм 5-7 минут томалап бешерергә.

### Отит

Һыҙланыуҙы йылы камфора майы баҫа. Ҙур булмаған бинт киҫәген алып, шунан филтә яһап камфора майына сылатырға, ныҡлап һығырға һәм бер яҡ осон ҡолаҡҡа тығырға. Өҫтөнән мамыҡ йоморсағы баҫып, башҡа яулыҡ урарға. Был рәүешле төнгөгә дауаланыу яҡшы. Беренсе тапҡырҙан уҡ хәл еңеләйә, 2-3 тапҡыр дауаланғандан һуң һыҙланыу баҫыла.

### Ҡолаҡ ишетмәһә

Бер нисә балан емешенең һутын һығып алырға һәм шуға тигеҙ миҡдарҙа бал ҡушып болғарға. Уртаһына оҙон еп ҡалдырып ҙур булмаған мамыҡ жгуттар яһарға. Шуларҙы әҙерләмәгә манып, төнгөлөккә ҡолаҡҡа тығып ятырға, иртәнсәк ебенән тартып алырға. Был рәүешле 20 тапҡыр дауаланғандан һуң ишетеү яҡшыра.

### Аллергия

Сабыртма, тире ҡысыһа, аллергиянан бәпембә һәм дегәнәк тамырҙары ярҙам итә. Үләндәрҙең тамырын ваҡлап турап, тигеҙ өлөштә бергә ҡушырға. Шунан 1 ҡалағына 1,5 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк талғын утта 10 минут ҡайнатып һөҙөргә. Төнәтмәне туҡланыуға ҡарамай, көндөҙ ярты-шар стакан итеп 3 тапҡыр, ҡалғанын төнгөлөккә эсергә. Ошо уҡ төнәтмәне сир ҡалҡҡан урындарға һөртөргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАҘДАРЫ

Алмағас йәки гөлйемеш сәскәһенә оҡшаш биш таҗлы ҡыҙыл сәскәләр тояҡлы, яҫы һәм тәпәш йәшниктең алғы ягына төшөрөлгән. Сәскәләр үреме күкһел шәмәхә ерлектә урынлашҡан. Өҫтән һәм аҫтан ул ҡыҙыл һыҙаттар рәүешендә буялған һауа алыштырыу өсөн эшләнгән тишектәр менән уратылған. Йәшник үҙе охра төҫөндәге һарыға буялған.



*Кухня өсөн өҫтәл-һике. Баймаҡ районы, 1958 й. Рәссамы Г.И. Мөхәмәтшин*

XIX быуатта ауылдарҙа буфеттар барлыҡҡа килә. Улар урыҫтарҙың да традицион мебеле булып иҫәпләнмәгән. Улар киң нигеҙле (өҫтәл йәки комод рәүешендә) һәм ҡашығаяҡ таҡтаһынан торған. Башланғыс осорҙарға ҡараған бындай әйберҙәр артыҡ зауыҡлы түгел. Ҡайһы осраҡта уларҙың хатта ҡапҡастары юҡ. Боронғо буфеттың матур өлгөһө итеп Иглин районының Урта Ҡаҙаяҡ ауылындағы тура мөйөшлө шкафты миҫалға килтерергә мөмкин (1975 йыл). Аҫҡы өлөшө бер аҙ кинерәк, ҡапҡасһыҙ һәм көштәһеҙ. Өҫкө яғында кәштә ҡырҙары буйлап тар ғына орнамент һыҙаты үтә һәм ҙур түңәрәк уйымлы ябыҡ бүлектән тора. Биҙәге сиратлашып килгән вертикаль уйпатлыҡтар һәм мөйөштәрендә өс ҡырлы уйымлы сатраштарҙан торған. Был ябай элементтар бергә ҡушылып классик таҫма биҙәкте хасил иткән.

Көньяҡ Башҡортостанда буфеттың өҫтән аҫҡа һыҙатына "ишмә бағана" йәки "шыршы" итеп һырланған ҡабарынҡы тар таҡта ҡағылған. Ситтәрен быҫҡы биҙәк, тишекле ярым түңәрәктәр рәүешендә эшләгәндәр. Буфетты гаммаһы буйынса яҡын йәки ҡапма-ҡаршы төҫкә буяу йыш күренеш булған. Өҫкө ҡапҡастарына быяла ҡуйылған. Буфеттың маңлай йөҙлөгө уйып яһалған, ҡабарынҡы йәки киреһенсә эскә инеп торған семәр менән биҙәлгән. Шулай уҡ ваҡ деталдәре өҫтөнә ҡағып та эшләнгән: ҡыя шаҡмаҡтар, соляр розеткалар, уҡ башағына оҡшаш (һөңгө башына тартым) фигуралар менән бергә түңәрәктәр.



*Иглин районы Ҡарашиҙе һәм Урта Ҡаҙаяҡ ауылдарынан башҡорт оҫталары тарафынан яһалған семәрле буфеттар, 1975 йыл. Рәссамы И.Ф. Кибальник.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

КӨНАУАЗ

**Республикала быйылғы йылдың Һөнәри белем биреү тармағын яңыртыу, лайыҡлы эш шарттары һәм хеҙмәт династиялары йылы тип нарыҡланыуында былтыр Башҡортостанда "WorldSkills Россия" чемпионаты финалының юғары кимәлдә үтеүе, унда шулай уҡ беҙҙең команданың уңышлы сығыш яһауы ҙур роль уйнаны, тип әйтергә урын бар. Сөнки тап ошо форумда һөнәри белем биреү системаһында эште нығытыу кәрәклеге билдәләнде.**

# ЭШСЕ ҺӨНӘРҘӘРҘЕҢ...

## абруйын күтәреү хәстәре был




Билдәле булыуынса, Башҡортостан урта һөнәри белем биреү учреждениелары һаны буйынса илдә алдынғы төбәктәрҙең береһе иҫәпләнә. Беҙҙә йәмғеһе 96 колледж һәм уларға беркетелгән 41 филиал эшләй. Унда 104 мең кеше белем ала, дөрөҫөрәге, 136 йүнәлеш һәм 80 эшсе һөнәре буйынса иҡтисадтың төрлө өлкәһенә кадрҙар әҙерләнә. Һуңғы йылдарҙа сығарылыш уҡыусыларының колледждарға өҫтөнлөк биреүе күҙәтелә. Бының сәбәбе, әлбиттә, Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләренә генә бәйле булырға ла мөмкин. Шулай уҡ юғары уҡыу йорттарындағы бюджет урындарына әлегеү мөмкинлегә булмауы ла үҙенекен итәләр. Ә шулай ҙа йәштәр республикала квалификациялы эшсе кадрҙар етмәүен белә, шул сәбәпле тиҙҙән беҙҙең предприятиелар зыян күрәсәген аңлай, тип ышанғы килә.

Әйе, бөгөн хеҙмәт баҙарында урта һөнәри белемгә ихтыяж арты. Был хаҡта Урта һөнәри белем биреү буйынса республика советының тәүге ултырышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Эшсе һөнәрҙәрҙең, хеҙмәт династияларының абруйын арттырырға, эш кешеләренә лайыҡлы хеҙмәт шарттары, эш хаҡы менән тәьмин ителгән юғары етештереүсәнле заманса эш урындары булдырырға кәрәк. Бының өсөн колледждарҙа ла яҡшы шарттар тыуҙырыу мөһим", - тине ул. Урта һөнәри белем биреү тармағы мәсьәләләре ҡаралған был мөһим сарала Мәләүез колледждары етәкселәре ҡатнашты һәм унда алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты.

***Рита Мәҙәрик ҡыҙы Сәмиғуллина, күп йүнәлешле һөнәри колледж директоры:*** Башҡортостанда беренсе тапҡыр мәғарифтың был тармағына республика Башлығы, Хөкүмәт кимәлендә иғтибар бирелде. Был күренеш, әлбиттә, беҙҙе бик шатландыра һәм илһамландыра. Эшсе кадрҙар әҙерләү системаһы "колледж - предприятие" логик сылбыры булмаһа, тулы ҡеүәткә эшләй алмаясаҡ. Беҙ бөгөн уҡыусыларҙы заманса донъя стандарттары буйынса әҙерләүгә бөтә көсөбөҙҙө һалабыҙ, уларға тейешле белем һәм күнекмә бирәбеҙ. Әммә йыш ҡына уҡыу йортон тамамлағандан һуң йәштәр артабан нимә эшләргә белмәй аптырап ҡала. Колледж, әлбиттә, был проблема буйынса эшләй, эш биреүселәр менән үҙ-ара йоғонтоло мөнәсәбәт булдырырға тырыша. Әгәр ҙә инде был мәсьәлә маҡсатлы программалар ярҙамында дәүләт кимәлендә хәл ителһә, бынан барыбыҙ ҙа отасаҡбыҙ ғына.

Дәүләт ярҙамының теге йәки был өлкәнең етеҙ үҫешенә йоғонторо яһай алыуын үҙебеҙҙең колледж миҫалында күрһәткем килә. Мәҫәлән, "Умартасылыҡ" компетенцияһын беҙ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Хөкүмәт ярҙамы менән үҫтерә башланыҡ. Һөҙөмтәләр шул хаҡта һөйләй: ике йыл рәттән төбәк чемпионатын үткәрҙек. Былтыр был компетенция беренсе тапҡыр "WorldSkills Россия" чемпионаты финалында ҡатнашты. Умартасылыҡ буйынса баш эксперт булараҡ, төбәк чемпионаты ойошторолған Ингушетияға барҙым. Төбәк ярыштары шулай уҡ Алтайҙа, Новосибирск өлкәһендә, Удмурт республикаһында үтте.

Быларҙың барыһы ла - республика власы ярҙамы менән ҙур команданың планлы эше һөҙөмтәһе. Шуға күрә быйылғы йылда ойошторолған саралар колледждар үҫешенә, иҡтисадты эшсе кадрҙар менән тәьмин итеүгә ҙур этәргес бирәсәгенә ышанам.

***Зөфәр Фәнил улы Ғималетдинов, индустриаль колледж директоры:*** Урта һөнәри белем биреү системаһында эшләй башлауыма бер йыл да юҡ әле. Колледж менән танышып сыҡҡас, уның матди-техник базаһы мине бер аҙ уйға һалды. Ниндәй генә йүнәлеште алып ҡараһаң да, бөтәһенә лә ҙур сығым талап иткән ремонт, тәҙәкләндереү, яңыртыу мотлаҡ. Ә финанс юҡ. Аҡсаны, әлбиттә, эшләп табырға мөмкин, әммә уның өсөн яңыртыу кәрәк. Мәҫәлән, автомәктәптә генә алайыҡ. Уны тергеҙеүгә тәҙәк автомобилдәр, компьютерҙар һәм башҡалар кәрәк. Бындай күренеш бөтә өлкәлә лә күҙәтелә. Бер нәмә генә ҡыуандыра ине - колледжда һөнәри кадрҙар ресурсы һаҡланған. Коллектив нигеҙен ҙур тәжрибәле, үҙенең эшен яратҡан, уҡыу йортона тоғро булған белгестәр тәшкил итә ине.

Былтыр үткән WorldSkills Россия милли финалы урта һөнәри белем биреү системаһын, шул иҫәптән беҙҙең колледжды үҫтереү йүнәлешендә ҙур этәргес булды. Беҙ ҡыйбатлы заманса ҡоралдар алдыҡ, ашнаҡсы һәм кондитер эше, тегеү технологияһы һәм хеҙмәтте һаҡлау буйынса өс оҫтахана астыҡ. Матди базаны яңыртыу - бик мөһим һәм ваҡытлы ҡарар. Бөгөн эш биреүселәр ҡулланған һәм беҙҙең студенттар уҡыған-өйрәнгән ҡорамалдар араһында ҙур айырма бар. Предприятиеларҙа улар замансараҡ, әлбиттә. Финанстар ярҙамында уҡыу йорттары эшсе кадрҙарҙы әҙерләү шарттарын реаль производствоныҡына яҡынайта аласаҡ. Колледж бөгөн дәүләттән ярҙам көтөп, ҡул ҡаушырып ултырмаҫҡа тиған маҡсат менән йәшәй. Беҙ төрлө башланғыстарға, инвесторҙар менән эшләргә әҙербеҙ. Әгәр ҙә кемдеңдер беҙҙең колледж базаһында бергә бойомға ашырырға теләгән ҡыҙыҡлы тәҡдиме булһа, бындай хеҙмәттәшлеккә беҙ шатланасаҡбыҙ ғына.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**✓ Был минуттарҙа майор Дәүләт Ариткулов ҡамалышта ҡалған хәлдә йәшерен ҡоралды дошман ҡулына төшөрмәҫ өсөн шартлатырға, унын менән ҡушар үҙенең дә һәләк буласағын белә тороп та кнопкаға баҫа ине.**



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ҺАЛЙОТ, ТЕРҺӘК, ҺЕҢРӘН, БӘКӘТИН, ҺЫРҘЫ, ШУРАН-

## оло башҡорт иленең кесе ырыуҙары улар



Терһәк ырыуының килеп сығышы хаҡында этнология фәнендә аныҡ мәғлүмәттәр юҡ тиерлек. Р.Ғ. Кузеев терһәк башҡорттарының уғыр сығышлы булыуы мөмкинлеге хаҡында фараз итә: "Терһәктәрҙең уғырҙарҙан килеп сығыуы бик ихтимал, әммә был осраҡта һүҙ Чусовая йылғаһы буйында һәм унын янындағы ерҙәрҙә йәшәгән (XV - XVIII бб.) уғыр халҡының һуң төркиләшеүе хаҡында түгел, ә Көньяҡ Себер һәм Ҡаҙағстан киңлектәренең урман һәм дала сиктәрендә иртә төркиләшкән уғырҙарҙың күсмә малсылыҡҡа күсеүе һәм төрки донъяһының бер өлөшөнә әйләнеүе тураһында бара".

Унан башҡа, ғалим-этнолог һыҙғы, һеңрән, терһәк, бәкәтин ырыуҙарының төньяҡ-көнсығыш Башҡортостан территорияһына көньяҡ-көнбайыш Урал алдынан - боронғо башҡорт этносы формалашҡан төп райондан күсеп килгән, тип иҫәпләй.

Ярым күсмә хужалыҡ итеүҙе өҫтөн күргән Терһәк ырыуы башҡорттары хаҡында уларҙың тарихи Башҡортостандың төньяҡ тарафтарында йәшәгән осороно ҡараған билдәле документтар бар. XVI быуат аҙағында - XVII быуат башында терһәк башҡорттары Чусовая йылғаһы буйында көн итә, бында теркәлгән Терһәк (Терцяская волость) олоҫоноң ерҙәре Өфө (Ҡариҙел) йылғаһынаса барып еткән. Академик Иван Лепехиндың юлъяҙмаларында ошондай мәғлүмәт сағылыш тапҡан: "Сергинские заводы... построены в 1740 г. Иваном Демидовым на р. Серга, впадающей в р. Уфу, на земле, купленной у башкир Терсяцкой и Упейской волостей".

Әммә шул уҡ XVII быуат башында батша заводчиктары, башлыса, законһыҙ рәүештә терһәк башҡорттарының байтаҡ ерҙәрен тартып ала, уларҙы ҡыҫырыҡлай башлай. Терһәктәр төньяҡҡараҡ, Төмән өйәҙе тарафтарына күсеп китергә мәжбүр була. Унда 1630 йылда, Исәт йылғаһы буйындағы Бачкур олоҫо менән йәнәш, Терһәк (Терсюк) йылғаһының Исәткә ҡойған районында Терһәк олоҫо хасил була. Терһәктәр, һеңрән ырыуы башҡорттары менән бер үк ваҡытта, Пышма һәм Исәт йылғалары арауығындағы ерҙәрен ташлап китә. Улар Исәт йылғаһынан көньяҡтараҡ ятҡан һалйот ерҙәренә килеп урынлаша. Тикшеренеүсе Б.О. Долгих фекеренсә, терһәк һәм һеңрән башҡорттары Урта Уралдың боронғо уғыр телле ҡәүемдәренең вариҫы булған. Быға бер ни тиклем кимәлдә терһәк риүәйәттәрендә үҙҙәренең "сирмешләр нәҫеленән" булыуы хаҡындағы мәғлүмәт дәлил булып тора.

В.Ф. Генингтың тарихи-лингвистик этюдтарында тур, тор, тер тамырлы этнонимдарҙың коми-зыряндарҙың тури, мансыларҙың тари, венгрҙарҙың daru һүҙҙәренә тура килеүенә иғтибар ителә: был һүҙҙәр башҡортса торна тигәнгә тура килә. Был осраҡта торна һүҙенең тамырына иғтибар итмәйенсә булмай. Боронғо башҡорт риүәйәттәрендә торнаның изге ҡоштар рәтенә индерелеүе - киң билдәле факт.

Юғарыла әйтелгәндәргә ҡарамаҫтан, терһәктәр, уғыр ҡәүемдәре менән аралашып йәшәгән бер халәттә лә, үҙҙәрен башҡа башҡорт ырыуҙарынан айырып ҡарамай. Уса даруғаһында йәшәгән терһәк ерҙәре рус документтарында "Терсятская волость" тип аталып, ошо уҡ төйәк башҡорттарының башҡа бер халыҡтар менән аралаш йәшәүе лә теркәлә: "... з деревнями во оной башкир, мещчеряков, черемис, водан". Был документта удмурттар водан тип аталған.

Ҡайһы бер тикшеренеүселәр терһәк башҡорттарын Пермь вогулдары менән ҡәрҙәш булғандыр, тип фараз итә. Әммә вогулдар (уғырҙар) - урман халҡы, уларға бер урындан икенсеһенә күсеп йөрөү хас түгел. Ә тикшеренеүсе Миллер терһәктәрҙең 1603 йылда уҡ Урал тауҙарының көнсығышындағы Уй, Туғыҙаҡ йылғалары буйында кәсептә йөрөүе хаҡында мәғлүмәттәр тапҡан. Академик Р.Ғ. Кузеев, алдараҡ яҙылғанса, терһәк башҡорттарының боронғо тамырҙарын Себер һәм Төньяҡ Азия (хәҙерге Ҡаҙағстан) территорияһында төрки ҡәбиләләренең көслө йоғонтоһо арҡаһында төркиләшеп киткән уғыр халҡы менән бәйләй. Беҙҙең эраның I мең йыллығы аҙаҡтарында ошо тарафтарҙа көн иткән төрки ҡәбиләләре менән бергә терһәктәрҙең ата-бабалары ла көнбайышҡа табан күсеп китә. Мәҫәлән, Ҡаҙағстандың Аҡтүбә өлкәһендәге бер йылғаның исеме - Терсәккан. Был топонимдың заманында ошо территорияла әҙме-күпме йәшәп киткән терһәктәр менән бәйле булыуы бар. Улар XIV - XVII быуаттар дауамында Тарихи Башҡортостандың төньяғына барып сыға, һуңынан Урал аръяғына күсенә. Бында уларҙың бер ни тиклем кимәлдә шул уҡ фин-уғыр халыҡтары менән дә этник бәйләнешкә инеүен инҡар итеп булмай. Лингвистик тикшеренеүҙәрҙә тап төньяҡ башҡорттары һөйләштәрендә фин-уғыр телдәренән ингән һүҙҙәрҙең күберәк булыуы билдәләнә.

Тарихсы С. Хәмиҙуллин, терһәктәрҙең уғыр сығышлы булыуына ышаныслы дәлилдәр булмағанлыҡтан, ошо мәсьәләне башҡа бер юлдар менән тикшерергә саҡыра. Этнонимдарҙың этимологияһын һәр осраҡта ла аныҡ итеп асыҡлап булмаһа ла, этник атамалар айырым бер ҡәүемдәр хаҡында билдәле бер һығымталар эшләргә мөмкинлек бирә. Салауат Хәмиҙуллинса, ошо ырыу атамаһының башҡорт һәм башҡа төрки телдәрендәге объектив мәғәнәһенә иғтибар итеү фарыз. Был атама кешенең билдәле тән ағзаһын аңлата, ул төрки тамырлы, шунлыҡтан бында ниндәйҙер боронғо уғыр ерлеген табыуы икеле. Шунан сығып, тарихсы терһәктәрҙең килеп сығышын асыҡлауҙың ике вариантын тәҡдим итә. Беренсенән, билдәле бер оло ырыуҙың айырым тармаҡтары (ара, түбә, аймаҡ), ваҡыттар үтеү менән, ҙурайып китеп, үҙаллы ырыу статусын ала, был административ-территориаль бүлнештә асыҡ сағылыш таба. Бәлки, терһәк атамаһы боронораҡ шул уҡ табын йәиһә ҡатай ырыуына ҡараған бер аймаҡты аңлатҡандыр. Мәҫәлән, оло Әйле берләшмәһенә ҡараған ҡаратаулы һәм тырнаҡлы аймаҡтары ла тора-бара айырым Ҡаратаулы һәм Тырнаҡлы олоҫтарын хасил итә. Бәғзе бер башҡорт этнонимдары, этносоциаль ҡушамат булараҡ, йәнлек исемдәренән (бүре, айыу, ҡуян, йылан, ябалаҡ һ.б.), тәбиғәт объекттары атамаларынан (ҡаратаулы, урман-көҙәй, ҡыркөҙәй, күл-иле-мең һ.б.), кеше тәне ағзалары йәиһә сифаттарынан (тырнаҡлы, тәнкәй, йәнәй, таҙ, тупыс, шауһөйәк, уҫраҡ көҙәй һ.б.), башҡа бик күп этник билдәләмәләрҙән барлыҡҡа килгән. Икенсенән, теге йәки был этник берәмектең сығышын унын составына ингән кешеләрҙең генетик ҡәрҙәшлеген асыҡлау мөмкинлеге бар - был осраҡта төрлө ырыу вәкилдәренең уртаҡ йәиһә айырым, үҙаллы генетик сығышын объектив рәүештә билдәләп була. Терһәк ырыуы атамаһының тән ағзаһын ғына белдермәүенә, күсмә мәғәнәһендә йәшәйештә, яу мәлдәрендә ҡәрҙәштәр, ырыуҙаштар өсөн терәк булып, терһәктәшлек (арҡаҙашлыҡ) сифатына эйә булыусыларға ҡарата ҡулланылған социаль ҡушамат булараҡ нығынып киткән булыуына иғтибар итергә кәрәктер.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 12-13-сө һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Минең эргәгә, фотоаппараттарын йөкмәп, ТАСС хәбәрсеһе Лотфулла Яҡупов килеп ятты. Күкрәге яраланған, буғай, ҡан һарҡый. Ул: "Иптәш комиссар, ана, унда дошмандың дзоты бар, юҡ итергә кәрәк", - тип, көсһөҙ ҡулдарын болғап, көньяҡҡа күрһәтте лә, үҙе һушынан яҙҙы. Ысынлап та, шул яҡтан, аҡ ҡар өҫтөндә ҡыҙыл таҫма кеүек эҙ ҡалдырып, беҙгә табан өҙлөкһөҙ пуляләр яуа. Эргәмдә ятҡан өлкән лейтенант Рәшит Аҙнабаев, миңә ҡарап: "Иптәш комиссар, рөхсәт итегеҙ, мин уны хәҙер..." - тип алға йүгерҙе. Ундай хәлдә, ғәҙәттә, ваҡыт яй үтә. Ләкин күп тә тормай, Аҙнабаев йүгергән яҡта дошман уты тонсоғоп ҡалды. Шуны ғына көтөп торған шикелле, икенсе полк һуғышсылары парторг Хәсән Бикчурин етәкселегендә: "Алға, алға!"- тип оран һалып, яңы атакаға күтәрелделәр. Был ваҡыт капитан С. Хәбиров та беҙгә килеп ҡушылды. Ул да үҙен ҡамап алған дошманды йырып сыға алған.

...Был минуттарҙа дивизия штабының РС установкалары батареяһы комиссары майор Дәүләт Ариткулов ҡамалышта ҡалған хәлдә йәшерен ҡоралды дошман ҡулына төшөрмәҫ өсөн шартлатырға, унын менән ҡушар үҙенең дә һәләк буласағын белә тороп та, тәүәккәлләп, үҙ ғүмерендәге иң һуңғы һәм яуаплы кнопкаға баҫа ине.

Был минуттарҙа рядовой артиллерист Хәмит Әүхәтов, кисә генә Владимировка янындағы алышта бер үҙе ике фашист танкыһын атып яндырған һәм, һушһыҙ хәлдә әсир алынып, бикле вагонда Дебальцевоға оҙатылған Әүхәтов, шашып көнбайышҡа сапҡан поездан һикереп төшөп, Украина партизандарына барып ҡушылыу, ауыр һәм данлы һуғыш юлдары үтеп, һуңынан Будапештты азат итеү хаҡына башын һалыу өсөн ҡанлы ҡулдары менән шаҡарып, вагон иҙәнен вата ине.

Был минуттарҙа 15-се дивизияның политбүлек начальнигы Павел Николаевич Кузнецов, Формандировка утарының осондағы хәҙер ҙә төҙөк таш һарайҙарҙың эсендә, снаряд ярсығы менән күкрәк ҡапҡасы умырылып ташланып, дошман тарафынан тотош уратып алынған хәлдә, пистолетендәге һуңғы пуляләрҙе ата-ата, "Интернационал" йырлап йән бирә ине...

Иртәнге сәғәт биштән етегә тиклем фашистәр беҙгә ҡаршы алты тапҡыр ябырылды, ләкин кире сигенергә мәжбүр булды. Беҙҙең корпусты, шул иҫәптән беҙҙең дивизияны юҡ итергә маташҡан дошман маҡсатына өлгәшә алманы.

Дивизияның иҫән ҡалған һуғышсылары һәм офицерҙәре Ғайсаров етәкселегендәге разведчиктәр кәңәше менән яҡындағы Широкий утары эргәһендәге балкаға тупланды. Беҙҙең дивизия (генерал Шайморатов һәләк булғандан һуң уға подполковник Г. Е. Фондеранцев етәкселек итә ине) 24 февралдең иртә таңында, дошман фронтын өҙөп, Малониколаевка ауылы тәңгәлендә үҙебеҙҙең яҡҡа - Оло ергә аяҡ баҫты. Ҡаты яралыларҙы, плащпалаткаларҙан носилкалар яһап, күтәреп алып сыҡтыҡ. Был эш менән доктор А. Сарыгин һәм М. Вәлиев етәкселек итте. Бында беҙҙе ҡаршы алыусы частәр менән туғандарса ҡосаҡлашып шатланыштыҡ. 14-се дивизия иһә генерал Якунин етәкселегендә башҡа урындан - 23 февралдә үк Елизаветовка ауылына йырып сыға.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ Беҙ боронғо ата-бабаларыбыҙ йәшәгән рухи мөхиттән, тәбиғәттән шул тиклем алыҫлашҡанбыҙ, шуның өсөн йырҙарыбыҙ ҙа башҡаса. Хәҙер музыкала күберәк техник мөмкинлек өҫтөнлөк итә, моң түгел.



# ВАҠЫТ, ТАРИХ БАР хатта йырҙарҙы ла

**Өфө ҡалаһының 7-се музыка мәктәбе директоры Айрат (Раит) Рәшит улы Ғайсиндың тәржемәи хәле тураһында бик күпте яҙырға мөмкин булыр ине. Беҙ иһә шуның менән генә сикләнәйек: Айрат Әбйәлил районының Аһылай (Өскүл) ауылында 14 балалы ғаиләлә 11-се булып донъяға килгән, Учалы музыка училищеһын, Өфө сәнғәт институтын тамамлаған, 6 бала атаһы, бик күп популяр йырҙар, симфоник, хор әҫәрҙәре авторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, бер нисә йыл рәттән Башҡортостан Композиторҙар союзы рәйесе булып тора. Композитор булараҡ, Айрат Рәшит улының бер кемдекенә лә оҡшамаған үҙ музыкаль йөҙө, стиле, үҙ ҡараштары бар. Уның менән сәнғәт, мәҙәниәт, халыҡ моңо, эстрада йырҙары, тәрбиә, быуындар күсәгилешлеге хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Айрат, һин хеҙмәт биографияңды тракторсы булыуҙан башлағанһың. Бынан бер нисә йыл элек трактор тауышы миңә йыр яҙырға ярҙам итте, тигәйнең. Был хәлде нисек аңлата алаһың?**

- 1980 йылдың июнь айында Әбйәлил районындағы 17-се һанлы ауыл хужалығы профессиональ техник училищеһын тамамлап, октябрҙән урталарына тиклем Генерал Шаймуратов исемендәге колхозда эшләп алдым да, көҙ еткәс әрмегә алдылар. Һалдат хеҙмәтенән ҡайтҡас, тағы ла тракторсы булып эшкә сыҡтым. Тырышып эшләнем, бер нисә тапҡыр ер һөрөүҙә алдынғы урынды яуланым. Тракторҙың тауышында мин һәр ваҡыт көй эҙләнем. Тынлай белһәң, унда ла көй бар. Хатта газды төрлөсә баҫыуыңа ҡарап, көйҙөң интонацияһы үҙгәреп тора. Мин был хәлде ана шул интонация менән күңел ауаҙының уртаҡлығылыр тип уйлайым. Ер һөргәндә төрәнде ергә төшөрөп, газға баҫыуым була, тракторым көсәнеп китә - шуға ҡушылып күңелемдә йыр тыуа ине. Ул саҡта нота яҙа белмәй инем шул, күңелдә тыуған йыр-моңдарымдың бик аҙҙарын ғына күңелемдә һаҡлап ҡала алдым.

**Әле килеп трактор, машина тауышын ишетһәң, ниндәй тойғолар кисерәһең?**

- Күптән руль артындамын, әле унынсы машинам менән йөрөйөм. Трассаға төшөп алам да, машинамдың двигателенә ҡушылып йырлайым. Ә бит тынлаһаң, машина ла ошо рәүешле йырлап китеп бара. Өфө урамын таҙартыусы тракторҙарҙы күреп ҡалһам, туҡтап, ниндәй нотала тауыш сығарғанын самалайым, янымда пианино булһа, ҡушылып уйнай ҙа алыр инем кеүек.

**Тағы ла ниндәй тауыштарҙа көйҙәр ишетә алаһың, улай булғас?**

- Ишетә, тоя белһәң, донъялағы һәр нәмәлә көй, моң барҙыр, тип уйлайым. Ел сығып, буран ҡупһа, оркестр уйнай башлаған һымаҡ. Хатта тынлыҡтың да үҙ көйө бар, донъялағы иң мөғжизәле көй ул. Студент саҡта таң менән Салауат һәйкәле янына сыға торғайным. Тынлыҡты тыңларға. Ундай саҡта эске моңоң ишетелә, үҙ-үҙеңде тыңлайһың, уй-фекерҙәрең яйға һалына, зиһенең күнекмә үтә. Әле мин ике ҡурайға ун биш минутлыҡ көй яҙам. Һин уны тыңлап, миңә: "Айрат халыҡ йырын сәлдергән", - тип әйтәсәкһең. Шул уҡ ваҡытта унда һин бер халыҡ йырынан да интонация таба алмаясаҡһың. Ул көйҙө мин тынлыҡты тыңлаған саҡта үҙ-үҙемдең эске тауышымдан ишеттем.

**Мин шиғырҙың нисек тыуыуын аңлата алам: ул иң тәүҙә фекер, образ йә хис, кисереш булараҡ күңелдә моронлай. Ә бына көй, йыр нисек ярала? Фекер булыпмы, образмы, тойғомо? Ошоно аңлатып буламы? Әйтәйек, Рәмил Йәнбәктең шиғырына яҙылған "Әсәкәйем минең" йыры?**

- 1985 йылда Учалы музыка училищеһының хор менән дирижерлыҡ итеү бүлегенә уҡырға индем. Бәхетемә күрә ул саҡта училищелә Салауат Рафиҡ улы менән Лилиә Ҡотлоғужа ҡыҙы Сәлмәновтар эшләй ине. Яңы йылдан һуң ҙур һынауҙар аша үтеп, музыка теорияһы бүлегенә күстем. Ул бүлеккә бары музыка мәктәбенең фортепиано класын тамамлаусыларҙы ғына ала инеләр - бик ауыр бүлек. Тәү тапҡыр шунда нота өйрәнә башланым. 1987 йылдың көҙ айҙарының береһендә Учалынан Ҡаҙаҡҡол ауылы аша тауҙар араһынан тыуған ауылым Өскүлгә йәйәү ҡайтып барғанда яралды күңелемдә ул йырҙың тәүге ауаздары. Ғөмүмән, юл йөрөгәндә һәр ваҡыт әсәйемде уйлай торғайным. Мин бит колхозда эшләп йөрөгәндә эшемде, әсәйемде ҡалдырып уҡырға киткәйнем. Уға тиклем колхоздың комсомол ойошмаһы секретары ла инем. Артабан партияның район комитетында эшләү перспективаһы барлыҡҡа килгәйне, мине партия юғары уҡыу йортона юлланма ла тапшырғайнылар. Шуларҙың барыһынан да ваз кистем. Әсәйем бының өсөн ныҡ ҡайғырҙы. Шуға күрә һәр ваҡыт әсәйемә нисек булһа ла ярҙам итергә тырыша, уны борсолмауын теләй торғайным.

Ана шулай юлда йөрөгәндә күңелемдә моң тыуҙы. Әле уның һүҙҙәрен дә, Рәмил Йәнбәк тигән шағирҙың барлығын да белмәй инем. Шиғыр китаптарын аҡтарған саҡта уның ошо шиғыры килеп сыҡты. Әсәйемә әйтергә теләгән һүҙҙәремде уның нәҡ ошо шиғырында таптым.

**Әсәйең был йырыңды тәүге тапҡыр башҡарғанда нисек ҡабул итте, иҫеңдәме?**

- Көҙ көнө ауылға ҡайтҡанда әсәйем менән икебеҙ генә картуф алырға сыҡтыҡ. Шул саҡ әсәйемә: "Әсәй, мин һиңә арнап йыр яҙҙым", - тинем. "Миңә лә арнап кеше йыр яҙа икән", - тигән булды ул аптырап. Шунан картуф баҡсаһының уртаһына баҫып тороп, ҡысҡырып йырлап ебәрҙем:

Эх, ҡысҡырып бер йырларға ине,
Әсәйемдең ятып ҡулына.
Ул йөрәге менән аңлар ине
Ниндәй ҡайғы төшкән улына...

Йырымды күршеләр ҙә ишетеп ҡалып, эштәренән туҡталып беҙҙең янға йыйылып киттеләр. Шулай итеп, был йырҙың исем туйы оло концертҡа, тамашаға, байрамға әүерелде. Шунан һуң ул йыр ун йыл самаһы башҡарыусыһын көтөп ятты. Һәр йырҙың үҙ башҡарыусыһы була бит инде. Шунан Альберт Салауатов уны табып алған. Мин институтта уҡып йөрөй инем ул саҡта. Альберт: "Айрат ағай, әгәр ҙә был йырҙы минән башҡа кешегә бирһәң, һин еңәйәтсе буласаҡһың", - тиеп йырға инәү һалып ҡуйҙы. Шунан һуң был йыр Альберт Салауатовтыҡы булып китте. Фәрит ағай Бикбулатов та һуңынан башҡарҙы уны. Әлеге ваҡытта Тимур Рамазанов үҙ репертуарына алырға уйлай.

**Һәр йырсының, композиторҙың "аҡҡош йыры" була. Һинең өсөн ҡайһы йырың шундай билдәләнештә?**

- Ул берәү генә түгел инде ул. Иң тәүҙә ошо әсәйемә арналған йырым, унан һуң Сафуан Әлибаев һүҙҙәренә "Каршы сыҡтым" йыры. Заһир ағай Исмәғилев ул йырымды ныҡ яратты. Үҙе иҫән сағында аҙнаһына ике-өс тапҡыр тик уның өсөн генә радионан яңғырата торғайнылар. Бирмәй башлаһалар, радиоға шылтыратып, дәғүәләрен дә белдергән Заһир ағай. Йырҙарға килгәндә тағы ла "Килсе, гүзәлем" (халыҡ һүҙҙәре), "Иртә таңда" (Мостай Кәрим һүҙҙәре) "Һары япраҡ", "Аңламаның" (Мәүлит Ямалетдинов һүҙҙәре), "Һағыш" (Әсхәл Әхмәт-Хужа һүҙҙәре), "Мизгел" (Дамир Шәрәфетдинов һүҙҙәре), "Тамсыгөл" (Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай һүҙҙәре) тигән йырҙарымды әйтеп үтергә була. Тағы ла "Тәфтиләү", "Үткән йылдар риүәйәте" тигән симфоник поэмаларым бар.

**Бөтә шиғырҙарға ла йыр яҙып булмай тиҙәр, шул дөрөҫмө?**

- Был хаҡта беҙ ваҡытында Риф Мифтахов менән дә бәхәсләшкәйнек. Бөтә шиғырҙарҙың да эске моңо бар, бары тик композитор шағирҙың шул эске моңон ишетергә генә тейеш. Ҡайһы шиғырҙарҙы уҡый башлау менән моңо күңелдә яңғырай башлай, ҡайһыларын сейфҡа асҡыс яраткан һымаҡ асып инергә кәрәк. Мәҫәлән, Сафуан Әлибаев менән Рәмил Йәнбәктең шиғырҙарын уҡып өлгөрмәҫтән алда уҡ моң аңҡып тора.

**Ни өсөн хәҙер "Урал", "Буранбай" һымаҡ халыҡ йырҙары яҙылмай? Хәсрәтләнеү ҙә, ҡайғырыу ҙа бар, композиторҙарҙың техник мөмкинлеге лә сикһеҙ.**

- Сөнки халҡыбыҙҙың ул йырҙар тыуған ваҡыттағы яҙмышы сикһеҙ фажиғәле һәм аяныслы булған. Егерме йыллап элегерәк Мәүлит ағай Ямалетдинов менән ошо хаҡта һөйләшеп ултырғаным хәтерҙә. Мәүлит ағай халҡыбыҙҙың фажиғәле үткәнен бик тәрән тойған һәм ижад иткән шәхес булды. Ҡан менән һуғарылған йылдарҙа башҡа төрлө шатлыҡлы йырҙар тыуыуы мөмкин дә булмағандыр. Мин ҡайһы ваҡыт халыҡ йырҙарына оҡшатып йырҙар яҙып ҡарайым да, бының мөмкин булмағанлығын аңлап туҡталып ҡалам.

**Заһир Исмәғилев менән Хөсәйен Әхмәтовтарҙың халыҡ йырҙарына оҡшаған йырҙары бар бит. Улар нисек яҙа алды икән?**

- Һорауыңа һорау: һин ауыл ҡарлуғасы менән ҡала ҡарлуғаһының һайрауын тынлап ҡарағаның бармы?

**Юҡ.**

- Тыңлап ҡара, улар икеһе ике төрлө. Хатта ҡалалағы мин йәшәгән йорт янындағы күгәрсендәр менән ауылдағы атаәсәм йортоноң ҡыйыҡ башындағы күгәрсендәрҙең дә гөрөлдәүе башҡаса, үҙенсә. Бының менән шуны ла әйткем килә: беҙ боронғо ата-бабаларыбыҙ йәшәгән рухи мөхиттән, тәбиғәттән шул тиклем алыҫлашҡанбыҙ, шуның өсөн йырҙарыбыҙ ҙа башҡаса. Хәҙерге ижад кешеһе профессиональ яҡтан нисек кенә үҫешмәһен, күңел һайлығын байытырлыҡ мөхит тәбиғәттә, тарихта тороп ҡалған. Хәҙер музыкала күберәк техник мөмкинлек өҫтөнлөк итә, моң түгел. Был уңайҙан үҙенсәлекле бер күҙәтеүем бар. Үҙешмәкәр композиторҙар, асылда, ауыл ерендә йәшәп ижад итеүселәр. Улар сығарған йырҙарҙа профессиональ кимәл түбән булһа ла, моң бар. Шуға күрә уларҙың бер ун йырын бергә ҡушһаң ғына бер йыр килеп сығыуы бар. Шул уҡ ваҡытта кешенең күңеленә тәбиғәттән моң һалынған икән, уны йыр яҙма тип тыйып та булмай.

**Һуңғы ваҡытта йырсылар һәм композиторҙар шул тиклем күбәйҙе. Һинең өсөн композитор ниндәй кеше, йыр сығарған ғына кешеме? Композитор ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?**

- Хәҙер барлыҡ сиктәр юйылды, әйтәйек, кем ул профессиональ композитор, кем ул үҙешмәкәр композитор? Мин берәүҙе лә үпкәләткем килмәй, әммә был хаҡта әйтергә тейешмен. Профессиональ композитормы ул, йырсымы, бейеүсеме йәки рәссаммы - барыһы ла иң беренсе нәүбәттә профессиональ этика тигән төшөнсәгә эйә булырға тейештәр. Улар музыка теле менән тарих яҙыусылар, ә тарих дөрөҫлөктө ярата. Ғөмүмән, ысын ижадсы бүләк-исемдәргә ынтылмай. Шул арҡала күп кенә профессиональ композиторҙар иҫән саҡтарында үҙҙәренең ҡайһы бер күләмле әҫәрҙәрен ишетә-күрә алмай ҡалалар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

**Әммә үҙешмәкәр композиторҙарҙың йырҙары донъяны тултырҙы бит, радио һәм телеэфирҙар аша көнө-төнө яңғырай. Халыҡ ысын сәнғәт шулай була икән тип ысын сәнғәттән төңөлөп ҡуймаҫмы?**

- Унан ҡурҡырға ярамай. Беҙ, гәҙиттә, эш араһында йәки бы-

*Ишетә, тоя белһәң, донъялағы һәр нәмәлә көй, моң барҙыр, тип уйлайым. Ел сығып, буран ҡупһа, оркестр уйнай башлаған һымаҡ. Хатта тынлыҡтың да үҙ көйө бар, донъялағы иң мөғжизәле көй ул. Студент саҡта таң менән Салауат һәйкәле янына сыға торғайным. Тынлыҡты тыңларға. Ундай саҡта эске моңоң ишетелә, үҙ-үҙеңде тыңлайһың, уй-фекерҙәрең яйға һалына, зиһенең күнекмә үтә. Әле мин ике ҡурайға ун биш минутлыҡ көй яҙам. Һин уны тыңлап, миңә: "Айрат халыҡ йырын сәлдергән", - тип әйтәсәкһең. Шул уҡ ваҡытта унда һин бер халыҡ йырынан да интонация таба алмаясаҡһың. Ул көйҙө мин тынлыҡты тыңлаған саҡта үҙ-үҙемдең эске тауышымдан ишеттем.*

***✓ Йылдар үтер, донъялар һилләнер, яңы быуын кешеләре үҫеп сығыр. Шул ваҡытта бөгөнгө эстрада йырҙарының береһе лә тороп ҡалмаясаҡ, бары тик халыҡ йырҙары һәм профессиональ композиторҙар әҫәрҙәре тороп ҡаласаҡ.***

лай ғына һөйләшеп ултырыр өсөн печеньеға ҡушып сәй эсәбеҙ. Көнөнә бер нисә тапҡыр шулай ауыҙ сылатабыҙ. Һин әйткән йырҙар ҙа ана шундай сәй эсеү генә һымаҡ. Ә инде ҡәҙерле ҡунаҡтар саҡырыр булһаҡ, бишбармаҡ бешерәбеҙ, торт алабыҙ, башҡа ризыҡтар әҙерләйбеҙ, ҡымыҙ, башҡа эсемлектәр хәстәрләйбеҙ, фужерҙарыбыҙҙы сығарабыҙ. Бындай мәжлестәр иҫтә лә ҡала. Ә инде ауыҙ сылатып сәй эсеүҙәребеҙ иртәгәһенә үк иҫебеҙҙән сыға. Бушлыҡ урынына ниндәй ҙә булһа моң яңғырап тороуы насар түгелдер, тип уйлайым.

Асылда, үҙешмәкәр композиторҙар (йыр яҙыусылар тиһәк, дөрөҫөрәк булыр һымаҡ) ауыл ерендә тыуып үҫкән ижадсылар. Күптәренең йырҙарында профессиональ кимәл етерлек булмаһа ла, уларҙың һәр ҡайһыһында моң бар һәм быны инҡар итергә кәрәкмәй. Ә бына уларға ярҙам итергә кәрәк ине.

# НӘМӘНЕ...

## Үҙ урынына ҡуясаҡ



**Мөхәммәтйән Ҡаҙаҡбаев, Сөләймән Абдуллин, Абдулла Солтанов кеүек халҡыбыҙ йырсылары махсус уҡыу йорто бөтмәгән, һинең телдә әйткәндә, үҙешмәкәрҙәр. Әммә уларҙың йыры һәр төрлө профессиональ йырсыларҙыҡынан да тәьҫирлерәк. Ғөмүмән, халыҡсанлыҡ менән профессионаллек ниməһе менән айырыла тип уйлайһың?**

- Юғары уҡыу йортон тамамлау тураһындағы диплом кешенең юғары белемле, юғары интеллектлы булыуын аңлатмай бит әле. Һин әйткән йырсылар халҡыбыҙҙың элек-электән килгән халыҡ ижади сәнғәт мәктәбендә белем алып, тәбиғәт ҡуйған тауышын үҙаллы үҫтергәндәр. Профессиональ кимәлдең иң юғары нөктәһенә еткән саҡта ла халыҡсанлыҡты һаҡлап ҡала алыуҙары бик мөһим күренеш. Шул ул ваҡытта күңелдәре, йөрәктәре, рухтары менән шул кимәлгә еткән даһиҙар тип уйлайым.

**Һинең ижади шәхесең формалашыуҙа Заһир Исмәғилевтың роле ҙур булған. Был хаҡта нимә әйтерһең?**

- Заһир ағай менән беҙ аталы-уллы һымаҡ булдыҡ. Вафат була торған йылында аҙнаһына бер тапҡыр эргәһенә барып йөрөнөм. Уға тиклем дә һәр ваҡыт бәйләнештә торҙоҡ, шылтыратмаһам, үҙе шылтыратып, ҡайҙа йөрөйһөң, тип әрләй торғайны.

Заһир ағай миңә музыка серҙәрен генә түгел, йәшәү мәғәнәһен дә өйрәтте. Бик күп тормош һабаҡтары бирҙе. Шуларҙың бер нисәүһе:

- "Өфө, Өфө тиҙәр, бында бит менталитет бөтөнләй икенсе төрлө. Шуға күрә һиңә бик ауырға тура киләсәк. Барыһына ла әҙер бул, шулай итһәң, ауырлыҡ килгәндә, нисек кенә ҡыйын булмаһын, алдан әҙер булғас, ҡоламаҫһың", - тине;

- Бер ваҡытта ла, шулай ит, былай ит, тип аҡыл өйрәтмәне. Һәр ваҡыт кинәйәләп, атаһының һүҙҙәрен килтереп, халыҡ аҡылына таянып, башҡа сағыштырыуҙар аша барыһын да үҙемдең ихтыярға ҡуйҙы, мыжыҡ булманы. Был йәһәттән уның был һабағын юғары баһалайым, сөнки йәштәр һәр ваҡыт өлкәндәрҙең нотоғонон кирегенен башҡарыусан була. Әйткәндәй, Заһир ағайҙың был һабағын мин үҙ балаларыма ҡарата ла ҡулланам;

-"Ҡустым, һин бер нәмәне онотма. Әгәр ҙә Өфөлә йылмайып килеп һине ҡосаҡлап маҡтайҙар икән, ул ерҙән тиҙерәк ҡасырға тырыш, ә инде күҙеңә ҡарап күҙеңде аҡырайтҡансы әрләүсе булһа, барып ҡосаҡла ла, рәхмәт әйт", - тине ул бер мәл. Мине бер саҡ тәжрибәһеҙ кешене маҡтап, йүпәләп, Башҡортостан Композиторҙар союзына рәйес итеп ҡуйҙылар ҙа, өс йыл эсендә өҫтөмдән шундай том-том ялыуҙар яҙҙылар, сәстәрем ап-аҡ булды. Шул саҡта ғына Заһир ағай биргән һабаҡтың мәғәнәһен аңланым. Беҙ, ауылдан килеүсе башҡорттар, йылмайып килеп ҡосаҡлап килеүсенең башҡа маҡсаттары ла булғанлығын аңлап бөтмәйбеҙ шул. Кемдер маҡтағас, ысынлап та, шулай икәнбеҙҙер тип уйлап һемәйәбеҙ;

- "Атайым: "Ерҙән бер сантиметр ҙа күтәрелмә, ел йыға һуғыр ҙа ҡуйыр", - тиер ине Заһир ағай. Бында уның "һауаланма, әллә кем булма, үҙең булып ҡал" тигән иҫкәртеүе лә бар ине;

- "Атайым әйтә торғайны: "Ишегеңде асып инһәләр - ҡыуан, асыҡ ишегеңдән инмәһәләр, уйлан", - тиер ине Заһир ағай.

***Юғары уҡыу йортон тамамлау тураһындағы диплом кешенең юғары белемле, юғары интеллектлы булыуын аңлатмай бит әле. Һин әйткән йырсылар халҡыбыҙҙың элек-электән килгән халыҡ ижади сәнғәт мәктәбендә белем алып, тәбиғәт ҡуйған тауышын үҙаллы үҫтергәндәр. Профессиональ кимәлдең иң юғары нөктәһенә еткән саҡта ла халыҡсанлыҡты һаҡлап ҡала алыуҙары бик мөһим күренеш. Шул ул ваҡытта күңелдәре, йөрәктәре, рухтары менән шул кимәлгә еткән даһиҙар тип уйлайым.***

Бөгөн иҫән-һау булыуымда, ошо урында етәксе рәүешендә эшләүемдә, алты бала атаһы булыуымда Заһир ағайҙың роле ифрат ҙур. Гел генә мәҡәл-әйтемдәр менән ғүмерлек һабаҡ бирҙе ул. Проблемаларым килеп тыуһа, һәр ваҡыт Заһир ағайҙы, уның һабаҡтарын иҫкә төшөрәм һәм улар миңә ярҙам итә.

Өфө сәнғәт институтының "Композитор. Музыка уҡытыусыһы" бүлеген дә уҡырға инеп китеүемдә Учалы сәнғәт училищеһы уҡытыусыһы Салауат Сәлмәновтың ярҙамы ҙур булды. Шулай уҡ әсәйем яҡлап туғаным, ағайым, күренекле шағир, яҙыусы Мәүлит ағай Ямалетдинов иң ауыр саҡтарҙа рухи терәгемә әүерелде. Ул Мәскәүҙә юғары әҙәби курстарҙа уҡып ҡайтып, музыка мәктәбендә эшләй башланы. Бөтә көсөмдө ҡурайға һалдым. Уларҙың ярҙамы менән ике йылда музыка мәктәбенең ике йыллыҡ программаһын, музыка училищеһының дүрт йыллыҡ программаһын үтеп, Өфө сәнғәт институты тупһаһына баҫыуымда композитор Салауат Рафиҡ улы менән Лилиә Ҡотлоғужа ҡыҙы Сәлмәновтарҙың түккән көстәре оло баһаға лайыҡ һәм улар алдында баш эйеп, рәхмәттәремде еткерәм. Мәүлит Байгилде улы Ямалетдиновты ла әйтеп үтеү урынлы булыр. Өҫтәмә дәрес итеп музыка мәктәбенең ул уҡытҡан Ҡурай класына йөрөнөм бер нисә йыл. Шул мәктәптә Абдулла Солтанов менән осрашыу ойоштorҙо Мәүлит ағай. Шул кисәлә мине ул ҡурай менән аккомпаниатор итеп сығарҙы. Йырлап сыҡҡас, Абдулла ағай: "Ҡустым, һин беҙҙең яҡҡа оҡшағанһың, ҡайһы ауылдан?" - тип һораны. Әбйәлил районының Өскүл ауылынан икәнлегемде әйткәс: "Һәйбәт, һинән көслө ҡурайсы сыға", - тигән булды.

**Хәҙерге заман башҡорт һәм татар эстрада йырҙары буталып бөткән, ҡайһыһы кемдеке икәнен дә белеп булмай. Бигүк яҡшы күренеш түгел бит инде был, ошо мәсьәләгә нисек ҡарайһың?**

- Дөрөҫ әйтәһең, эстрада йырҙарын ҡапылғарай айырып та булмай. Беҙ ул йырҙарҙы сығарыусы композиторҙарҙың һәм шағирҙарҙың милләтенә ҡарап ҡына айыра алабыҙ. Ә көйҙәргә килгәндә инде, йырҙарҙы тыңлаған саҡта халыҡ йырҙары ғына ныҡ айырыла. Хәҙерге заман эстрада йырҙары араһында профессиональ сәнғәт кимәленә яуап бирерлектәре бик һирәк. Башҡорт халыҡ йырҙарының янына татар халыҡ йырҙарын ҡуйһаң, башҡа милләт кешеләренә икеһе лә бер үк һымаҡ ишетелә, уларҙы тик башҡорттар менән татарҙар үҙҙәре генә айыра ала. Бында интонация, диапазон, көй ағышы тигән төшөнсәләр алғы планға сыға. Ә эстрадаға килгәндә инде, мин былай уйлайым, тарихи ерлектән сығып ҡарағанда шулай буласаҡ та: йылдар үтер, донъялар һилләнер, яңы быуын кешеләре үҫеп сығыр. Шул ваҡытта бөгөнгө эстрада йырҙарының береһе лә тороп ҡалмаясаҡ, бары тик халыҡ йырҙары һәм профессиональ композиторҙар әҫәрҙәре, әйтәйек, Заһир Исмәғилевтың "Ғәзиздәрҙән ғәзиз әсәләр", Хөсәйен Әхмәтовтың "Тыуған ауылым" кеүек йырҙар ғына тороп ҡаласаҡ. Ул сағында башҡорт йырҙары ла, татар йырҙары ла айырылып күренеп торасаҡ. Ә заман йырҙары инде, бая әйткәнсә, ҡасандыр эсеп түккән сәй һымаҡ ҡына булып тойоласаҡ. Ваҡыт, тарих бар нәмәне, хатта йырҙарҙы ла үҙ урынына ҡуясаҡ.

**Морат Әхмәтовтың симфоник әҫәрҙәрен беҙҙең илдә бер оркестр ҙа уйнай алмай, тигән бер ҡыҙыҡ фекер ишеткәйнем. Был дөрөҫмө, ниндәй композитор ул Морат Әхмәтов?**

- Ул киләсәк композиторы, әҫәрҙәре ҡасандыр алғы планға сығасаҡ. Ғөмүмән, һәр профессиональ композитор киләсәк өсөн эшләй. Рәүеф Мортазин 9 симфония яҙған, уларҙың береһен дә үҙе тыңлай алманы. Ә Морат Әхмәтовҡа килгәндә, киләсәктә тап уның һәм шулай уҡ Салауат Сәлмәнов кеүек талантлы композиторҙарыбыҙҙың ижады аша донъя кимәлендә башҡорт музыка сәнғәтен беләсәктәр. Быға иманым камил. Уның менән яҡындан аралашып йәшәнек. Уның әйткәндәрен аңлар өсөн генә лә миңә аҙналар буйы уйланып йөрөргә тура килде. Унда атаһынан һалынған башҡорт моңо бар ине, икенсенән, профессиональ яҡтан ул юғары кимәлдәге пианист ине. Өсөнсөнән, ул халыҡ араһында йөрөгәндә халыҡ йырҙарын тыңлағанда бар донъяһын онотто, дүртенсенән, оркестр нескәлектәрен дә иң юғары кимәлдә белде. Морат Әхмәтов беҙҙең заман кешеһе түгел, киләсәктә йәшәйәсәк.

**Беҙ һинең менән ҡорҙаштар, Айрат, беҙҙең күп кенә быуындаштар 50 йәшкә лә етмәйенсә баҡыйлыҡҡа күсте. Бында төп сәбәпте нимәлә күрәһең?**

- Бында баяғы Заһир ағай һабаҡтарына кире әйләнеп ҡайтырға кәрәктер. Мине Заһир ағай 5 йыл һүҙымында Өфө мөхитендә йәшәргә лә өйрәтте. Ысынлап та, беҙҙе Өфө "өф" итеп ҡаршы алманы, нык ҡына ҡайыҙланы. Өфө кешеһе булып китеү өсөн баш ҡала халҡы менән үҙеңде бер иш итеп тойорға өйрәнергә, кәрәк урында үҙеңде һындырырға ла кәрәк булды. Ә беҙҙең күп кенә егеттәребеҙ һаман да ауылдыҡы булып ҡалды, яраҡлаша алманы һәм уларҙың баҡыйлыҡҡа иртә күсеүенең бер сәбәбе тап ошоға барып ялғаналыр тип уйлайым. Етмәһә, 90-сы йылдарҙа беҙҙең өҫтөбөҙҙә йүнле кейем дә булманы, атай-әсәйҙәребеҙ ҙә бай түгел ине. Мин кәләшем менән Сибайҙан Өфөгә килгәндә йәшәргә урыныбыҙ, фатирға инергә аҡсабыҙ булманы. Коляскала ятҡан бала менән паркта йоҡлап йөрөгән саҡтарыбыҙ ҙа булды.

**Баҡыйлыҡҡа күскән егеттәребеҙ ауылдарында ҡалған булһалар, бәлки, иҫән дә булырҙар ине тиһеңме, улай булғас?**

- Тап шулай. Мин уларҙың профессиональ ижад кимәлдәре хаҡында әйтмәйем, ауыл кешеһе менән ҡала кешеһе психологияһы хаҡында ғына һүҙем. Икенсенән, уларҙың иртә китеүе таланттарының юғары кимәлдә булыуына ла бәйле.

**Ҡыҙыҡлы әңгәмәң өсөн рәхмәт, Айрат дуҫ! Форсаттан файҙаланып, һине оло юбилейың, 60 йәшең тулыу менән ҡотлайым, йырҙарыңа халҡыбыҙ йырҙарылай оҙон ғүмер, үҙеңә ныҡлы һаулыҡ, ейән-ейәнсәрҙәр, бүләр-бүләсәрҙәр ҡыуанысы теләйем !**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Уйламағанда ҡатындың үҙ теләге менән икеһе өсөн дә тыйылған сетерекле темаға күсеүе егетте ҡаушатты. Был минутта Хәкимә уны үтәнән-үтә күрә, егеттең ниндәй маҡсат менән бында йөрөүен һиҙә кеүек ине.***




Айҙар Хәкимәнең өйөнә яҡынлайғас, уға телефондан шылтыратты:

- Хәйерле иртә, Хәкимә! - тине егет күңелендәге ҡапма-ҡаршы тойғоларҙы һиҙҙермәҫ өсөн мөмкин тиклем күтәренке тауыш менән.

- Хәйерле иртә... - Ҡатын һалҡын ғына өндәште. - Бик шат күренәһең. Ни булды?

- Тиҙҙән һине күрәм бит! Шуға ҡыуанам, - тигән булды егет һөйләшеүҙе әлегә күңелле тулҡындарҙа алып барыр өсөн.

- Ышандырып етмәй. Ярай, кил. - Хәкимә телефонын һүндерҙе.

Аңламаҫһың, әллә Айҙарҙың килеүен оҡшатмаймы? Йоҡоһонан уятҡан тиер ине, сәғәт ун икенсе киткән. Ярай, ҡатындың кәйефенә, мөнәсәбәтенә ҡарап торор мәл түгел.

Айҙар килеп еткәндә Хәкимә баҡсала бәрәңге күмеп йөрөй ине. Был күренеш егеткә ауыр тәьҫир итте. Ҡатын уға йәл булып китте. Уйлап ҡараһаң, уның хәлендә бәрәңге ҡайғыһымы инде? Етмәһә, Айҙар ҙа тыштан ялтырап, эстән мәкерле маҡсат менән йөрөй бит. Егет күңелһеҙ уйҙарҙы тиҙерәк ситкә ҡыуырға ашыҡты, йөҙөнә гәмһеҙ йылмайыу ишараты сығарҙы.

Айҙарҙы күреп, Хәкимә, тәпкеһен эргәләге ағас олонона һөйәне лә, ҡаршы атланы.

- Оҙаҡланың, - тине ул. - Ярты сәғәт элек шылтыратҡайның.

- Мин йәйәү килдем. - Айҙар уға ҡаршы атланы. - Нинә туҡтаның? Әйҙә, мин дә ярҙамлашайым.

- Юҡ инде. - Хәкимә Айҙарҙы туҡтатты. - Килгән ҡунаҡты шунда уҡ эшкә ҡушмайҙар. Тәүҙә ашатып алалар. Беҙҙә йола шулай.

- Мин Ғәйнулла ағайҙа сәй эскәйнем.

- Беләм мин ирҙәр табынын. Етмәһә, ул бик аҙ ашай, тиҙәр, - тип көлдө Хәкимә. - Сәйҙән, икмәктән башҡа нәмә булмағандыр. Шулаймы?

- Шулайыраҡ.

- Әйттем бит. Ғәйнулла ағай бик сәйер кеше бит. Нисек уға юлыҡҡанһыңдыр.

- Сәйер? - тип ғәжәпләнде Айҙар. Дин юлында булғанға шулай уйлаймы?

- Намаҙ уҡый, ә үҙе мәсеткә йөрөмәй, тиҙәр. Кешеләр менән аралашып бармай.

- Мин ул тиклемен белмәйем.

- Алла тураһында һөйләп аптыратмаймы ни? Әйткәндәй, ул мине бер ҙур гонаһтан ҡотҡарҙы.

- Ниндәй? - тип ғәжәпләнде Айҙар.

- Ярай, бер һөйләрмен әле. Әйҙә бында.

Хәкимә егетте өйгә түгел, ә ихаталағы бейек ҙур ҡайын төбөндәге өҫтәл янына саҡырҙы. Һауа әле ныҡлап йылытырға өлгөрмәгән, шуға бындағы күләгәлә бер аҙ һалҡынса.

Айҙар тирә-яғына күҙ һалды. Был урын өйгә һырынып ултырған кескәй баҡса булып сыҡты. Тирәләтеп ултырған ҡуйы ҡыуаҡтар уны урамдан үткәндәргә лә, ҡапҡанан ингәндәргә лә күрһәтмәй, шуға Айҙар был урынға иғтибар итмәгән икән. Бында өҫтәл, ултырғыстарҙан башҡа, һауыт-һабалы шкаф, кескәй өҫтәлдә электроплита, тағы биҙрә, сүмес кеүек ваҡ-төйәк бар. Мөйөштәрәк бәләкәй һыуытҡыс ултыра.

Хәкимә өҫтәлгә ҡапланған ҙур таҫтамалды алды, унда табын әҙерләнгән ине. Ҡатын плитәне тоҡандырҙы, шунда уҡ сәйнүктең күңелле шыжлап ебәреүе ишетелде.

- Ҡунаҡ көтәһеңме әллә? - тип һораны егет өҫтәлгә күҙ һалып. - Табының бик мул.

- Һин бит ҡунаҡ, - тип йылмайҙы Хәкимә.

- Бында бит, кәм тигәндә, биш кешелек һый.

- Беҙҙә, һорап бирмә, һуғып бир, тигән һүҙ бар. Хужа тәҡдим итә, ҡунаҡ йәне теләгәнен һайлай. Әйҙә, рәхим ит.

Хәкимәнең "йәне теләгәнен һайлай" тигән һүҙҙәре Айҙарҙы һиҫкәндерҙе. Нинә? Уларҙы егеттең халыҡ теленән бик күп тапҡырҙар ишеткәне бар бит. Ошоғаса уға иғтибар ҙа итмәй, шунда уҡ онота ине. Ә был юлы, Хәкимәнең ары һөйләгәнен тыңламайынса, ошо хаҡта уйланды. Бәлки, Ғәйнулла ағайҙың йән хаҡындағы фекере арҡаһындалыр? Айҙарҙың уға биргән һорауы ла йәнгә бәйле ине бит. Икеһен ике төрлө осраҡта ишетһә лә, хужабикәнең әйткәне Ғәйнулла ағайҙың фекере менән тап килә! Иң ғәжәбе ошо! "Йәнең теләгәнде һайларға", тине икеһе лә. Аптырарлыҡ хәл бит! Яҙмыш ошолай итеп Айҙарға киләсәген дөрөҫ хәл итергә ярҙамлаша, тиерһең. Әллә ябай, тәбиғи һүҙҙәргә артыҡ иғтибар итәме?

- Ниндәй уйға баттың? - Хәкимә Айҙарҙың тыңламауын һиҙенде. - Аш һыуына.

- Һин, Хәкимә, ысынлап та һорап тормай, һуғып бирәһең икән, - тип көлдө Айҙар тәрилкәне ситкәрәк этеп. - Мин, мөмкин булһа, былау ғына ашайым да бер сынаяҡ сәй генә эсәм.

- Нисек ашамайһың? - тип бойоҡто Хәкимә ысын күңелдән. - Һинә тип аш бешерҙем бит. Саҡ ҡына ауыҙ ит инде.

- Ярай, - тип ризалашты Айҙар. - Бына бер киҫәк итен генә алам, мөмкинме? Ғәфү ит.

Йылҡы ите янына матур итеп ҡаҙылығын да һалған. Ғөмүмән, өҫтәлдәге һәр ризығы ла - салаттары ла, тәрилкәлә аралашып һалынған алма менән апельсины ла, улар янындағы винограды ла - барыһы ла зауыҡ менән теҙелгән. Ҡатын Айҙарҙы ҙур ҡунаҡҡа һанап, уға осҡарға тырышыуы күренеп тора. Ләкин, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, егет уларҙы ашау түгел, ауыҙ ҙа итә алмай, сөнки былауҙан һуң үҙенең ныҡ туйғанлығын тойҙо.

- Бик тәмле, рәхмәт. - Айҙар, башҡа ризыҡтарға ҡағылмаясағын аңғартып, сынаяҡтағы сәйгә үрелде.

Быны күреп, Хәкимә күңелһеҙләнде.

- Салат, емештәрҙе бөтөнләй тәмләп ҡараманың.

- Юҡ, юҡ, рәхмәт. Ныҡ туйҙым, - Айҙар, сәй эсә-эсә, тирә-яғына ҡараны. - Искәндәр күренмәй, йоҡлаймы әллә?

- Ниндәй йоҡлау был ваҡытта! Мин уны сәғәт һигеҙҙә үк балалар баҡсаһына илттем.

Быны ишетеп, Айҙар күңелһеҙләнде. Искәндәрҙе күреп, һөйләшеп, ҡыуанырға өмөтләнгәйне ул. Шуға кисә Хәкимәгә, үҙен ял иткәс, малай өйҙә булһын, тип әйтмәгәненә үкенде.

Искәндәрҙең бында юҡлығына Айҙарҙың күҙгә күренеп бошоноуы һиҙелде. Егеттең малайҙы үҙенеке кеүек күреп, шулай яҡын итеүен аңлауы ҡатынға бик рәхәт ине.

- Бөгөн иртәрәк алырмын, - тине Хәкимә, Айҙарҙы тынысландырырға теләгәндәй, ризыҡтарҙы һыуытҡысҡа ҡуйған арала. - Мин уға үҙемдең ял иткәнде һиҙҙермәҫкә тырышам. Белеп ҡалһа, балалар баҡсаһына бармайым, тип аптырата.

- Ял көнө, ысынлап та, өйҙә йөрөтөргә кәрәк уны, - тип үҙенсә кәңәш бирҙе Айҙар. - Һинә ҡарап, өй эштәренә лә өйрәнер ине.

- Уны ҡарап торорға ғына кәрәк. Ҡайҙа уға ваҡыт? - тип зарланды ҡатын. - Үткәндә күрмәй ҡалғанмын - мунса башына менеп киткән. Нисек ҡолап төшмәгән! Ҡотом осто. Сыбыҡ менән һуғып алдым аҙаҡ.

Был күренеште күҙ алдына килтереп, егет йөҙөн сырҙы.

- Улай ярамай. Бала бит ул.

- Кешегә аҡыл өйрәтергә анһат ул, - тине Хәкимә. - Бына улың булғас, үҙенсә тәрбиәләрһең. Ҡарап торам да, аптырайым. Шулай ныҡ яратыр инеңме икән үҙ балаңды?

Хәкимә егеткә яғымлы ҡараны.

- Мин балама ҡаты була алмам, ахыры. - Егет уйсанланды. - Күҙ алдына килтерә алмайым, нисек итеп уны күрмәй, көнө буйы эштә йөрөрмөн икән?

- Ә бисәңде күрмәй йөрөй алырһыңмы? - тип көлдө ҡатын.

Айҙар Хәкимәгә ҡарап алды ла, бер ни өндәшмәне. Ҡатын тауыш-тынһыҙ ғына өҫтәлдәге ризыҡтарҙың береүҙәрен һыуытҡысҡа ҡуйып, ҡалғанының өҫтөнә таҫтамал япты ла, һауыт-һаба һалынған бәләкәй кәстрүлде ҡулына алды.

- Өйгә индереп йыуам. Унда йылы һыу бар. - Хәкимә, рәхсәт һорағандай, егеткә ҡарап алды. - Һин бында ултырып тор. Мин - хәҙер.

Айҙар урынынан тороп, ишек алдына сыҡты. Бер мәл үҙенең тупһа янында торғанлығын аңланы. Бына аяҡ кейемен ҡырғыс. Ошоға башы менән бәрелеп һәләк булған Сәкинә. Ныҡлығын тикшергәндәй Айҙар уға тибеп ҡараны. Теге ҡыбырҙаманы ла. Ҡыра торған урыны үткер генә. Өҫтән түгел, ерҙә баҫып торған ерҙән уға ҡолап, башың менән һуғылһаң, тере ҡалырмын тимә.

Ошо ерҙә өйҙән Хәкимә килеп сыҡты. Айҙарҙы аяҡ ҡырғыс янында күргәс, ҡатындың күҙҙәрендә һағайыу күренгән кеүек тойолдо егеткә.

- Әйе, ошо ҡырғысҡа бәрелде Сәкинә, - тине Хәкимә. Шунан, тупһанан төшөп, Айҙар янына килде.

Уйламағанда ҡатындың үҙ теләге менән икеһе өсөн дә тыйылған сетерекле темаға күсеүе егетте ҡаушатты. Был минутта Хәкимә уны үтәнән-үтә күрә, егеттең ниндәй маҡсат менән бында йөрөүен һиҙә кеүек ине. Айҙар ни әйтергә белмәй торғанда, Хәкимә көтмәгәндә ярҙамға килде.

- Мин күрәм, - тине ул, - һине ниҙер борсой. Килгәндән бирле ниҙер һорарға теләйһең. Шулаймы?

Ҡатындың ҡапыл асыҡтан-асыҡ һөйләшеүгә саҡырыуына ғәжәпләнде Айҙар. Егеттән айырмалы рәүештә, Хәкимә һис тә был ҡатмарлы ваҡиға хаҡында әңгәмә ҡорорға ҡурҡмай шикелле. Бик һәйбәт.

- Шулайыраҡ, - тине Айҙар ҡатынды үҙе әйҙәгән йүнәлештән нисек тә айырмаҫҡа тырышып.

Хәкимә тәрән итеп тын алды ла:

- Һин минең тарихымды белгең киләме? - тип һораны, көтмәгәндә.

Хәкимә егеттең күҙҙәренә ҡарап алды. Ә Айҙар уның һорауының мәғәнәһен ҡапыл ғына аңламаны. Ниндәй тарих? Ошо мәлдә Айҙарҙы иң ҡыҙыҡһындырғаны - Сәкинә менән булған фажиғә хаҡындағы дөрөҫлөк. Ошоно тарих тип атаймы Хәкимә, әллә бөтөнләй икенсе ваҡиға тураһында һүҙ йөрөтмәксеме?

Айҙар юҡ-бар һорау менән Хәкимәне албырғатырға теләмәне.

- Әйе, - тине Айҙар. Һүҙҙең оҙон буласағын һиҙемләп, нигеҙ буйында торған эскәмйәгә ымланы. - Әйҙә, ошонда.

Килеп ултырғас, Хәкимә йәнә көрһөндө.

- Ҡыҙыҡ, һин минең улым барлығын нисек белдең? Ҡайһылайтыбыраҡ һөйләнеләр һинә? Уйнаштан бала тапҡан тинеләрме?

Хәкимә, көләмһерәп, егеттең яуабын көттө.

- Әйе, - тип ҡыҫҡа яуап бирҙе Айҙар, һүҙҙең бөтөнләй көтөлмәгән яҡҡа боролоуына ни тиергә белмәйенсә.

Мин быны һиҙенәм, тигән кеүек, Хәкимә етдиләнеп, ҡарашын алыҫҡа төбәне. Шунан һүҙен башланы.

- Ун өс-ун биш йәштәрҙә тиңдәш малайҙарҙың, өлкәнерәк егеттәрҙең миңә ҡыҙыҡһынып ҡарауҙарын тоя инем. Иплап кенә төртөп китәләрме, шаян һүҙ ҡушалармы шунда. Тәүҙә аптырай инем, аҙаҡ күнегә башланым. Бер ваҡыт запискалар яуырға тотонҙо. Егеттәр осрашырға саҡыра, оҡшатыуын, хатта яратыуын белдерә. Мин бөтә ҡыҙҙарға ла ошондай хаттар яҙалар икән тип, уларҙы әхирәттәремә күрһәтеп, бергәләп көлә инек. Тик ҡыҙҙар үҙҙәренә килгәндәрен миңә күрһәтмәйҙәр, әйтмәйҙәр. Мин быға аптыраным, хатта йәшенмәк уйнауҙары өсөн үпкәләп йөрөнөм. Ныҡлап һораша торғас, ундай хаттарҙың минән башҡа тағы бер-ике әхирәтемдең генә алыуын белдем. Аптыраным быға. Мин бар ҡыҙҙарға ла егеттәр бер төрлө ҡарай тип уйлай инем. Бәҡһаң... Минән башҡа хат алыштырғылаған әхирәтем менән ошо хаҡта һөйләшеп киткәйнек, егеттәрҙең ни өсөн шулай беҙҙе айырыуының сәбәбен ул аңһат ҡына аңлатты.

- Һин бит ауылда иң сибәре, - тине ул миңә. - Шуға бар егеттәр һиңә ғашиҡ. Минең кеүек уртаса матурҙарға бер-икәүһе генә хат яҙа. Ә йәмһеҙерәктәргә бөтөнләй ҡарамайҙар.

Хәтеремдә, мин был яңылыҡҡа шаҡ ҡаттым. Ҡайтҡас, оҙаҡ ҡына көҙгөгә ҡарап ултырҙым. Бүтәндәрҙән бер ниндәй айырма күрмәнем үҙемдә, бөтәһе лә башҡа ҡыҙҙарҙыҡы кеүек, аҙаҡ ниндәйҙер үҙенсәлектәр тапҡандай иттем. Тик улар арҡаһында ғына мине сибәр тип әйтерлеген тапманым. Иң ғәжәбе, егеттәрҙең араһында мин "яратам" тип әйтерлеге юҡ ине. Шаярыша инек, бер-икәүһе киноконцерттан һуң оҙатҡылап та ҡуйғыланы, тик ғашиҡтың оҫҡоно ла күренмәне. Көтә инем, килер ул мөхәббәт, килер! Әммә минең яҙмышым ошо тип әйтерлек егет оҙаҡ осраманы.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ул беҙгә башҡорт телендәге тәүге документаль театр емеше булыуы менән ҡыҙыҡлы һәм йәш ижадсыларҙың тап башҡорт халҡы йәшәгән төпкөлдәрҙә рухи хазиналар эҙләүе ҡиммәт.*



*БАШҠОРТ МӘҘӘНИӘТЕ ЙЫЛЫ*

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Бөрйән районында үткән "Ижади майҙан" семинарының төп маҡсаты - райондарҙың мәҙәниәт, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә Башҡорт мәҙәниәте һәм рухи мирас йылында билдәләнгән төп йүнәлештәр буйынса профессионалдар ярҙамы күрһәтеү ине. Йыйындың эш планы бик тә йөкмәткеле булды, республиканың күнәк төбәге өсөн мөһим һорауҙар ҡаралды, халыҡ һөнәрҙәрен тергеҙеү буйынса һәм һәүәскәр кино төшөрөүселәр өсөн оҫталыҡ дәрестәре үтте. Йыйын яңы мәҙәни күренешкә лә "йәшел ут" бирҙе: Бөрйән сәхнәһендә башҡорт телендә тәүге документаль Вербатим-театр сығыш яһаны.**

# БЫНА ШУНДАЙ ТЕАТР БАР!



Спектакль "Ауыл уҡытыусыһы" тип атала. Ул Республика режиссура һәм драматургия үҙәге (етәкселәре Әлиә Яхина һәм Зиннур Сөләймәнов) менән Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының режиссура һәм актер оҫталығы факультетының 3-сө курс студенттары, шулай уҡ Башҡортостан Яҙыусылар союзының драма секцияһы ойошторған "Замандаш-2021" экспедицияһы материалдары буйынса әҙерләнде.

Башҡортостанда тәүге башҡортса Вербатим-театры нисек барлыҡҡа килде һуң? 2016 йылдағы тәүге театр-драматургия экспедицияһы Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил тарафына йүнәлгәйне. "Нисек йәшәйһең, башҡорт ауылы?" тигән һорауға яуап эҙләгән режиссерҙар, драматургтар һәм актерҙар ҡатнашты ул сәфәрҙә. Студенттар йөҙгә яҡын әңгәмәсе табып, унарлаған фольклор ансамблдәре менән танышып, ғәжәп бай ҡуҙәтнамәләр, иҫтәлектәр йыйып алды, уларҙың иң сағыуҙарын бергә ҡоршап, "Беҙҙекеләр" - "Наши" документаль спектакле менән Өфөлә сығыш яһаны. Әйтергә кәрәк, "вербатим" латинсанан "һүҙмә-һүҙ" тип тәржемә ителә һәм документаль вербатим техникаһында ижад итә. Ундағы бер генә образ да уйлап сығарылмай, интервью биргән кеше үҙ тормош сәхифәһен йә үҙ фекерен нисек һөйләп биргән, шул килеш, "ағыҙмай-тамыҙмай" ғына тиғәндәй, сәхнәгә күсерелә. Йәғни вербатим-театрҙа беҙҙең замандаштар "сәхнәлә телгә килә", ғәжәйеп тере сәхнә теле барлыҡҡа килә. Спектакль ауылдарҙа йәшәгән ватандаштарҙың ҡайнар һулышын бөркөй, бөтә хис-энергияһын сағылдыра, тиергә була. Шулай итеп, ауыл кешеһененң күңелен һәм тормошон яҡтыртҡан заманса тамашалар бик таныҡ икәне күренде. "Беҙҙекеләр" - "Наши" спектакле Рязань ҡалаһында Рәсәйҙең Вербатим-театрҙар фестивалендә унышлы сығыш яһап, Беренсе дәрәжә лауреат дипломын алып ҡайтты. Әммә ул беҙгә башҡорт телендәге тәүге документаль театр емеше булыуы менән ҡыҙыҡлы һәм йәш ижадсыларҙың тап башҡорт халҡы йәшәгән төпкөлдәрҙә рухи хазиналар эҙләүе ҡиммәт. 2016 йылғы тәүге осрашыуҙарҙағы видеояҙмалар буйынса ошо бай яҙмышлы яҡташтарыбыҙ хаҡында өс бүлектән торған телевизион фильмдар шәлкеме эфирға сыҡты һәм интернет селтәре буйлап таралды.

Икенсе "Замандаш" экспедицияһы 2019 йылда Балаҡатай районына йүнәлде һәм Билән, Маҫҡара, Әшәй, Ҡайып, Ҡәркәй ауылдары буйлап үтте. Йәш замандаштар халыҡ алдына бер генә һорау ҡуйҙы: "Ауылдың киләсәге кемдәр ҡулында?" Йөҙәрләгән уҡытыусы, мәҙәниәт хеҙмәткәре, фермерҙар, ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре үҙ тормошо миҫалында донъяға ҡарашы, уй-фекерҙәре, тәжрибәһе, ҡуҙәтеүҙәре менән уртаҡлашты. Был сәйәхәттә тупланған интервьюлар һәм видеояҙмалар 30 сәғәтлек ҙур фондҡа әйләнде һәм документаль фильм нигеҙенә ятты.

Өсөнсө сәфәр 2021 йылдың ҡайнар ҡояшы аҫтында Күгәрсен районы үҙәге Мораҡта һәм йәнә ауылдар буйлап (Үрге Һаҙ, Мәҡсүт, Бикбулат, Туйымбәт, Бикес, Тәүәкән, Хоҙайбирҙин) үтте. "Ауыл уҡытыусыһы кем ул?" тигән ябай һәм бергәтлы тойолған тема буйынса студенттар, режиссерҙар һәм драматургтар йөмгеһе 68 кеше менән әңгәмәләште. Был ихлас әңгәмәселәр - әле яңы эш башлаған, гөрләтеп эшләп йөрөгән һәм хаҡлы ялға сыҡҡан мөғәллимдәр ине. Һәр кем менән уртаҡ тел табып, уҡытыусылыҡ яҙмышы менән ҡыҙыҡһыныусы йәштәрҙе, драматургтарҙы һәм режиссерҙарҙы тәүгә күргән ауыл уҡытыусылары уларға рәхмәт кенә яуҙырҙы. Өфө дәүләт сәнғәт институтының режиссура һәм актер оҫталығы факультетының 3-сө курс студенттары Илгиҙәр Ҡоҙашев, Зәлифә Йәнһүҙина, Азамат Шаһисолтанов, Нәркәс Ҡалмырҙина һәм Байегет Мөхәрләмов доцент Рима Тәлғәт ҡыҙы Харисова етәкселегендә һәр әңгәмәне яңынан тыңлап, өйрәнеп, вербатим техникаһына ҡулайлаштырып, яңы әҫәр өҫтөндә дүрт ай буйы эшләне. Ниһайәт, 2022 йылдың ғинуарында ҡышҡы сессия имтиханды мәлендә улар үҙҙәренең яңы спектаклен тәҡдим итте. Уны ҡарарға республиканың арҙаҡлы уҡытыусылары һәм мәғариф ветерандары, мәғариф органдары етәкселеге, фәнни-тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре, гимназия һәм мәктәп-интернат уҡытыусылары, матбуғат әһелдәре йыйылды. Спектакль бик яҡшы баһа алды.

Алдан вәғәҙә ителгәнсә, студенттар Вербатим-театрҙың яңы емешен үҙҙәренә материал биргән кешеләргә иң тәүҙә алып барып күрһәтергә тейеш ине. Был бурысты атҡарыу ауыр булманы, сөнки Күгәрсен районы етәкселеге, мәғариф һәм мәҙәниәт идаралығы, "Күгәрсен" районы телестудияһы изге уй менән йөрөгән йәштәрҙе ҡушҡуллап ҡаршы алды. Экспедиция мәлендә лә улар һәр яҡлап ярҙам иткәнгә, бөтә шарттар тыуҙырып торғанға күрә, бөтә эҙләнеү, һорашыу, осрашыуҙар ифрат тулы, ихлас, хатта байрамса күтәренке кәйефтә үткәйне. Һәм, ниһайәт, яңы спектакль! Мораҡ башҡорт гимназияһында һәм Мәксүт, Бикбулат, Тәүәкән, Хоҙайбирҙин ауыл мәҙәниәт йорттарында кешеләр тулҡынландырғыс тамашаға йыйылды. Һәм был беренсе гастроль бик файҙалы, фәһемле, унышлы үтте. Йәш ижадсылар Күгәрсен ягының саф күңелле, ҡунаҡсыл халҡына, етәкселегенә ҙур ихтирам менән тулышып, илһамланып ҡайтты.

Һәм баш ҡалала уларға яңы юлдар асылды! "Ауыл уҡытыусы"һын Өфөләге гимназиялар, мәҙәниәт һарайҙары көтөп тора. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ла йәштәрҙең тормошсан һәм халыҡсан сәхнә тамашаһына иғтибар итеп, уны күберәк халыҡҡа тәҡдим итеү яғын хәстәрләй башланы. Ҡоролтайҙың төрлө төбәктәге йыйындарын башҡортса документаль Вербатим-театр спектакле тағы ла тулыландырыр, тигән идея барыһына ла оҡшаны.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Көтөүсене лә Уҡытыусы әҙерләй, президентты ла Уҡытыусы әҙерләй!" - ти спектакль геройы. "Уҡытыусы - донъяла иң бөйөк хеҙмәт", - тип һығымта яһай ул һәм шулай итеп Мәксүт ауылынан Миңлеүәли Мәжитовтың үҙҙарын бөтә донъяға еткерә. Был һүҙҙәр милли мәғарифҡа бөгөн хеҙмәт иткәндәрҙә һәм киләсәктә мөғәллим буласаҡ йәрәктәрҙә өряңы өмөт уттары ҡабыҙа.**

**Сәрүәр СУРИНА, драматург.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# ДУҪЛЫҠ ИЛЕ БИҘӘКТӘРЕ

**"Башҡортостан - дуҫлыҡ иле, һәр бер милләт - уның гөлө" - был юлдар ысынлап та республикабыҙҙың асылын бер юлда аса ла һала, сөнки ул Рәсәйҙә Дағстандан ҡала иң күп милләтле төбәк булып тора. Шуға ла бынан өс йыл элек барлыҡҡа килгән балалар халыҡ хореографияһы фестиваль-конкурсының "Дуҫлыҡ иле биҙәктәре" тип аталыуы ла юҡҡа түгел.**

Талантарға бай республикабыҙ, шуға ла уның һәр төбәгендә тигәндәй халыҡ йырҙарын башҡарыусылар, бейеүселәр конкурстары үтеп тора, әммә үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнауҙан ни фәтүә, һәләттәр артабан үҫтерелергә, оло сәхнәгә сығарылырға, рухи һәм милли ҡиммәттәрҙе быуындан-быуынға тапшырыуҙа ҡусәгилешлек булырға тейеш. Ошо хәҡикәтте күҙ уңында тотоп, 2019 йылда "Дуҫлыҡ иле биҙәктәре" конкурсы ойошторола һәм унда Туймазы ҡалаһының "Сәфәр" өлгөлө хореография ансамбле (етәкселәре - Дамир менән Әлфиә Ибраһимовтар) Гран-при яулап, 100 мең һумлыҡ аҡсалата призға эйә була. Әммә артабанғы пландарға бөтөн донъяны баҫып алған тажзәхмәт ҡамасаулай. Ниһайәт, быйыл был сара ҡабат үҙ эшен тергеҙҙе. Әлбиттә, һайлап алыу туры видеояҙмалар буйынса үткәрелә һәм Риф Ғәбитов етәкселегендәге абруйлы жюри 40-ҡа яҡын коллективтың сығышын ҡарап, 14 апрелдә үтәсәк гала концертҡа 15 финалсыны һайлай. Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залы бинаһында үткән матбуғат конференцияһы тап алда торған тамашаға арналды ла инде. Унда фестивалде ойоштороусыларҙың береһе - БР халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина бындай сараларҙың күп һәм төрлө булыуы кәрәклеген билдәләп, уның балаларҙы кире йоғонтонан һаҡлауҙағы әһәмиәтен билдәләне: "Беҙ барыбыҙ ҙа ата-әсәләр һәм беҙ шуны беләбеҙ: бала ни тиклем күңеленә яткан шөғөлгә мөкиббән бирелә, уның буш ваҡыты бөтөнләй ҡалмай, ул интернет селтәренән азат. Шуға күрә кире күренештәр һаҙлығына батҡансы, әйҙә, йырлаһындар, бейеһендәр - халыҡтарҙың быуаттар буйына тупланған аҡылын һеңдерһендәр. Икенсе яҡтан, үҙ-ара аралашыу дуҫлыҡты нығыта, башҡа этностарға ихтирамлы мөнәсәбәттә булырға өйрәтә".

Уның фекерен "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы директоры Вилдан Яруллин да хуплап, фестивалдең башҡорт мәҙәниәтен генә түгел, ә республикала йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙың мәҙәниәтен үҫтереүгә йүнәлтелеүен, бейеү аша һәр коллектив үҙлеген күрһәтеүен белдерҙе. Ысынлап та, мәшһүр хореографтар һалған бейеүҙәр хәҙер классикаға әүерелһә, йәш хореографтар халыҡ ижады, фольклор материалдарына таянып, яңы бейеүҙәр һала. Жюри рәйесе Риф Фәтих улы быйыл фестивалдең географияһын киңәйтеп Ырымбур өлкәһенән дә бейеү коллективы ҡушылыуын белдерҙе. Шулай уҡ ул конкурс-фестиваль положениеһын артабан камиллаштырыу кәрәклеген билдәләне. БР Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Гөлназ Ғиндуллина 14 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залы фойеһында Милли кейем көнөнә арналған "Халыҡтың сигелгән тарихы" тип аталған һөлгөләр күргәҙмәһе асылыуы тураһында белдерҙе.

Был көндә балалар үҙҙәрен ысын мәғәнәһендә дуҫлыҡ илселәре тип тойор, моғайын, сөнки был сара ниндәйҙер кимәлдә балалар фольклориадаһына әҙерлек тә булып тора - коллективтарҙың баш ҡала урамдарынан үтеүе лә пландаштырыла: быльтыр Өфөлә уҙған Фольклориадала ҡатнашыусылар парады булғайны, быйыл балалар оло сараға репетиция яһай. Һәм иң мөһиме: сараның төп бағыусыһы булып "ЛУКОЙЛ-Уралнефтепродукт" яуаплылығы сикләнгән ширкәт тороуы үҙе үк призҙарҙың лайыҡлы булыуына ишара. Ә инде еңеүселәргә килгәндә, уларҙы 14 апрелдә үҙ күҙҙәребеҙ менән күрербеҙ. Сер итеп кенә әйткәндә быйыл да приздар бик матур: Гран-при яулаусы 100 мең һумлыҡ сертификатҡа эйә буласаҡ. I урынға - 50 мең һум, II урынға - 30 мең һум, III урынға - 20 мең һум. Шулай уҡ айырым номинациялар буйынса ла еңеүселәр билдәләнәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иғтибар итһәгеҙ, иң матур, иң иҫтә ҡалған һәм сағыу тамашалар - балалар ҡатнашҡаны. Хатта иң күңелһеҙ, төҫһөҙ тип тойолғаны ла сәхнәгә балалар сығыу менән икенсе төҫтәрҙә балҡып китә. Уларҙың эскерһеҙлеге, ихласлығы, самимилығы донъябыҙға ысын мәғәнәһендә йән өрә, йәм өҫтәй, күңелдәрҙе сафландыра, донъяға балалар күҙе менән ҡарарға мәжбүр итә. "Дуҫлыҡ иле биҙәктәре" фестиваль-конкурсының да тормошобоҙҙоң бер биҙәге булып, оҙон-оҙаҡ йәшәүен һәм тамаша залының һәр саҡ тиҫтерҙәре менән тулы булыуын теләргә генә ҡала.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*✓ Ауылдаштарыбыҙға бөгөнгө ҡиммәтселек осоронда дәүләттән генә ярҙам көтөү мәғәнәһеҙлек икәнен төшөндөрәйек. Тырыштар сараһын табыр, ас-яланғас ултырмаҫ, аҡса етмәй тип мыжымаҫ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАЙҺЫҘ ҘА БУЛМАЙ

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модаға инеп китте һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Бындай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар бөрөүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә.

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло бутҡаһы тора. Был бутҡала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сөтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тик ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш итә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Йола буйынса ир-аттың дәрәжәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙың дәрәжәһенән ҙурыраҡ булған илдәрҙә (Индонезия, Пакистан, Ҡытай, Сәғүд Ғәрәбстаны, Уганда) тәмәкене башлыса ир-ат тарта. Австралия, АҠШ, Канада, Швеция, Норвегия кеүек үҫешкән илдәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәмәке тартыусылар тәмәкесе ирҙәр менән бер тигеҙ тиерлек. Белгестәр әйтеүенсә, әгәр ҙә был илдәрҙең иҡтисади-сәйәси сценарийы ошо уҡ йүнәлештә барһа, ун-егерме йылдан миллионлаған ҡатын-ҡыҙ төрлө сирҙәргә һәм иртә үлем хәүефенә дусар буласаҡ. Әгәр ҙә бөгөн тәмәке тартыу һөҙөмтәһендә йылына 5 миллион кеше үлһә, 2030 йылға был һан 8 миллионға тиклем етеүе ихтимал, ти аналитиктар.

■ Офис хеҙмәткәре көнөнә уртаса ете сәғәт йөклай, ә эш өҫтәле артында 5 сәғәт 41 минут буйына ултыра. Ғалимдар иҫәпләүенсә, бындай дөрөҫ булмаған нисбәт уның физик ҡына түгел, ә психик сәләмәтлегендә лә сағылыш таба. Инглиз ғалимдары әйтеүенсә, күберәк хәрәкәт итеү физик торошто яҡшырта, ә ул үҙ сиратында күңел тыныслығына килтерәсәк.

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

**Белеп-ишетеп тораһығыҙ - илебеҙ төрлө санкциялар ҡамауында ҡалды. Ошондай шарттарҙа ауырлыҡтарға бирешмәҫ өсөн беҙ ни эшләй алабыҙ? Ил күргәнде күрербеҙ, тип кенә хушҡүңеллеләнә алмайбыҙ, әлбиттә. Был ҡулдарҙы һәлендереп, күктән төшкәнде көтөп ултырыу һымаҡ ҡабул ителә. Республиканың һәр районында, һәр ауылында эшләгән "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары, ағинәйҙәребеҙ, халыҡты әле күптән түгел генә булған йәшәү рәүешебеҙгә ҡайтырға, йәгни өй алды биләмәләрендә Хеҙмәт тигән иң изге "фронтты" ойошторорға, баҡсаларыбыҙға картуф-йәшелсә сәсергә, ҡураларыбыҙҙа малды, ҡош-ҡортто ишәйтергә саҡыра. Түбәндә Ғафури ағинәйенең ошо юҫыҡтағы кәңәш-мөрәжәғәттәрен еткерәбеҙ.**

# КАРТУФ ҮҪТЕРӘЙЕК,

## мал ҡураларыбыҙҙы йәнләндерәйек!



***Рәмзиә МОНАСИПОВА, Ғафури районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе:*** Бар тирә-яҡтан илебеҙгә санкциялар ябырылғанда, әҙәп-әхлаҡ нормалары юҡҡа сыға барғанда, кемдәрҙер эшһеҙлек, билдәһеҙлек алдында ҡаушап ҡалғанда, кешеләргә генә түгел, ҡош-ҡортҡа, мал-тыуарға ла төрлө ҡурҡыныс янағанда, беҙ, ағинәйҙәр, үҙебеҙ тыуып-үҫкән ерлеккә генә хас булған асылыбыҙҙы, йәшәү рәүешебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы халыҡҡа ҡайтарыуға көс сарыф итергә тейешбеҙ.

Матурлыҡ - тормош биҙәге. Иң беренсе эшебеҙҙе матурлыҡ тыуҙырыуҙан башлайыҡ. Йәшәгән йортобоҙҙа таҙалыҡ, бөхтәлек тыуҙырайыҡ, йорт алдарын гөл-сәскәләргә күмәйек. Төрлө йәшелсә үҫентеләре үҫтереп, ауылдаштарыбыҙға таратайыҡ, "Иң матур, таҙа ихата" бәйгеһе иғлан итеп, тырыштарҙы иғлан итәйек, күнелдәрен үҫтерәйек.

- Милли йөҙөбөҙҙө билдәләгән кейемгә өҫтөнлөк бирәйек, тегенселәр мәктәбен тергеҙәйек. Хәҙер милли орнаментлы туҡымалар тәҡдим итеүселәр байтаҡ, үҙебеҙгә, бигерәк тә ҡыҙ балаларыбыҙға, тик башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас фасонлы кейемдәр тегеп кейәйек. Ейәнсәрҙәребеҙ бер-ике быуаттан һуң беҙҙең кейемдәргә ҡарап һоҡланһын, үҙҙәре лә ғорурлыҡ менән шундай өҫ кейеме булдырырға ынтылһын. Әсәләр - милләт йөҙө, тибеҙ. Милли йөҙөбөҙҙө һаҡлайыҡ. "Милли кейем кейәбеҙ " тип исемләнгән ғаилә конкурстары ойоштора йыҡ, дәртләндереү саралары тураһында уйлашайыҡ.

● "Киске Өфө"лә, башҡа гәзит-журналдарҙа халҡыбыҙҙың боронғо кәсептәре тураһында материалдар күп баҫыла. Ир-егеттәребеҙҙе шундай мәғлүмәттәр менән таныштырып, уларҙа төрлө һөнәр-кәсептәргә ҡыҙыҡһыныу, теләк уятһаҡ, өйҙәребеҙҙе яҡындарыбыҙ эшләгән йыһаздар менән биҙәһәк, ниндәй шәп буласаҡ! Осоҙ ҙа, мәңгелек тә, дан да.

● Районыбыҙҙа тупраҡ уңдырышлы, климат та уртаса, ауыл һайын буш ятҡан баҡсалар күп, артығы менән йәшелсә, картуф үҫтереп, ҙур килем алырға мөмкин. Ағинәйҙәр, ауылдаштарыбыҙға бөгөнгө ҡиммәтселек осоронда дәүләттән генә ярҙам көтөү мәғәнәһеҙлек икәнен төшөндөрәйек. Тырыштар сараһын табыр, ас-яланғас ултырмаҫ, аҡса етмәй тип мыжымаҫ. Ялан-ҡырҙарыбыҙҙа йыл һайын ишелеп еләк, урмандарыбыҙҙа балан, муйыл, миләш, бөшмәк, баҡсаларыбыҙҙа алма, ҡарағат, сейә уңа. Йый ҙа артығын һат, аҡса эшлә, йыл буйы үҙеңә етерлек ҡайнатмаһын, ҡағын, йәшелсәләреңдән салаттарын әҙерлә, ҡышҡылыҡҡа туңдырғыста һаҡла, көҙөн "Уңыш байрамы" йәрминкәләренә алып сығып, алыш-биреш ит. Хәҙер аңлы кеше сифатлы, ауыл ерендә үҫкән аҙыҡ-түлекте өҫтөн күрә, сәләмәт тормош рәүеше алып барырға тырыша.

● Шифалы үләндәр йыяйыҡ, миндек, селек һеперткеләре, йүкәнән йыуғыстар әҙерләйек.

● Районыбыҙ Торатау туристик зонаһына ингән, таҙа Еҙем, Еғән буйҙарынан, билдәле мәмерйәләребеҙҙән йыл әйләнәһенә ял итеүселәр өҙөлмәй, улар рәхәтләнеп һөтөн-ҡаймағын, майын, коротон, балын һатып аласаҡ, әҙерләп сығар ғына. Сит ил компаниялары етештергән эсемлектәрҙән кәштәләр бушаған, сифатлы һөт, айран, ҡатыҡ, буҙа, ҡымыҙға ла һорау артасаҡ.

● Себер тарафтарында йөрөгән улдарыбыҙҙы, ир-егеттәребеҙҙе ҡайтарайыҡ, ауыл хужалығы өлкәһендә әлеге ваҡытта үҙ эшенде асыуҙың ни тиклем отошло буласағын аңлатайыҡ, ярҙам итәйек. Ғафури ерлегендә күпләп һарыҡ, йылҡы малы үрсетеүгә мөмкинлектәр юҡ, ҡиммәткә төшә. Ғафуриҙар, ата-бабаларыбыҙҙың кәсептәренә тоғро ҡалып, урмансылыҡ, һунарсылыҡ, игенселек, ҡортсолоҡтан табыш ала ала.

Мин һанап киткән эш төрҙәренең береһенә лә сығым китмәй, киреһенсә, әлеге ҡиммәтселек, юҡлыҡ заманында туҡ та, етеш тә йәшәп була. Былар бөтәһе лә боронғо халыҡ кәсептәре, ата-бабаларыбыҙҙың көнитмеш сараһы. Беҙгә миҙгел йолаларын тергеҙергә, өмәләрҙе йәнләндерергә кәрәк, бейек кәртәләр, ҡапҡалар артына боҫоу башҡорттоң булмышы түгел. Иман юлын тотоп, һәммәбеҙгә лә муллыҡта, етеш тормошта йәшәргә яҙһын.

ШАҢДАУ

# ӘСӘЙЕМӘ ХАТ



**Ҡулымда "Киске Өфө" гәзитенең 11-се һаны. "Хаттар яҙҙым ултырып, аҡ ҡағыҙҙы тултырып..." тигән мәҡәләне ҡабат-ҡабат уҡып, унда яҙылғандар менән тулыһынса килешеп, ҡулыма ҡәләм алып, үҙемдең өс йыл ил алдындағы бурысымды үтәгән осоромда әсәйемә яҙған бер хатымдың йөкмәткеһе менән бүлешке килде.**

Мин үткән быуаттың 60-сы йылдарында йәш һалдат курсын Көнбайыш Украинала, Львов өлкәһе Бреды ҡаласығында алып, ант бирҙем. Тернополь өлкәһе Тернополь ҡалаһында өс йыл хеҙмәт иттем. Минең һалдат тормошондағы тәүге хат, әлбиттә, үҙеңде был донъяға тыуҙырған, тәрбиәләп, егет ҡорона еткереп, әрмеләргә күҙ йәштәре аша оҙатып ҡалған әсәйгә юл ала: "Был донъяла минең берҙән-берем, ҡәҙерле әсәйем, күҙ нурым! Һинә яҡынлы һалдат сәләмдәремде Көнбайыштан иҫкән иртәнге йылы таң елдәре аша оҙатып, һаулыҡ-сәләмәтлек, оҙон ғүмерҙәр теләп ҡалыусы улың Әмирхан. Сәләм күп итеп апайымдарҙын, ағайымдың ғаиләләренә, туған-тыумасалдарға, күрше-күләнгә. Беҙ Өфөнән поезд менән "товарняк" вагондарға тейәлешеп, билдәһеҙ яҡтарға юлландыҡ. Оҙатып барыусылар беҙҙең менән һөйләшмәнеләр ҙә, ҡайҙарға юлландыҡ, тигән һорауҙарыбыҙға "Барып төшкәс, күрерһегеҙ" тип кенә яуаплап ҡуйҙылар.

Минең ҡәҙерлеләрем, мин башлап хат яҙам, ә һеҙ һүҙмәйһүнләмай яуап яҙырһығыҙ, тип өмөтләнәм. Эх, һағындым барығыҙҙы ла, минең өсөн мал-тыуарымды, Алабайҙы, һабантуйҙарҙа сабышҡан атым Ялманды иркәләгеҙ. Сөнки сит илдәрҙә ере лә, һыуы ла, һауаһы ла, офоғо ла, үҫеп ултырған ағасы ла, ҡош тауыштары ла ят, нишләптер, күңел ҡабул итмәй.

Әсәкәйем, бошонма, минең барыһы ла һәйбәт, үҙең эшкә ныҡлап өйрәттең бит, көслө бул, етеҙ бул, егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тип тылҡығандарың бик килешеп ҡалды, хатта "дед"тарға ла бирешмәйем. "Марш-бросок" тигән күнекмәләрҙә "һә" тигәнсә ҡарт һалдаттар менән бер тиң килә м, ә бит арҡалағы вещмешокта 8 кило ҡом, шинель, карабин. Шулай, әсәй, "мах" бирмәй улың. Ә урындағы халыҡ һалдаттарға ҡарата үтә лә битараф, һалдат меҫкенде күрә алмайҙар - шунһына иҫ китә, беҙ бит бары ил алдындағы бурысыбыҙҙы үтәйбеҙ...

Хеҙмәттәштәрем төрлө милләттән: урта азиаттар, поляк, беларус, эстон, грузин, әрмән, рус. Улар минән "Кем һин?" тип һорайҙар, "Я - башкир", тиһәм, "Ҡайһы яҡта ул?" тип иҫтәре китә, ә мин ғорурланып: "Бөйөк Урал ҡаялары араһында үҫтем",- тип маҡтанам. Ҡайҙа ла беҙҙең Уралға еткән ер юҡ шул. Тауҙарыбыҙ, уларҙы ҡаплап алған йәп-йәшел урмандар, ялтырап ятҡан күлдәр, боролоп-боролоп аҡҡан йылғалар, унда уйнаған балыҡтар, һыуҙа йөҙгән аҡҡоштар, өйрәк-ҡаҙҙар, болондары тулы бесәнлек, туғайҙарында һайраған ҡоштар, балан, ҡарағат, муйыл, емеш-еләк, йыуа, ҡымыҙлыҡ, һарына, сылтырап сығып ятҡан шишмә һыуҙары - Хоҙайым бүләк иткән оло хазина!

Бик ныҡ һағындым, әсәй, һинең йомшаҡ ҡулдарың менән баштан һыйпауҙарыңды, тәмле ашыңды, йылмайып ҡына уятыуҙарыңды, эшкә оҙатып, ҡаршы алыуҙарыңды. Үндай яҡшы сифаттар тик әсәйҙәргә генә булалыр..."

Быуа шундай хаттар яҙа инек элек әсәйҙәргә. Хәҙер бармы икән бындай йөкмәткеле хат яҙыусылар?..

**Әмирхан ШАҺИМӘРҘӘНОВ.**
**Әбйәлил районы Дәүләт ауылы.**

**✔ Әгәр кеше намаҙҙа булмайынса тороп та ураҙа тота икән, ул ҡабул ителмәйәсәк, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Йәғни ураҙаның ғәмәлдә булыуы намаҙ ғәмәленә һис бәйле түгел.**



ИЗГЕ РАМАҘАН АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

# ТУҠЛАНЫУҘЫҢ ҮҘ РӘТЕ БАР

**Ураҙа тотҡанда тәү сиратта күбебеҙҙең ҡанына һеңгән зарарлы ғәҙәттәрҙән арыныу кәрәк. Бөтөн тәмле-баллы, ыҫланған, ҡыҙҙырылған, майлы, тоҙло ризыҡтар хаҡында онотоп торорға тура килер. Ураҙа ваҡытында организмға былай ҙа ауыр, уға туҡланыуҙың яңы режимына күнегеү мөһим.**



Иң тәүҙә кухняғыҙҙағы табаларҙы күҙ алдынан ситкәрәк алып ҡуйығыҙ. Бер ризыҡты ла ҡыҙҙырырға кәрәкмәй. Үҫемлек майы менән бигерәк тә. Был май бары тик йылытмаған хәлдә генә файҙалы. Йылытҡанда ул зарарлы матдәләргә тарҡала башлай.

Ураҙа ваҡытында нимә һәм нисек ашарға һуң?

Сәхәр ашын һыу йәки башҡа шыйыҡлыҡ эсеүҙән башларға. Уның күләме тәүлеклек норманың яртыһы, йәғни 2-3 стакан булырға тейеш.

Итте кискелеккә ҡалдырырға, ә бына һөт ризыҡтары һәм бутҡалар - иң һәйбәте. Ураҙа - төрлө бутҡаларҙың файҙаһы һәм тәмен татып ҡарау өсөн бик ҡулай ваҡыт. Мәҫәлән, бойҙай ярмаларының борай (полба) тигәне туҡлыҡлылығы һәм организм өсөн кәрәкле матдәләре яғынан бик файҙалы. Икенсе урында - ҡарабойҙай. Ул - калория сығанағы. Шулай уҡ яман шешкә ҡаршы тора торған үҙенсәлектәре лә бар. Ҡарабойҙайҙы, сәләмәтлегең ниндәй хәлдә булыуға ҡарамаҫтан, теләһә ҡайһы йәштә лә ашарға була. Һоло һәм тары ярмалары ла файҙалы. Ә бына дөгө, борсаҡ һәм фасолде һирәгерәк ашаһаң да була.

Әсетелгән һөт ризыҡтарын күҙәнәклек һәм үҫемлек аҡһымы менән тулыландырып, мәҫәлән, ҡыяр һәм йәшел тәмләткестәр ҡушып, ашағыҙ. Сөтләүекле-емешле әҙер ҡатнашмаларға ла ҡатыҡ, ряженка йәки кефир болғап ашарға мөмкин.

Ашауҙың төп ваҡыты - ифтар. Уны ике өлөшкә бүлергә кәрәк. Беренсеһендә 1-2 стакан һыу эсеп, бер аҙ ҡапҡылап алырға. Унан сәғәт-сәғәт ярым тәнәфес яһарға. Шунан һуң инде ит һәм ит ризыҡтарынан, балыҡ, ярмалы аштар, шулай уҡ бутҡаларҙан торған икенсе өлөшөн дә иркенләп ашарға мөмкин.

Ит мәсьәләһенә килгәндә иһә, һарыҡ итенә ҡарағанда һыйыр итенә өҫтөнлөк бирергә кәрәк. Әҙ генә тоҙ һибеп, һыуҙа, быуҙа бешереп, фольгаға төрөп әҙерләп, балыҡты күберәк ашарға тырышырға. Әммә ул ҡыҙҙырылған да, ыҫланған да булмаҫҡа тейеш.

Грек сәтләүеге, кешью һәм башҡа төрлөләре - бик һәйбәт калория сығанағы. Тик арахис ҡына булмаһын.

**Интернеттан.**

# УРАҘАҢ ҠАБУЛ БУЛҺЫН!

**Намаҙ уҡымаған, башҡа дини бурыстарҙы үтәмәгән кешенең ураҙаһы ҡабул буламы? Рамаҙан айында, ғәҙәттә, ураҙаға ҡағылышлы бына ошондай һорауҙар күбәйеп китә.**

Мәҫәлән, Ислам дине бурыстарын теүәл үтәмәһә лә, ул ҡушҡандарҙан ситкә лә тайпылмай йәшәүсе ҡайһы бер кешеләр "Ураҙа торорғамы, юҡмы?" тигән икеләнеүҙәргә бирелеүсән. Бигерәк тә намаҙ уҡымаған кешеләр ошондай һорау, икеләнеү алдында ҡала. Етмәһә, дин ғәмәлдәрен теүәл үтәп тә, үҙҙәре был өлкәлә әллә ни белемле булмаған ҡайһы бер мосолмандар уларға: "Әгәр һин намаҙға баҫмағанһың, хиджабта ла түгелһең икән, һинең ураҙаң ҡабул булмаясаҡ", - тип кәнәш бирә башлай.

Бындай хәлдә шуны аңлау кәрәк: Исламдың бурыстары һәр кемгә ҡарата айырым төбәлгән һәм улар бер-береһенә бәйле түгел. Әгәр кеше намаҙҙа булмайынса тороп та ураҙа тота икән, ул ҡабул ителмәйәсәк, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Йәғни ураҙаның ғәмәлдә булыуы намаҙ ғәмәленә һис бәйле түгел. Ҡатын-ҡыҙ яулыҡлы булмаһа, уның ураҙаһы ла ҡабул ителә. Шуға күрә лә икеләнеүҙәргә бирелгән кешеләргә бындай шиктәрҙән ҡотолорға һәм ниәт итеп, ураҙа тота башларға кәрәк, сөнки тап ошо ураҙаһы был кешенең "яһынан тыуыуына", яҡшы яҡҡа үҙгәреүенә сәбәпсе булыуы бик ихтимал. Был турала Ҡөрьәндә лә асыҡ әйтелә: "Әй, кешеләр! Һеҙҙе барлыҡҡа килтергән, һеҙҙән элек булғандарҙы барлыҡҡа килтергән Раббығыҙға ғибәҙәт ҡылығыҙ - моғайын, һеҙ тәҡүәләләрҙән булырһығыҙ!" Йәғни, намаҙҙа булмаһағыҙ ҙа ураҙа һеҙҙе рухи йәһәттән үҙгәртер.

Әлбиттә, ураҙа ғәмәленә ата-бабаларҙан ҡалған ниндәйҙер серле йола рәүеше итеп ҡарарға ярамай, уның мәғәнәһенә төшөнөргә тырышыу фарыҙ. Был ғәмәл һеҙҙең йәрәгегеҙҙе үҙгәртәсәк: асыҡҡан һәм һыуһаған саҡтарыбыҙҙа ғына беҙ ашарға ризығы булмаған кешеләрҙең хәлен аңларға өйрәнербеҙ, улар өсөн эсәр һыуҙың да хатта ризыҡ икәнен күрербеҙ. Был тойғолар беҙҙең тормошҡа мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртеп, уға икенсе күҙлектән ҡарарға өйрәтер. Рамаҙан айының ҡиммәте ғәйәт ҙур. Тап ошо айҙа ғына бирелеүсе бәрәкәт һәм Аллаһтың мәрхәмәтен тойорбоҙ; был рәхмәтте башҡа ваҡытта тотҡан ураҙала алып булмай икәнен дә белеп ҡуйығыҙ. Рамаҙан йәнә лә ҡылған гонаһтарың өсөн үкенеү, тәүбәгә килеү һәм яҡшылыҡ яғына үҙгәреү өсөн дә һәйбәт ваҡыт.

**Илшат ХАФИЗОВ әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

**Ҡиммәт баһаланған кире программаланыу**

Дини инаныуҙар ҙа һеҙҙе кире программалауы мөмкин. Мәҫәлән, киң таралған "Аҡса - яуызлыҡ", "Аҡса бары тик алдаҡсыларҙа ғына була" тигән ышаныуҙар беҙҙең күңелдәргәсә һаҡланған һәм килеп еткән. Әммә улар нигеҙһеҙ. Тағы бер миҫал: "бысраҡ аҡсалар". Күрәһең, бындай инаныуҙар менәр йылдар элек, вәғәҙе яңылыш аңлауҙан килеп сыҡҡандыр. Ғайса бәйғәмбәр: "Бер кем дә бер юлы ике әфәндегә хеҙмәт итә алмай: йә береһен күрә алмаясаҡ, икенсеһен яратасаҡ; йә береһенә тырышып эшләп, икенсеһенә ғәмһеҙ буласаҡ. Аллаһҡа һәм маммонға хеҙмәт итә алмайһығыҙ", - тигән. Шунда уҡ "Ерҙә, көйә күбәләге һәм тут юҡҡа сығарған, бурҙар урлаған урында үҙегеҙгә байлыҡ йыймағыҙ; күктә, көйә күбәләге һәм тут юҡҡа сығара алмаған, бурҙар урлай алмаған урында байлыҡ туплағыҙ, сөнки һеҙҙең байлығығыҙ ҡайҙа, йөрәгегеҙ ҙә шунда", тиелә.

Быны бары тик матди байлыҡҡа ҡыҙығып, рухи ҡиммәттәрҙе һанға һуҡмаусыларға әйтелгән тип аңларға кәрәк. Ул ваҡыттарҙа, бөгөнгө кеүек үк, тормош өсөн аҡса кәрәк булған, ә һунырҡа Аллаһ йорттарында аҡсаның булыу мөһимлеге хаҡында һөйләй башлағандар.

Бөгөнгө көнгә тиклем һеҙ һүҙегеҙгә буйһондоғоҙ, улар һеҙгә байлыҡтың лайыҡлы ағышын быуып торҙо. "Тин һумды һаҡлай" тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Бер тинендә һаҡлап ҡалдың икән, тимәк, бер тин эшләнен. Әгәр мең һумығыҙҙы һаҡлап ҡалһағыҙ, тимәк, мең һум эшләнегеҙ. Бындай вариант аңға тиҙерәк барып етә.

Һеҙ оноторға тейешле башҡа раҫлауҙар ҙа бар. Мәҫәлән: "Аҡса туҙҙырыу уны эшләүгә ҡарағанда еңелерәк", "Рәссамдар (актерҙар, яҙыусылар һ.б.) ярлылыҡта йәшәргә тейеш", "Тәүҙә башҡаларға, уларҙан һуң һиңә ғына үҙемә", "Мин байлыҡҡа лайыҡ түгел"... Яҙыусы Луиза Хэй 500 доллар отоп, дәрескә ҡыуанып килгән бер уҡыусыһы тураһында былай тип яҙа: "Мин ышанмайым, - тип ҡабатлай ул. - Мин бер ваҡытта ла бер нәмә лә отҡаным булманы". Күрәһең, ул был аҡсаға лайыҡлы түгелмен, тип уйлай. Бер аҙнанан ул бөтөнләй уҡыуға килмәне, сөнки аяғын һындырғайны. Дауаланыу тап 500 доллар тора ине".

Бер кемгә лә үҙен ярлы булғаны өсөн әрләүҙәре оҡшамай, әммә байлыҡҡа һәм ярлылыҡҡа ҡарата шәхси инаныуҙары уның яҙмышын хәл итә. Бай булыу өсөн һеҙ байлыҡ тураһындағы ҡуҙаллауҙарығыҙҙы үҙгәртергә тейешһегеҙ.

Уҙбаһағыҙҙы ерле юҡҡа күтәреү һеҙҙе бай яһамаҫ. Хәйер, был етешһеҙлек түгел, һеҙ, ысынлап та, нимә эшләйһегеҙ һәм нимә эшләргә һәләтһегеҙ - шуны юғары баһалай алаһығыҙ. Үҙ инаныуҙарығыҙҙы анализлап, улар араһында кире һәм байлыҡҡа, матди етеш тормошҡа кәртә булып торғандарын табырға кәрәк.

Әгәр: "Йыһан байлыҡҡа тулы, һин үҙ өлөшөңдө алырға хаҡлы", - тиһәләр, асыуланырһығыҙмы? Бәлки, быға ышанмаҫһығыҙ? Йәиһә был бары хыял ғына тип уйларһығыҙ...

Аҡса туҙҙырғанда нимә тояһығыҙ? Үҙегеҙҙе ғәйепле тоймайһығыҙмы? Өҫтәлдә түләүегеҙҙе көтөп ятҡан квитанцияларға ҡарап нимә уйлайһығыҙ? Улар һеҙҙе еңергә теләгән дошмандармы, әллә депрессия сәбәптәреме?

Ярлыларҙы ярлыраҡ итеүсе бик күп фекерҙәр бар. Байҙар кеүек фекерләгеҙ - шунда уҡ аҡсағыҙ барлыҡҡа килер.

Эйе, Йыһанда, ысынлап та, байлыҡ күп, аҡса үҙе беҙҙең ҡулға килергә атлығып тора - бигерәк тә аңығыҙ алдағы биш бүлектә яҙылғандар һөҙөмтәһендә уларҙы ҡабул итергә әҙер булһа.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# РУХИ ТАҘАРЫНЫУ ӨСӨН...



**Намаҙ уҡыу тәү сиратта рухи таҙарыныу, иманды нығытыу өсөн кәрәк. Әммә намаҙҙың физик тәнгә сәләмәтлегә тураһында ла онотоорға ярамай. Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тип юҡҡа ғына әйтелмәй бит.**

Намаҙ, беренсенән, нервылар системаһына бик ыңғай тәьсир итә. Намаҙ уҡығанда кеше ғәйрәтләнеп, асыуланып ултырырға тейеш түгел бит. Тимәк, ул үҙ-үҙен, минең нервылар көйлө, зиһенем камил, тип ышандыра, тынысландыра. Тәһәрәт алыуы, матур кейемдәр кейеп намаҙға баҫыуы кәйефен дә күтәрә.

Икенсенән, ғәрәп телендә уҡылған доғалар энергетик көскә эйә. Намаҙ уҡыусы үҙендә ыңғай, яҡшы энергия туплай.

Өсөнсөнән, намаҙ физик ағзаларҙың сәләмәтлеген һаҡлаусы бер сара булып тора. Тик ултырғанда, хәрәкәт итмәгәндә ҡан аяҡҡа китә. Намаҙ уҡыған ваҡытта иһә ҡан йөрөшө әүҙемләшә, был үҙ сиратында ағзаларҙың яҡшыраҡ эшләүенә булышлыҡ итә. Кеше эйелеп сәждәгә киткәндә баш мейеһе ҡан менән тәьмин ителә. Мейе күҙәнәктәре яҡшыраҡ эшләй башлай. Шуға күрә намаҙҙа булғандар хәтер юҡлыҡҡа зарланмай, уларҙа склероз кеүек сирҙәр осрамай. Даими эйелеү күҙҙең ҡан баҫымын бер кимәлдә тоторға, шулай уҡ йыш осрай торған күҙ ауырыуы - ҡара ҡылауҙан һаҡланырға булышлыҡ итә. Тағы ла үпкә, йөрәк, тәндең өҫкө өлөшөндәге башҡа ағзаларҙың эшмәкәрлеге яҡшыра, ҡан тамырҙары ныҡый. Намаҙ уҡыған кешенең тын алышы яйға һалына. Был үҙ сиратында ҡан баҫымының көйләнеүенә булышлыҡ итә.

Намаҙ ваҡытында бөтә тән мускулдары әүҙемләшә. Был арыу-талыуҙы бөтөрә, быуындар һыҙлауын баҫа. Тимәк, намаҙ үҙенә күрә бер физик күнекмә булып тора. Ололар, ғәҙәттә, физик күнекмәләр эшләмәй. Әммә, иғтибар итегеҙ, намаҙҙа булған оло кешеләр һәр ваҡыт үҙҙәрен яҡшы формала тота. Улар тиҙ хәрәкәт итеүсән, әүҙемдәр, һаулығына зарланып бармайҙар. Тимәк, намаҙ уҡыу - көнөнә биш тапҡыр физик күнекмәләр эшләү тигән һүҙ. Бынан тыш, һөйәк туҡымаларының минералдар менән әүҙемерәк тәьмин ителеүе бигерәк тә ололар араһында йыш осрай торған остеопороз кеүек сирҙәрҙе һирәгәйтә.

Кеше ауыр операция кисергән йәки уға эйелергә ярамай икән, ул барыбер намаҙын ҡалдырмаҫҡа тейеш. Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, эйелеп уҡый алмайһың икән, ултырып уҡы, ултырып уҡый алмаһаң, ятҡан килеш уҡы. Кеше хәрәкәт итә алмаһа, керпектәрен ҡыймылдатып булһа ла намаҙ ҡылырға тейеш. Был осраҡта ул тиҙерәк һауығасаҡ.

Шулай итеп, намаҙ рухи сәләмәтлекте лә, физик һаулыҡты ла яҡшырта. Кеше көн дауамында организмын төрлө йәһәттән контролдә тота, көйләп тора, үҙ-үҙе менән идара итә. Тимәк, ул көн дауамында арымай-талмай, дәртле, тыныс, күтәренке кәйефтә, ауырлыҡтарға бирешмәй йөрөй тигән һүҙ.

**Мәхмүҙә ҒӘЙНУЛЛИНА,**
**медицина фәндәре докторы,**
**профессор.**



## 11 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
2.45, 3.30 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Историческая среда. [12+]**
**23.30 Х/ф "Демидовы". [12+]**
**2.15 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**

## 12 АПРЕЛЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
2.45, 3.30 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "У дачи". [12+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.15, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**22.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Демидовы". [12+]**
**2.45 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**

## 13 АПРЕЛЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
2.45, 3.30 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "У дачи". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Однофамилец". [0+]**
**3.30 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**5.15 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 14 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Земский доктор. Продолжение". [16+]
2.45, 3.30 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Верь мне". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "День семейного торжества". [12+]**
**2.45 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 15 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.00 Х/ф "Кривое зеркало души". [12+]
3.20 Х/ф "Обратный билет". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/с "Год на орбите". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 23.00, 5.00 Автограф. [12+]**
**14.00 "Хазина". [0+]**
**14.30 "Бай баҡса". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Тамға". Финал II Международного конкурса мастеров башкирского национального костюма. [12+]**
**17.30 Тормош. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**22.00 Образцовая башкирская семья. [12+]**
**23.30, 3.30 Х/ф "Гонка с преследованием". [12+]**
**1.30 Спектакль "Сваха". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 16 АПРЕЛЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.10 Х/ф "Ключи от прошлого". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Чужая". [12+]
0.35 Х/ф "Сводная сестра". [12+]
3.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Аксакал". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкортостан. Хроники covid. Новые вызовы. [12+]**
**19.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Образцовая башкирская семья. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Т/с "Марево". [12+]**
**2.15 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 17 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.20, 3.15 Х/ф "Чужое лицо". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.10 Х/ф "Ключи от прошлого". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Терапия любовью". [12+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "По проселочной дороге к мечети". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Хазина. [0+]**
**17.30 "Любезники, любизар". Концерт, посвященный 210-ой годовщине Победы в Отечественной войне 1812 года. [12+]**
**19.15 Уроки мужества. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 3.00 Т/с "Марево". [12+]**
**0.30 Спектакль "Касатка". [12+]**
**2.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 апрель "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың повесы буйынса), драма. 12+
**14 апрель Премьера! "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 12+
**16 апрель "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 18.00 16+
**17 апрель "Гөлбостан"** (Ҡ. Даян, Д. Йосопов инсц.), драма. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 12.00 6+
**16 апрель "Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (Р. Гюнтекин), музыкаль драма. 18.00 12+
**17 апрель "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 18.00 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Өфө балалар филармонияһы сәхнәһендә:**
**16 апрель "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+
**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**16 апрель "Три поросенка"** (Д. Гәрәева). 12.00, 14.00 0+
17 **апрель "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 апрель "Приношение маэстро"** Т. Сәйфуллин һәм С. Низаметдинов иҫтәлегенә концерт. 6+
**14 апрель "Уралымда күңелем"** башҡорт халыҡ йырҙары. 6+
**16 апрель "Музыку слушаем вместе. Сказки органного зала".** 11.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 апрель Премьера! "Мәскәүгә лә керҙек беҙ, Парижды ла күрҙек беҙ!"** "Ашҡаҙар" төркөмө концерты. 12+
**14 апрель "Чума XXI века@zhizni.net"** (В. Сигарев), драма. 12+
**16 апрель "Я верю в любовь"** А. Уйылдановтың концерты. 18.00 6+
**17 апрель "Музыка расскажет, музыка покажет"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**13 апрель "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 12+
**14 апрель "День рождения кота Леопольда"** (Ф. Хайт, Б. Савельев), йырлы-моңло әкиәт. 0+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә тыуған көндәрен билдәләүсе - **Дүртөйлө районы** Әсән ауылынан Эльвира Камалова, **Дүртөйлө ҡалаһынан** Руфина Камалова, Тәпсилә Йыһаншина, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Гөлназ Шәүәлиева, Рөстәм Дилмөхәмәтов, Хәкимйән Хәмитов, **Бөрйән районы** Байназар ауылынан Көнһылыу Ҡотлобаева, **Әбйәлил районы** Ҡужан ауылынан Азат Хәйруллин һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, бай, бәхетле оҙон ғүмер, эштәрегеҙҙә уңыштар, күңел тыныслығы, рух күтәренкелеге теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| (Апрель - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (10) дүшәмбе | 4:25 | 4:55 | 6:25 | 13:30 | 17:59 | 20:09 | 21:39 |
| 12 (11) шишәмбе | 4:23 | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:00 | 20:11 | 21:41 |
| 13 (12) шаршамбы | 4:20 | 4:50 | 6:20 | 13:30 | 18:01 | 20:13 | 21:43 |
| 14 (13) кесе йома | 4:18 | 4:48 | 6:18 | 13:30 | 18:03 | 20:15 | 21:45 |
| 15 (14) йома | 4:16 | 4:46 | 6:16 | 13:30 | 18:04 | 20:17 | 21:47 |
| 16 (15) шәмбе | 4:13 | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:05 | 20:19 | 21:49 |
| 17 (16) йәкшәмбе | 4:11 | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:07 | 20:21 | 21:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*✓ 20-се быуатҡа тиклем ул дауалап булмай торған сирҙәр иҫәбендә булған. Тарихтан билдәле булыуынса, эпидемия меңәрләгән кешенең ғүмерен алып киткән.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 7 АПРЕЛЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ҺАУЛЫҠ КӨНӨ




СӘЛӘМӘТ БУЛЫҒЫҘ!



# ҮПКӘ СИРЕ

**Йыл һайын март аҙағында Бөтә донъя туберкулезға ҡаршы көрәш көнө билдәләнә. Был үпкә сире - йоғошло. Ул айырыуса тормош кимәле түбән һәм көнкүреш шарттары насар илдәрҙә ныҡ таралған. Уға ҡаршы планлы рәүештә махсус саралар үткәрелеү сәбәпле, беҙҙең илдә хәл сағыштырмаса тотороҡло. Әммә был тынысланырға була тигәнде аңлатмай. Сир һәм уның билдәләре ниндәй? Уны нисек иҫкәртергә була? Ауырыуҙарҙы профилактикалау буйынса врач Маргарита УТИЦКАЯ ошо һорауҙарға яуап бирҙе.**

- Ҡасандыр был ауырыуҙы "сихут" йәки "чахотка" тип йөрөткәндәр. 20-се быуатҡа тиклем ул дауалап булмай торған сирҙәр иҫәбендә булған. Тарихтан билдәле булыуынса, эпидемия меңәрләгән кешенең ғүмерен алып киткән. Йәмғиәттә үпкә сире - йәшәү кимәле түбән кешеләрҙең ауырыуы тип ҡабул ителһә лә, инфекция етеш тормошта йәшәгән кешеләрҙе лә аямаған. Мәҫәлән, уның менән композитор Фредерик Шопен, яҙыусылар Антон Чехов, Максим Горький, Романовтар ғаиләһе лә сирләүе билдәле.

Хәҙерге заманда туберкулезды тәүге стадияла уҡ асыҡлайҙар һәм дауалайҙар. Беҙҙең ғалимдар өс быуын туберкулезға ҡаршы препараттар булдырҙы һәм улар бөгөн һөҙөмтәле файҙаланыла. Шуға бәйле үпкә сиренән вафат булыусылар һәм ауырыу йоҡтороусылар һаны кәмене: 100 мең кешегә 62 осраҡ тура килә. Әммә микобактериянан бер кем дә һаҡланмаған, сөнки туберкулез таяҡсалары асыҡ һауала үрсемәһә лә, зарарлау көсөн оҙаҡ юғалтмай, бысраҡ, йыуылмаған, елләтелмәгән бүлмәләрҙә улар йылдар буйы һаҡланырға мөмкин.

Бынан тыш, туберкулезға булышлыҡ иткән башҡа сәбәптәр ҙә бар: улар - тәмәке, спиртлы эсемлек, наркотиктар ҡулланыу, даими стресс кисереү, дөрөҫ туҡланмау, насар экология. Шулай уҡ хроник үпкә сире булғандар, Вич-инфекцияһын йөрөткәндәр, психик сирлеләр, шәкәр диабеты менән ауырығандар - хәүеф төркөмөндә.

Туберкулез сирле кеше янында булғандарға, шулай уҡ сәбәпһеҙ хәл бөтһә, ябыҡтырһа, тән температураһы күтәрелһә, йүткергәндә ҡан сыҡһа, мотлаҡ врачҡа күренергә кәрәк. Ҡайһы берҙә сир үҙен һиҙҙермәҫкә лә мөмкин. Шуға күрә даими рәүештә, йәғни йылына бер тапҡыр флюорография тикшереүе үтеү мөһим. Нурланыуҙан ҡурҡырға урын юҡ, хәҙер цифрлы ҡорамалдар ҡулланыла, уның нур көсөргәнеше быға тиклем файҙаланылғандарға ҡарағанда 10 тапҡырға кәмерәк. Һөҙөмтәһе лә шул уҡ көндө әҙер була. Иҫкәртеү сараларына шулай уҡ зарарлы ғәҙәттәрҙән баш тартыу, сәләмәт тормош алып барыу, стрестан һаҡланыу, ит, балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары кеүек аҡһымға бай ризыҡтар менән туҡланыу инә, - ти Маргарита Әнүр ҡыҙы.

**Лена БАРЫЕВА яҙып алды.**

ҺОРАҒЫҘ...

# ОЛОНДО АҒАРТАМ...



**Алмағастарҙың олонон ағартыу өсөн эзбиз иҙелмәһе урынына һатыуҙа булған һыу эмульсиялы буяу ҡулланырға яраймы? Белеүемсә, был буяу оҙаҡ йыуылмайынса һаҡлана.**

- Емеш ағастары олонон ағартыу өсөн был буяуҙы ҡулланырға тәҡдим ителмәй. Белгестәр әйтеүенсә, уның ағас ҡайырыһының тере туҡымаһына зыян килтереүе ихтимал. Уның урынына ВС-511 махсус һаҡлаусы буяу ҡулланырға була, был буяу төрө ғилми учреждениелар тарафынан уйлап табылған. Буяу олон өҫтөндә атмосфераға бирешмәүсе, әммә һауаны яҡшы үткәреүсе ҡатлам барлыҡҡа килтерә. Бынан тыш, ул ағасты сысҡан кеүек кимереүселәрҙән һәм ҡуяндарҙан һаҡлаясаҡ. Әммә был буяуҙы һатыуҙа табыуы ауыр, шуға баҡсасылар өсөн иң ҡулайлы һәм осһоҙло ысул булып һаман да эзбиз ҡулланыу ҡала. 10 литр һыуға 2-3 килограмм яңы һүндерелгән эзбиз һәм 1-2 килограмм балсыҡ һалығыҙ. Ул ағасҡа яҡшы ятһын өсөн ошо ҡатнашмаға 2 литр самаһы айыртылған һөт йәки 50-100 грамм йылытылған столяр елеме өҫтәргә була. Шулай уҡ ағас олонон ағартыу өсөн 10 литр һыуға 2-3 килограмм эзбиз һәм 0,5 литр баҡыр купоросы өҫтәп болғатырға мөмкин.

# ҺЫРҒАНАҠ УЛТЫРТАМ...

**Апрель айы һырғанаҡ ултыртыу өсөн иң ҡулай ай, тиҙәр. Был үҫентене нисек дөрөҫ ултыртырға?**

- Ысынлап та, был ҡыуаҡты яҙын ҡаҙып алалар һәм яҙын ергә ултырталар. Һырғанаҡ яҡты, һауа яҡшы алышынып торған, ундырышлы, артыҡ тығыҙ булмаған урынды ярата. Әгәр ҙә үҫемлек ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алып ултыртылһа, бер ҡыуаҡтан 20 килограмдан ашыу емеш йыйып алырға мөмкин. Һырғанаҡ ултыртыла торған ер тығыҙ булһа, соҡорға ҡом, ваҡ таштар (төҙөлөш сүп-сары, кирбес онтаҡтары һ.б.) өҫтәргә кәрәк. Был тупраҡҡа һауа яҡшыраҡ үтеп инһен өсөн кәрәк.

Ҡыуаҡ ултыртыла торған соҡор 40-50 см тәрәнлектә, 70-80 см диаметрҙа булһын. Унда шулай уҡ 300 грамм фосфор һәм башҡа органик ашламалар индереп, тупраҡ менән яҡшылап болғатырға кәрәк. Баҡсасылыҡ буйынса төрлө әҙәбиәттә һырғанаҡты тәрәнерәк ултыртыу яҡшыраҡ, тигән фекер таралған. Әммә белгестәр әйтеүенсә, был осраҡта үҫентеләр йышыраҡ һәләк була. Ергә ултыртыр алдынан һырғанаҡтың тамыр системаһын яҡшылап ҡарап сығып, һынған тамырҙарын алып ташларға, яраларын осло бысаҡ менән таҙартып, балсыҡ иҙелмәһенә тығып алырға кәрәк.

**12-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Торҡа. Яҡупова. Себен. Сәхнә. Бабич. Тәҙрә. Күнекмә. Кәкүк. Сәйнүк. Икмәк. Уҡа. Әминә. Еләк. Ритм. Ислам. Ат. Шхуна. Тирәк. Михнәт. Тантана.

**Вертикаль буйынса:** Кәримова. Сантиметр. Көнкүреш. Ялан. Хеҙмәт. Әтәс. Тауис. Урман. Аманат. Буранбаева. Тәхет. Ата. Фа. Бик. Әкиәт. Әҙәм. Үлән. Чук. Әрмәк.

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# МИЛЛИ ЙӨҘӨН ҺАҠЛАҺЫН ИНЕ



**Моңло, аһәңле йырҙар башҡарыуы менән халыҡ һөйөүен яулаған йырсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Заһир Иҫәнсурин яҙҙың тәүге көндәрендә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында эстрада йырҙарынан торған концерт ҡуйҙы. Ошо айҡанлы Заһир Билал улына бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

**Һеҙ тәүҙән үк халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы булараҡ танылыу яулағайнығыҙ. Бөгөн репертуарығыҙҙа халыҡ йырҙары өҫтөнлөк итәме, әллә эстрада йырҙарымы?**

- Халыҡ йырҙарын һис иғтибарһыҙ ҡалдырғаным юҡ. Сөнки улар йырсыға үҙен формала тоторға ла ярҙам итә. Элек репертуарымда күптәр башҡарған "Абдрахман", "Уйыл", "Ҡаһым түрә", "Урал", "Сәлимәкәй", "Зөлхизә" һәм башҡа шундай башҡорт халыҡ йырҙары булһа, бөгөн һирәгерәк яңғыраған йырҙарыбыҙҙы өйрәнәм. Был шуға ла бәйле: яҡташым, билдәле йырсы Сөләймән Абдуллин менән бер осрашып, унан "Ир-егеткәй" тигән йырҙы өйрәнгәндә, ул минең ҡайһы бер халыҡ йырҙарын белеү-белмәүем хаҡында һорашып: "Белгәс, нишләп тыуған ерендә сыҡҡан йырҙарҙы йырламайһың?" - тип һорағайны. Мәшһүр йырсының, беҙҙең өсөн остаз булған шәхестең ошо һүҙҙәре сәмгә тейҙе: әле бер нисә һирәк яңғыраған йыр өйрәндем һәм киләсәктә уларҙы тамашасыларыма ишеттерергә, яҙмаһын эшләргә уйлап йөрөйөм.

Ә бөгөн бик күп халыҡ йырҙарының сәхнәләрҙән яңғырамауының сәбәбе шул: улар йәш йырсылар өсөн "асыҡ" түгел, көйҙәре, һүҙҙәре иркен ҡулланыуҙа түгел, уҡыу программаларына инмәгән. Башҡарылмаған йырҙарыбыҙ һанап бөткөһөҙ, уларҙың бихисабы З.Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институты архивында ла һаҡлана. Шуға ла уларҙы өлкәнерәк быуын йырсылары репертуарынан өйрәнеп йырларға тура килә. Киләсәктә башҡорт халыҡ йырҙары, романстар, башҡорт арияларынан һәм башҡа классик композицияларҙан торған айырым камерный концерт ойошторорға ниәт итеп торам. Ә был юлы тамашасыға эстрада йырҙарынан ғына төҙөлгән кисә тәҡдим иттем. Сараның "яңыса шоу" тигәне күберәк үҙемә һәм репертуарыма ҡағылды, заманса техника мөмкинлектәрен файҙаланып эшләргә тырыштыҡ. Йәғни, был ике йүнәлештә лә берҙәй эшләргә тырышам, тип әйтергә теләйем.

**Башҡорт эстрадаһында үҫеш бармы?**

- Әлбиттә, бар. Әле беҙ бала саҡта өлкән йәштәгеләр йәшерәк йырсыларҙың саҡ ҡына икенсе төрләрәк башҡарыуын ишетеп: "Эй, йырмы инде был! Беҙ йәш саҡта был йырҙы бына шулай йырлай торғайнылар", - тигән фекер-тәнҡит әйтелә ине мотлаҡ. Хәҙер ҙә шул һүҙҙәр ишетелеп ҡала, әммә йылдар үтә, донъя үҙгәреп тора һәм йыр сәнғәте лә артта ҡалмай. Әлбиттә, профессиональ йырсыларҙың тәү бурысы - һәр төрлө йырҙарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу һәм һәр быуынға ишеттереү, беҙгә халыҡ йырҙарын да, инде күптән классикаға әүерелгән үҙебеҙҙең композиторҙарҙың ижадын да онотторамау мөһим. Мин бөгөнгө йәш йырсыларҙы һис тәнҡитләмәйем, улар йәш быуынды ылыҡтырған, күңеленә яткан йырҙар яҙа. Әммә киләсәктә башҡорт эстрадаһы милли йөҙөн юғалтып ҡуймаһын ине, тигән уй борсой барыбер. "Милли музыка" тигән төшөнсә бар һәм шуны һәр ваҡыт күҙ уңында тотоп ижад итеү мөһим. Әле йәштәр араһында ҡаҙаҡ йырҙарын башҡортсаға әйләндереп, йә үҙ йырҙарын ҡаҙаҡтарға, Көнсығыш халыҡтарына хас көйҙәр һалып башҡарыусылар байтаҡ. Берәй шәп яңы йырсы килеп сыҡһа, уның стилен ҡабатлауҙар, уға оҡшарға тырышыуҙар ҙа юҡ түгел. Бына былар барыһы ла беҙҙең башҡорт милли музыкаһын боҙоуға килтермәһә ярар ине, тигән фекер тыуҙыра. Миллилегебеҙҙе һаҡлап ҡалыу төп бурысыбыҙ булһын. Хатта бөгөн балалар, үҫмерҙәр урыҫ эстрадаһын, башҡа сит ил йырсыларын күберәк тыңлаһа ла, үҫә төшкәс, барыбер уларҙан алыҫлашасаҡтар һәм тыуған мөхитендә барлыҡҡа килгән, асылына яҡын булған йыр-моңға әйләнеп ҡайтасаҡтар. Бына шуны иҫәптә тотоп та ижад итергә кәрәктер. Үҙебеҙҙең башҡорт эстрадаһында ла быға миҫалдар байтаҡ. Мәҫәлән, үткән быуаттың 90-сы йылдарында, 2000 йылдарҙа әллә күпме йүнәлештәр барлыҡҡа килһә лә, халыҡ күңеленә яҡын, үҙ эсенә милли музыка һыҙаттарын йәки мәғәнәле йөкмәтке алғандарының ғына ғүмере оҙон булды.

**Һеҙ ҙур сәхнәлә 15 йыл ижад итәһегеҙ...**

- Эйе, 2007 йылда Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһына "Каруанһарай" төркөмөнә эшкә саҡырғайнылар. Баҡтиһәң, 15 йыл да үтеп киткән был ваҡиғаға. Һәр ваҡыт сәхнәгә ҙур тулҡынланыу менән күтәреләм, һәр сығыштан һуң, тамашасы менән осрашҡандан һуң әллә күпме тәьҫорат алып төшәм. "Каруанһарай" төркөмө менән эш башлаған осор, гастролдәр, һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың Милли симфоник оркестры менән берлектә тормошҡа ашырылған проекттар, һәр концертым - ҡабатланмаҫ минуттар, тәьҫораттар, тәжрибә һәм эшемдән кинәнес уята.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заһир Билал улынан тамашасыларға әйтер теләктәре хаҡында һорағас: "Минең ижадыма битараф булмауҙары өсөн рәхмәтлемен. Йырсыны тамашасы бар итә", - тигәйне. Киләсәктә лә шулай тамашасыларығыҙ менән бер тулҡында булып, башҡорт милли музыкаһы өсөн иң һыҙғанып ижад итеп йәшәргә насип булһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

АФАРИН!

# КЕСКӘЙ ГЕНӘ ҺЫЛЫУҠАЙ



**Ун йәшлек Өфө ҡыҙы "Йәш Мисс Рәсәй 2022" матурлыҡ конкурсында Гран-при яуланы.**

Регина Хужина "Russian Beauty 2022" Гүзәллек, мода һәм талант фестивале барышында "Йәш Мисс Рәсәй 2022" матурлыҡ конкурсында өлгәште был уңышҡа. Егерме йыл рәттән ойошторолған конкурста Башҡортостан ҡыҙы тәүге тапҡыр ҡатнашты. Ул халыҡ-ара гүзәллек конкурстарында ҡатнашыу өсөн сертификат менән бүләкләнде. Фестиваль бөйөк Пьер Кардендың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы уҙғарылды. Ҡатнашыусыларҙы Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Вячеслав Зайцев һәм мода тарихсыһы, "Модалы хөкөм" программаһын алып барыусы Александр Васильев бүләкләне. Матурлыҡ һәм моделдәр конкурсында ҡатнашыусылар дизайнерҙар кейемен күрһәтеү мөмкинлегенә эйә булды. Фестивалдең бүләк фонды 1 миллион һум тәшкил итте.

Регина Хужина - Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы. Был Гран-при - ҡыҙҙың унынсы еңеүе. 2021 йылдың майында ул "Башҡортостан гүзәле" конкурсының балалар номинацияһында еңеүгә өлгәште, Мәскәүҙә "Miss & Mister Effulgence" халыҡ-ара матурлыҡ конкурсында "Мини мисс" исемен алды. "Минең яратҡан шөғөлдәрем бик күп. Биш йәшемдән Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамблдең балалар бейеү студияһына йөрөйөм. Шул уҡ ваҡытта моделинг менән шөғөлләнәм, мода күрһәтеүҙә ҡатнашам, инглиз телен өйрәнәм, яҡшы уҡыйым. Быйылдан вокал һәм сәхнә телмәре дәрестәрен алам. Хатта үҙемдең йырымды яҙҙырҙым!" - тип һөйләне "Башинформ"ға Регина Хужина.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҘЕ УҪАЛДАН...

## ситкә ҡас

Ярлы булһаң, дуҫ ҡаса, ҡарый булһаң, ырыҫ ҡаса.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был донъяла башҡарылған бар эштәр өмөт ярҙамында тормошҡа атҡарылған.

**(Мартин Лютер).**

Көсһөҙ кешеләр һәр саҡ уңайлы мәл көтә, ә көслөләр ул мәлде үҙҙәре тыуҙыра.

**(Максим Горький).**

Әсә һөйөүенә сорналып үҫкән кешене еңеүсе тойғоһо һәм уңышҡа ышаныу ғүмер буйы оҙата бара.

**(Зигмунд Фрейд).**

Алыҫ киләсәктә буласаҡ ауырлыҡтар тураһында уйламаған кешене... яҡындағы күңелһеҙлектәр һағалап тороусан.

**(Конфуций).**

Маҡсатҡа барып етмәйенсә, эшеңде ташлап ҡуяһың икән, тимәк, һин - ялҡау. Ялҡау кеше бер ваҡытта ла еңеү яуламай, ә еңеүсе кеше бер ваҡытта ла ялҡау булмай.

**(Наполеон Хилл).**

Ҙур булмаған өлөштәргә бүлеп эшләһәң, бер эш тә ауыр тойолмай.

**(Генри Форд).**

Үҙеңде бәхетле тояһың икән, ни өсөн бәхетле булыуыңды берәмтекләп тикшермә. Был күбәләктең матурлығын тикшереү өсөн уны өлөштәргә бүлеүгә тиң булыр ине.

**(Паоло Мантегацца).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бик ҙур аҡыл туплаған бер кеше һәр ерҙә "Мин үҙ яҙмышыма үҙем тәьҫир итә алам" тип ҡабатлай торған булған. Быны бер саҡ Яҙмыш ишетеп ҡалған һәм был аҡыл эйәһенең арт һабағын уҡытырға ҡарар иткән. Ул ҡарт, ауырыу ҡарсыҡ һынында әлеге аҡыл эйәһе янына килгән.**

**- Һаумы, аҡыллы кеше, - тигән ҡарсыҡ.- Мин һинең яҙмышың, ә ҡулымдағы ҡапсыҡта һинең йәнең. Хәҙер әйт инде: йәнең минең ҡулда була тороп, һин нисек миңә, яҙмышыңа, тәьҫир итә алаһың?**

**Аҡыл эйәһе оҙаҡ уйлап тормаған, бер таяҡ эләктереп алған да, ҡарсыҡтың башына һеңгәҙәтә һуҡҡан һәм ҡулынан йәне һалынған ҡапсыҡты тартып алған. Һәм шулай тигән:**

**- Һәр ваҡыт өсөнсө юл табып була...**

**Шунан аҡыл эйәһе ҡапсыҡты яурыны аша һалып, үҙе һайлаған юлдан киткән. Ул бына шулай үҙ яҙмышына үҙең хужа була алыуҙы иҫбат иткән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22014

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99, 246-03-24 |
| Матбуғат таратыу | 246-03-23 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
8 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 435

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.